ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

10-16 февраль (шаҡай) 2018

№6 (788)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡаҙымы, әллә ҡаҙылыҡмы?



7

Тәнебеҙҙәге ике ағза хаҡында һүҙ



8-9

Юрамал ҡағыҙ

(Булған хәл)



12-13

Хәйбуллалар...

саралар ға башланғыс бирҙе



15

ТВ-программа 14

*Фекерегеҙгә хайран булһағыҙ - аҙашырһығыҙ, халыҡҡа тәкәбберлек итһәгеҙ - хур булырһығыҙ. Эштәрегеҙҙә аҡыл эйәләре менән кәңәшләшһәгеҙ - үкенмәҫһегеҙ. Ғалимдар мәжлесендә ҡатнашһағыҙ - ололанырһығыҙ. Ахмаҡтар мәжлесенә инһәгеҙ - уларҙың береһе булып иҫәпләнерһегеҙ. Аҙ һөйләгеҙ - аҙ яңылышырһығыҙ. Ялған һөйләп, исем сығарһағыҙ - бөтә халыҡтың күҙенән төшөрһөгөҙ.*

*Ризаитдин Фәхретдин.*

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Элегерәк "Иң яҡшы бүләк - китап" тиҙәр ине. Һеҙгә китап бүләк иткәндәре бармы? Ә үҙегеҙ?

***Фәрзәнә МӨХӘМӘҘИЕВА, хеҙмәт ветераны:*** Хәҙер ҙә шулай тип әйткәндәрен йыш ишетәм һәм ҡыуанып китәм. Бәләкәйҙән китап яраттым. Башланғыс кластарҙа уҡыған саҡта ауылыбыҙҙағы китапханала эшләүсе апайҙың: "Инде ниндәй генә китап бирәйем икән һиңә, бөтә булған китаптарымды уҡып бөттөң бит..." - тип аптырап ултырғанын һаман хәтерләйем. Ул замандарҙа - үткән быуаттың 60-сы йылдарында - беҙҙең ауылға электр энергияһы ла килеп етмәгәйне әле. Шәм йәки мейес уты яҡтыһында, әсәйҙән әрләнә-әрләнә, ҡаҙалып китеп башҡорт, рус, һинд, бирма халыҡ әкиәттәре һәм башҡа төрлө китаптарҙы уҡып ҡыҙҡыша инем. Әсәйҙең әрләүе лә шул: эңерҙә уҡып, күҙең боҙолор, тигәндән ары китмәй ине, сөнки башҡа сәбәп юҡ: ҡушылған эш-йомоштары үтәлгән, дәрестәр әҙерләнгән. Интернатҡа барғас, унын китапханаһының ҙурлығына, байлығына иҫем киткәйне, ләкин башҡортса китаптарҙың күбеһен, ысынлап та, уҡыған булып сыҡтым. Шуға, тәүҙә ҡыйыныраҡ булһа ла, эргәгә һүҙлек алып ултырып, русса китаптарға керештем. Артабанғы яҙмышымдың шуға ла әҙәбиәт менән бәйләнеп китеүе бик тә тәбиғи ине: БДУ-ның филология факультетына индем. Ғөмүмән, тормош юлымда иң тоғро юлдаштарым да, иң яҡын дуҫтарым да ана шул китаптар булды минең. Һатып та алдым, бүләк тә иттеләр. Эшем ижад кешеләре, яҙыусыларыбыҙға яҡын булғанлыҡтан, уларҙың яҙып, бүләк иткән китаптарын ҡәҙерләп һаҡлайым. Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб апай Биишева, прозаиктар Әхмәр Үтәбай, Гөлсирә Ғиззәтуллина, Миләүшә Ҡаһарманова, халыҡ шағирҙары Назар Нәжми менән Рауил Бикбаев, билдәле драматург Азат Абдуллин, шағир һәм шағирәләр Сафуан Әлибай, Таңһылыу Ҡарамышева, Миңлегөл Хисамова, Зөһрә Ҡотлогилдина, Гөлфиә Юнысова, Салауат Әбүзәр, Рәмил Дәүләтҡолов кеүек ихтирамлы авторҙарҙың үҙ ҡулдары менән яҙып бүләк иткән китаптарын изге күреп ҡәҙерләйем, улар менән ғорурланам, йыш-йыш ҡулыма алып, ҡабат-ҡабат уҡыйым. Бошонған, икеләнгән, күңел ниндәйҙер һорауҙарға яуап эҙләп, аңҡы-тиңке килгәндә, улар һәр саҡ минә ярҙамға килә, күңелемде күтәрә, үҙ-үҙемә ышанысты арттыра. Яҙыусы түгелмен, китаптарым юҡ, шулай ҙа яҡшы китаптар һатып алып, яҡындарыма, дуҫтарыма йыш бүләк итәм. Дөрөҫ, бөгөнгө заманда ҡайһы берәүҙәр китап бүләк итеүҙе өнәп тә бөтөрмәй. Ундайҙар тормош ҡиммәттәрен икенсерәк әйберҙәрҙә күрә, тик минең китапҡа булған мөнәсәбәтем заманына ҡарап үҙгәрмәй. Минең өсөн китап - мәңгелек ҡиммәттәребеҙҙең иң берәгәйлеһе. Мәҫәлән, башҡортса "Ҡөрьән" китабын, Башҡортостаныбыҙ, шулай уҡ Салауат Юлаев тураһында энциклопедияларҙы, "Урал батыр" эпосын һәм башҡа шундай һәр башҡорт өсөн өҫтәл китабы булырҙай хазина баҫмаларыбыҙҙы һатып алып, яҡындарыма һәм бик күп дуҫтарыма бүләк иттем - ат менгәндәй һөйөнәләр!

(Дауамы 2-се биттә).

АФАРИН!

# БАЛАНДЫҢ...

## белемгә ынтылышын хупла



**Рәсәйҙең генә түгел, сит илдәрҙең дә төрлө юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеү мөмкинлеге асыҡ бөгөн йәштәргә, ни бары тырышлыҡ һәм белемле булыу ғына кәрәк. Ошоға бәйле, Башҡортостандың аҡыллы йәштәре республиканан ситкә уҡырға китеп, артабан шунда төпләнеп ҡалған осраҡтар йышайҙы. Хәҙер мәктәпте тамамлаған балалар ғына түгел, һәләтле уҡыусылар ҙа хатта республиканан ситтә белем алыуҙы хуп күрә башланы. Шундай уҡыусыларҙың береһе, Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Тимур ДӘҮЛӘТБАЕВ Нидерландтарҙа үткән XIV Бөтә донъя тәбиғи фәндәр буйынса юниорҙар олимпиадаһында алтын миҙал яулап ҡайтҡас, уның Өфөләге Республика иҡтисад лицей-интернатындағы уҡыуын ташлап, Саранскиҙағы һәләтле балалар лицейына уҡырға китеүе тураһында бөтәһе лә белде. Беҙ Тимурҙың әсәһе, Гөлсәсәк Дәүләтбаева менән бәйләнешкә сығып, улының ни өсөн Саранск лицейын һайлауы тураһында һораштыҡ.**

(Дауамы 2-се биттә).

12+

✔ **Башҡортостанда ла шундай һәләтле балалар өсөн махсус шарттар тыуҙырылған лицейҙар булмауы күңелде ҡыра. Бәлки, Өфөлә күслә мәктәптәр барҙыр, ләкин ауылда йәшәгән кешеләр унда балаларын уҡыта алмай.**



ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Элегерәк "Иң яҡшы бүләк - китап" тиҙәр ине. Һеҙгә китап бүләк иткәндәре бармы? Ә үҙегеҙ?

**(Башы 1-се биттә).**

***Илшат ӘЛМӨХӘМӘТОВ, Өфө дәүләт авиация-техник университеты студенты:*** Буласаҡ һөнәрем - инженер-техник, ләкин мин мәктәптә гуманитар фәндәрҙе лә яратып уҡыным. Айырыуса башҡорт һәм рус әҙәбиәттәре дәрестәрен көтөп ала инем. Китапҡа һөйөүҙе иң беренсе булып шулай ҙа әсәйем менән атайым уятҡандыр миндә, сөнки, уларҙың һөйләүенсә, атлай башламаҫ борон уҡ әле алдыма төҫлө һүрәтле китаптар һалып, әүрәтеп ултыртыр булғандар. Ҙур кешегә оҡшатып, башты ҡырын һалып, оҙаҡ итеп һүрәттәр ҡарап ултырғанмын. Өс йәш тулыуға, мин инде китап тотоп, эштән ҡайтҡан атайҙың диванға барып ятыуын көтөп кенә торам икән, сөнки энциклопедия уҡып бирергә вәғәҙә иткән була, ти ул. Нисек кенә арыған булһа ла, атай мине алдына ултырта ла, ҡысҡырып әкиәт, шиғырҙар уҡый, һүрәттәге йәнлектәр, предметтарҙың исемен әйттереп өйрәтә. Аҙағыраҡ инде уҡырға яратыуымды күреп, улар миңә бик күп ҡыҙыҡлы китаптар бүләк итте. Ындай традицияға әле лә тоғролар. Мәктәптә уҡығанда ла беҙ, малайҙар, 8 март байрамында ҡыҙҙарға китап бүләк итә инек. Дөрөҫ, әле йәштәр араһында китап бүләк итеү һирәк ғәҙәт, сөнки теләгән китабыңды хәҙер интернеттан табып уҡырға була. Был транспортта йөрөгәндә бигерәк йайлы. Әлбиттә, ризалашам, китап - иң шәп һәм универсаль бүләк, сөнки ҡайны саҡ ихтыяжы юғарыраҡ булған дуҫтарыңа нимә бүләк итергә белмәй аптырағанда ла ярҙамға килә торған сара ул.

***Айгөл ЛАТИПОВА, Өфөләге "Планета"китап магазины һатыусыһы:*** Шуныһы ҡыуаныслы: интернет-магазиндар һәм виртуаль китапханалар заманында йәшәһәк тә, китап магазиндарынан кеше өҙөлгәне юҡ. Фән өлкәһе әһелдәре, яҙыусылар, студенттар, мәктәп уҡыусылары, башҡа һөнәргә эйә китап һөйөүсе дуҫтарыбыҙ йыш була беҙҙә. Һәм уларҙың береһе лә буш ҡул менән, эҙләгән тапмай сығып китмәй. Һис юғында, эҙләгән китаптарын тапмаған хәлдә лә, беҙ уларға ярҙамға килергә әҙер торабыҙ: кәрәкле китапҡа заказ ҡабул итеп, бер ни тиклем ваҡыттан ул китапты алдырабыҙ. Бүләккә китап эҙләүселәр ҙә йыш була бында. Хәҙер китаптың нимдәйе генә юҡ! Ә шулай ҙа бүләккә теләһә нимдәйен алып булмай. Шуға былай осраҡта файҙаһы тейер бер генә кәңәшемде еткермәксемен. Иң тәүҙә бүләк тапшырыласаҡ кешегеҙҙең ҡыҙыҡһыныу өлкәһен, буш ваҡыттарында ни менән шөғөлләнергә әүәҫлеген, яратҡан шөғөлөн белергә кәрәктер. Мәҫәлән, ул, бәлки, һәүәҫкәр балыҡсылыр йәки агастан төрлө әйберҙәр эшләү, һырлау оҫталығына эйәлер, бәшмәксе йә баҡсасылыр. Тарихи, хәрби әҙәбиәт, мемуарҙар уҡырға яратҡандар ҙа байтаҡ. Ҡатын-ҡыҙ, нигеҙҙә, аш-һыу төрләндерергә, бәйләм бәйләргә ярата, әҙәби китаптар уҡырға әүәҫ. Ошондай мәғлүмәттәрҙе белә алһағыҙ, китап һайлауы ла еңелерәк буласаҡ. Ә ундай ҡыҙыҡлы, иң мөһиме - кәрәкле китапбүләкте ҡулдарына алған һайын рәхмәтле булыр һеҙгә, сөнки былай яҡшы сифатлы ҡағыҙҙа сағыу иллюстрациялар менән биҙәлгән китаптарҙың махсус бүләк-даналары бик күп нәшер ителә һәм беҙҙә уларҙың йәнең теләгәнен һатып алырға мөмкин. Хаҡтары ла йөҙәндә ҡыҙартырлыҡ түгел: бүләк икән - бүләк булһын, шатлыҡ килтерһен ул кешегә, ә аҙаҡ берәй мәйөштә онотолоп, туҙан баҫып ятмаһын. Һәр хәлдә, яҡындарыма, дуҫтарыма бүләккә китап һайлағанда, мин тап шул ҡараштан сығып эш итәм.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

АФАРИН!

# БАЛАҢДЫҢ...

## белемгә ынтылышын хупла



**(Башы 1-се биттә).**

- Улым Тимур менән сикһеҙ ғорурланам, ул уҡыуҙа ла, тәртип йәһәтенән дә бер ҡасан да миңә ҡыйынлыҡ килтермәне, һәр ваҡыт ҡыуандырып ҡына тора. Тимур Республика иҡтисад лицей-интернатына һигеҙенсе класҡа уҡырға барҙы, уға тиклем үҙебеҙҙең Аҡъяр ауылы 2-се һанлы мәктәбендә белем алды. Ауылда уҡығанда башланғыс синыфтарҙа уҡ төрлө олимпиада, конкурстарҙа ҡатнашты, төрлө предметтар менән ҡыҙыҡһынды һәм китаптар, энциклопедиялар, журналдар уҡырға яратты. Үҙем дә балаларҙың һәләтен асыр өсөн улар мәктәпкә бармаҫ элек үк ҡыҙыҡлы китаптар, аң кимәлен үҫтереүгә йүнәлтелгән күнекмәләр бирелгән журналдар алдырырға тырыштым. Тимур һәм Камила игеҙәктәр, шуға уларҙың ҡыҙыҡһыныуҙары ла уртаҡ булды, хатта берәй балалар энциклопедияһын уҡып сығып, бер-береһенең белемен тикшереп, төрлө һорауҙар бирееп тә уйнай торғайнылар.

Зирәк балаға уҡыуы ла еңел бирелә бит, 5-6-се синыфтарҙа уҡығанда Тимурҙы дәрестәр ҡыҙыҡһындырмай башланы. Компьютер, телефон уйындары менән саманан тыш мауығып, дәреска әҙерләнмәй башлағас, берәй яҡшы белем усағына күсереп уҡытырға булдым. Ләкин Тимурҙың башта ситкә уҡырға киткеһе килмәне. Шуға, Республика иҡтисад лицей-интернатына 8-се синыфҡа ғына уҡырға барҙылар. Был белем усағы ойошторған йәйге лагерҙа улым химия уҡытыусыһы Айнур Мансур улы Ғүмәров менән танышып, химия фәненә ылығып китте. Лицейҙа уҡыған саҡта төрлө кимәлдәге һигеҙ олимпиадала ҡатнашты, бөтәһендә лә беренсе урын яуланы.

Саранск ҡалаһында үткән олимпиадала ҡатнашҡан сағында ундағы һәләтле балалар өсөн тәғәйенләнгән махсус белем усағы менән танышып ҡайтып, уларҙан сағыру алғас, оҙаҡ уйлап йөрөнө лә, уҡырға китергә хәл итте. Мин ҡаршы килмәнем, сөнки ул һәр ваҡыт көслө белемле тиҫтерҙәре менән уҡырға, көслө уҡытыусыларҙан белем алырға хыялланды. Республика иҡтисад лицей-интернатында ла уҡытыусылары көслө ине, әммә Саранскиҙа Тимур өсөн махсус дәрестәр теҙмәһе төҙөнөләр, шуға өҫтәп - бушлай йәшәү һәм туҡланыу, төрлө өҫтәмә курстар, яҡшы стипендия. Ғөмүмән, бала уҡып белем алһын һәм һөҙөмтәләр күрһәтһен өсөн бөтә шарттар тыуҙырҙылар. Тимур донъя кимәлендәге олимпиадала ҡатнашыу өсөн биология һәм физика фәндәрен тәрәндән өйрәнде, биш ай әсендә бөтә кәрәкле курсты үтте. Әле ул туғыҙынсы синыфта уҡырға тейеш булһа ла, унынсы синыфтың уҡыу программаһы буйынса шөғөлләнә. Былар барыһы ла, һис шикһеҙ, бик ҙур тырышлыҡ, уҡырға ынтылыш талап итә. Тимур хатта йәйге каникулдарында ла ял итә алманы, Мәскәүҙә үткәрелгән махсус курстарға әллә нисә тапҡыр барып ҡайтты, өйҙә үҙаллы шөғөлләнде. Шуға уның тырышлығын күреп, мин һәр ваҡыт күтәрмәләп, хуплап ҡына торам. Әлбиттә, Башҡортостанда ла шундай һәләтле балалар өсөн махсус шарттар тыуҙырылған лицейҙар булмауы күңелде ҡыра. Бәлки, Өфөлә көслө мәктәптәр барҙыр, ләкин ауылда йәшәгән кешеләр унда балаларын уҡыта алмай, мөмкинлектәр сикләнгән. Беҙгә алдынғы уҡытыусылар, профессорҙар эшләгән, заманса техника менән яҡшы йыһазландырылған, һәләтле балаларға киң мөмкинлектәр асҡан лицей-интернаттар, гимназиялар кәрәк. Шундай белем усағы булһа, һәләтле балалар ситкә уҡырға китмәҫ ине, тип уйлайым.

"Сит өлкәгә, алыҫҡа уҡырға ебәргәс, улыгыҙ өсөн борсолмайһығыҙмы?" тип йыш һорайҙар. Тимур тыныс, тәрбиәле, тәртипле егет. Үҫмер сағында ла тәмәке тартыу, эсеү кеүек насар ғәҙәттәр менән мауыҡманы, был темәны беҙ хатта ҡуҙғатҡаныбыҙ ҙа юҡ һәм мин был йәһәттән уның өсөн борсолмайым. Сөнки уның юҡ-бар менән шөғөлләнергә ваҡыты ла юҡ, уҡыу менән генә була. Балаларҙы бәләкәйҙән үҙаллы ҡарар ҡабул итергә, үҙҙәренә оҡшаған нәмә менән шөғөлләнергә, бер теләктәренә лә ҡаршы килмәскә өйрәтелде, шуға ла яуаплылыҡ төшөнсәһен яҡшы аңлай улым. Ғөмүмән, бала тәртип боҙоп йөрөмәһен, яҡшы өлгәшһен өсөн уны бәләкәйҙән берәй эш менән ҡыҙыҡһындырырға, нимә менән мауыҡһа ла күтәрмәләп, маҡтап торорға, ярҙам итергә һәм үҙенә тиң итеп күреп һөйләшергә кәрәк. Баш көллө уҡыуға, белем алырға сумған баланың кире ғәҙәттәргә ваҡыты ла ҡалмай, был турала уйланмай ҙа ул хатта.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының ярты йылға бер тапҡыр ҡабатланып тора икәнен беләһегеҙ. Бына әле 1 февралдән 31 мартҡа тиклем 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн ваҡытынан алда элекке хаҡтар менән яҙылыу иғлан ителде. Йәғни һеҙ ошо ике айҙа 50665 индексылы "Киске Өфө"гә - 554 һум 82 тингә, ә Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм I, II төркөм инвалидтары 499 һум 08 тингә яҙыла ала.**



● Уҡыусыларыбыҙ гәзитебеҙҙе, үҙе бүләк ул, тип ҡабул итһә лә, даими рәүештә дәртләндереү, бүләкләү саралары ла тәҡдим итеп торабыҙ икәнде беләһегеҙ. Былтыр декабрҙә 2018 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙ:

Баймаҡ районы Әхмәр ауылынан Рәмил Мәтинов - **"Көрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**;

Өфө ҡалаһынан Фуат Ҡолдәүләтов - **"Антология поэзии Башкортостана"**;

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Дәүләт Думаһы иң түбән эш хаҡы күләмен йәшәү минимумы кимәленә ҡарата 2019 йылдың 1 ғинуарында түгел, 2018 йылдың 1 майында тигеҙләү тураһындағы закон проектын беренсе уҡыуҙа ҡабул итте. Президент тәҡдимен ғәмәлгә ашырыу осрағында 2018 йылдың 1 ғинуарынан иң түбән эш хаҡы 2017 йылдың икенсе кварталында эшкә яраҡлы халыҡ өсөн йәшәү минимумы дәүмәленә - 11 163 һумға тиң була. Быйыл иң түбән эш хаҡы күләме, дөйөм алғанда, 43 процентҡа күтәреләсәк.

✔Республиканың Ҡырмыҫҡалы районында илһөйәрлек айлығы башланды. Тантана данлыҡлы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры Минлеғәле Шайморатовтың тыуған төйәгендә - Шайморат ауылында уҙҙы. Уның исемендәге урта мәктәптәге сарала Рус география йәмғиәтенең Башҡортостандағы бүлексәһе ағзалары ҡатнашты һәм улар йәмәғәтселәрҙең Минлеғәле Шайморатовҡа Рәсәй Геройы исемен биреү өсөн тағы ла ҡултамға йыйыу акцияһы башлауҙары хаҡында хәбәр итте.

✔Быйылдан юғары уҡыу йорттарын тамамлап, ауылға агросәнәғәт комплексы предприятиеларына эшкә ҡайтҡан белгестәр 500 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү ала башлай. Ә урта һөнәри белемгә эйә булғандарға 300 мең һум күләмендә бер тапҡыр бирелә торған түләү билдәләнә. Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов яҙғы баҫыу эштәренә әҙерлек буйынса кәңәшмәлә ошо хаҡта белдерҙе.

✔1 февралдән айлыҡ аҡсалата түләүҙәр күләме 2,5 процентҡа арттырылды. Бер үк ваҡытта айлыҡ аҡсалата түләүҙәр составында социаль хеҙмәттәр йыйымын биреүгә йүнәлтелгән аҡса суммаһы ла арта. 1 февралдән ул 1075,19 һум тәшкил итә. Шуның 828,14 һумы - бушлай таратылған дарыуҙарҙы алыуға, 128,11 һумы - шифахана-курорт дауалаһыуына, 118,94 һумы ҡала яны тимер юл транспортында бушлай юл йөрөүгә, шулай уҡ ҡала-ара транспортында дауаланыу еренә барып ҡайтыуға бүленә.

✔Ҡырмыҫҡалы районына эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Константиновка ауылында Ҡырмыҫҡалы төҙөлеш материалдары заводының етештереү майҙансығында булды. 2015 йылда асылған предприятие йыл һайын металдан 1 мең тонна тирәһе изделие - профнастил, торбалар, сайдинг, черепица сығара, шулай уҡ керамзит блоктар эшләү һәм тауар бетоны етештереү менән шөғөлләнә.

УЙЛЫҒА -УЙ

# ҠУЛЫМДАҒЫ БАЛДАҒЫМДЫҢ...

## исемдәре Илана

**"Ейәнсәремдең исеме - Илана. Мосолман исеме ул, тик ошоға тиклем ишеткәнем юҡ ине", - ти өлкән йәштәге бер апай ҙур университеттарҙа уҡып белем алған ҡыҙы менән кейәүенең аңлы һәм аҡыллы булыуына һоҡланып. Уның ҡыуанысы минең күңелемдә йәлләү тойғоһо уятты...**

Балаға матур мәғәнәле үҙебеҙҙең исемдәрҙе ҡушыу кәрәклеге, исемдең бала яҙмышына йоғонтоһо булыуы тураһында күпме генә һөйләмәйек, кемдәрҙер быны ҡолағына ла элмәй. Ауыл - милләт бишеге, тигән булабыҙ, милләтте ауыл һаҡлаясаҡ, тибеҙ, тик бөгөн тап ауылдарҙа йәшәгән йәш башҡорт ғаиләләре ул-ҡыҙҙарына ҡолаҡҡа ятмаған сит-ят исемдәр ҡуша. Бигерәк тә ҡыҙ бала исемдәренә ҡағыла был үҙгәрештәр. Беҙ үҫкәндә урамда Һәйфүнә, Фариза, Бәширә, Фәтихә, Мәфрүзә һ.б. исемле инәйҙәр йөшәй ине - был исемдәр ҙә тарихта ғына тороп ҡалды. Бынан 2-3 тиҫтә йыл элек, башҡорттоң ни, Айгөл менән Ләйсәндән башҡа исеме бармы, тиһәләр, бөгөн ауылдарҙа был исемдәрҙе лә ана шул сит исемдәр алыштырҙы. Ҡыҙыҡһынып ҡарағыҙ, бәләкәй генә башҡорт ауылында ла бер-ике Аида, Алина, Карина, Милена, Эвелина буласаҡ. Бөгөн иһә милләттәштәребеҙ араһында Рианна менән Раинна тигән исемдәр иң үтемлеһе икән. Олатай-өләсәйҙәр ни өсөн уяулығын юғалтты һуң әле? Мулланан бер исем ататып, документҡа икенсе исем яҙҙырыу ҙа модаға әүерелде. Шулай, ҡыҙҙарына Йәнбикә тип исем ҡысҡыртҡан йәш ғаилә тураһында ишетеп, оҙаҡ маҡтап һөйләп йөрөнөм тегеләрҙе. Яңыраҡ белеп ҡалдым, Эделина икән был ҡыҙ. Йәнбикәһе былай ғына, мулланы алдатыу өсөндәр инде. Доминикана, Азалия тигән башҡорт ҡыҙҙарына исем ҡуштырғанда мулланың яңылыша-яңылыша, ҡағыҙға ҡарап уҡый-уҡый исем ҡысҡырғанына үҙем шаһит булғайным.

Хәҙистәрҙә лә: "Балаларығыҙға матур исемдәр ҡушығыҙ!", "Бала тыуғас, уға иң тәүҙә яҡшы исем, унан белем бирегеҙ", - тиелә. Кешенең исеме - уның яҙмышының, холҡоноң бер өлөшөнә әүерелә. Балаға исеме менән бәрәкәт килергә тейеш. "Илана ла мосолман исеме ул", - тип теге апай үҙен йыуатһа ла, һүҙлектәр икенсе мәғлүмәт бирә: Илана - йәһүд исеме, Илан тигән ир-ат исеменән алынған, инглизсәнән "ағас" тигәнде аңлата. Бәйғәмбәрҙең мәғәнәһе насар исем йөрөтөүселәргә яңынан исем ҡушыуы ла билдәле. Асия исемен "тынлауһыҙ, буйһонмаҫ" тигән мәғәнәһе өсөн генә лә Йәмилә - "матур" тигән исемгә алыштырыуы тураһында хикәйәттәр ҙә бар бит. Тимәк, исемдең мәғәнәһе бик мөһим төшөнсә. Яңыраҡ ошо турала бер ағай менән дә һөйләшкәйнек. "Русса яңғырашына ҡарап исем ҡушыуҙан туҡтап, башҡортса яңғырашы тураһында уйлай башларға кәрәктер, - тигәйне ул. - Мәҫәлән, Диана башҡортса "диуана" һымаҡ яңғырай, Сабинаһына - "сабына" тигән рифма ятып тора".

Унан һуң, тауыш теорияһы буйынса, кеше үҙенең исемендәге өндәрҙе тиҙерәк ишетә. Ҡайҙалыр кемгәләр исемегеҙ менән мөрәжәғәт итһәләр, шунда уҡ игтибар бирәһегеҙ бит. Кешенең күңелен яуларға теләһәң, уға исеме менән йышыраҡ өндәш, ти халыҡ та. Бөгөн балаларҙың башҡортса һөйләшмәүенең исемдәренең йышыраҡ сит хәрефтәрҙән тороуы менән дә бәйләнеше барҙыр, тип уйлайһың аптырағандан. Тыуғандан уҡ Зөлхизә, Сәлимә, тип өндәшһәләр, бала аңында башҡорт өндәренә ҡарата үҙенсәлекле реакция барлыҡҡа килер, ул был өндәрҙе яратыр ине.

Мода - ул шундай күренеш, ул ҡасан да булһа үтә, үҙенең әһәмиәтен юғалта. Тик баланы сит исем менән атау модаһы үтмәй торған булып сыҡты бит. Шул уҡ ваҡытта, Мәскәү һынлы мегаполистарҙа йәшәп, балаларына башҡорт исемдәре ҡушҡан, улар менән башҡортса һөйләшкән милләттәштәребеҙҙе лә беләбеҙ. Бер ҙә, баламдың исемен урыҫ әйтә алмаҫ, тигән дәлил килтермәй улар. Тимәк, эш модала түгел, барыһы ла кешенең үҙаңы кимәленән тора булып сыға түгелме? Виолетталарыбыҙ үҫеп етеп, башҡорт егетенә кейәүгә сығып, башҡорт балалары үҫтереп, башҡорт йолаларын тотоп йәшәрме икән һуң?

**Дилбәр ХӘКИМОВА.**

Стәрлебаш районы Табылды ауылынан Салауат Вәхитов, Баймаҡ районы 2-се Этҡол ауылынан Айбулат Ғүмәров, Ейәнсура районы Өмбәт ауылынан Хәйҙәр Сырлыбаев - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"**;

Күгәрсен районы Яҡшымбәт ауылынан Әлмирә Аллағыуатова - **Илгизәр Диҡҡәттең "Башҡорт көсө"**;

Мәләүез ҡалаһынан Лена Хәйруллина, Йылайыр районы Ашҡаҙар ауылынан Һылыу Ураҡова - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры"**;

Өфө ҡалаһынан Юнир Вәлиев, Баймаҡ районы Ишмөхәмәт ауылынан Зәкиә Әбүбәкерова, Бөрйән районы Ҡолғана ауылынан Шәрифә Нуретдинова - **Йәүҙәт Бәшировтың "Башҡорт хан"**;

Учалы районы Муса ауылынан Рафаэль Лотфуллин, Ейәнсура районы Үргә Бикбирҙе ауылынан Ҡасим Янбаев - **Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың "Әҫәрҙәр. Хеҙмәттәр"**;

Белорет районы Үҫмангәле ауылынан Рәйсә Салауатова, Баймаҡ районы Таһир ауылынан Гүзәл Әлибаева, Түбәнге Иҙрис ауылынан Аҫылйәр Абдрахманов, Ярат ауылынан Маһикамал Иҫәндәүләтова, Йәрмөхәмәт ауылынан Ғәйшә Мырҙабаева, Салауат районы Мөрсәлим ауылынан Рәшиҙә Сафина, Йылайыр районы Юлдыбай ауылынан Мәғзирә Иҫәндәүләтова, Ишембай районы Урманбишҡаҙаҡ ауылынан Светлана Хужахмәтова, Ураҙбай ауылынан Фәниә Йәмилева, Ишәй ауылынан Әсмә Сәғәҙәтова, Ғафури районы Ибраһим ауылынан Ф. Ғәлиуллина, Ауырғазы районы Мораҙым ауылынан Фларис Ҡусҡаров, Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылынан Рәсимә Заманова, Әбдрәш ауылынан З. Мәжитова, Салауат ҡалаһынан А. Солтанморатова, Хәйбулла районы Яңы Ергән ауылынан Фәрзәнә Юланова - **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ булды.

**Иҫкәрмә:** бүләкләнеүселәр китаптарҙы балалары, туғандары, таныштары аша алдырыу сараһын күрһен ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.

● **Февралдә һәм мартта 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә 554 һум 82 тингә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусыларыбыҙҙан кемдәрҙер ошондай уҡ китаптарға эйә буласаҡ. Квитанцияға ҡушып, гәзитебеҙ тураһындағы фекерегеҙ теркәлгән ҡош телендәй генә хатығыҙҙы ла һалһағыҙ, бик шат булырбыҙ.**

**Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

● Ә кемдәрҙер бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiske-ufa@mail.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР



# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***38-се күҙәтеүем.*** Бөгөн автобус менән эшкә килгәндә күптән күрмәгән танышым осрап: "Аһ-аһ, һин эшкә автобус менән йөрөйһөңмө ни? Мин һине күптән инде машина менән генә эшкә йөрөйһөңдөр, тип уйлағайным", - тип аптыратты. Һөйләшеү тонынан шуны ла аңланым: йәнәһе, әллә кем булып йөрөһәң дә, шул "Йәйәүле Мәхмүт" икәнһең. Ул таныушыма машинам булһа ла, уның менән эшкә йөрөү тик мәшәҡәт кенә тыуҙырғанын (эшкә килһәң - эш янында, ҡайтһаң - өй янында парковка урыны табыу мәсьәләһе) аңлатып торманым инде. Автобуста йөрөүҙең тағы бер уңайлы яғы: унда үҙ алдыңа ижади уйланыу мөмкинлеге бар. Мин автобуста барғанда "Юлдаш" радиоһын тыңларға, уларға сәләмдәр яҙырға яратам. Ваҡытында Хисмәт Юлдашев Сипайлованан Телеүҙәккә эшкә йәйәү йөрөй торғайны. Тағы бер "Йәйәүле Мәхмүт"те беләм. Ул - билдәле рәссам Илдар Туймаҡаев.

***39-сы күҙәтеүем.*** Йола-традициялар үтәлешен рухиәтте һаҡларға булышлыҡ итеүсе фольклор сараһы итеп кенә аңлау - мәсьәләнең, айсберг һымаҡ, һыу өҫтөндә күренеп торған өлөшө генә. "Гәҙәт ҡылыҡтың энеһе..." тигән Мостай Кәрим. Классик миҫал (был турала яҙғаным булды) килтерәм. Үлем түшәгенә ятҡан атай кеше улына ризалығын бирә һәм бер генә үкенесе ҡалыуы хаҡында әйтә. Ул да булһа - улының намаҙға баҫмауы. Васыяты шул була: улы атаһының йыназаһынан һуң 40 көн һуҙымында намаҙ ваҡытында мәсеткә килеп, атаһын иҫләп ултырырға тейеш була. Улы атаһының васыятын үтәй һәм 41-се көндә мәсеткә үҙе килә, намаҙға ла ултыра. Ҡырҡ, ахыры, ҡырҡылыу тигәндән алынғандыр. Бер уҡ ғәмәлде 40 көн башҡарған кешенең был ғәмәле ғәҙәтенә күсә. Тимәк, йола-традиция булмышты, холоҡто барлыҡҡа килтерә. Холоҡ - ул характер, ә характер - ул яҙмыш. Ә рухиәт иһә булмыштың, асылдың, яҙмыштың йөкмәткеһе генә. Йолатрадицияһын үтәмәгән халыҡ ҡырҡ йыл һуҙымында икенсе халыҡҡа әүерелмәҫ тип кем әйтер?

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Дауамы бар).**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Мәскәүҙә "Блокбастер" профессиональ премияһы менән бүләкләү тантанаһы үтте. Кинобизнеста 2017 йылға йомғаҡтар яһалды. "Өфөнән һөйөү менән" ("AskarFilm") фильмы "Блокбастер" XXI профессиональ премияһының "сикләнгән прокатта иң табышлы фильм" номинацияһында еңеүсе булды. "Өфөнән һөйөү менән" фильмының прокат һөҙөмтәһе - 5 292 541 һум.

✓Рәсәй Президенты Владимир Путин Федерацияның дәүләт наградалары менән бүләкләү тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Бүләкләнеүселәр араһынан Ғ.Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһының колопроктология бүлеге мөдире Салауат Хәсәновҡа "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған табибы" тигән маҡтаулы исем бирелде. Өфөләге 3-сө бала табыу йортонон баш табибы, медицина фәндәре кандидаты Зөһрә Гурова "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған һаулыҡ һаҡлау хеҙмәткәре" исеменә лайыҡ булды.

✓Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы 2018 йылдың 5 февраленда Рәсәй Федерацияһы Президентын һайлауҙы үҙғарыу менән бәйле һораүҙар буйынса "ҡыҙыу элемтә" асты. Һораүҙарҙы 18 мартҡаса 8-800-347-54-54 телефоны буйынса бирергә мөмкин. "Ҡыҙыу элемтә" телефондарында тауыш биреү хоҡуғына эйә Башҡортостан Үҙәк һайлау комиссияһы ағзалары һәм Аппарат хеҙмәткәрҙәре дежур итә.

✓Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы Владимир Путинды Рәсәй президенты вазифаһына кандидат итеп теркәне. Һайлаусыларҙың ҡултамғаһын йыйыу йомғаҡтары буйынса тәүгеләрҙән булып Путинды теркәнеләр. Әгәр кандидаттарҙың башҡа хоҡуҡ боҙоуҙары асыҡланмаһа, президент һайлауҙары бюллетенда һигеҙ кеше булырға тейеш. Владимир Жириновский (ЛПДР) һәм Павел Грудинин (КПРФ) теркәлгән дә инде, сөнки улар - парламент партияһынан.

✓Республикала башҡорттарҙың төп һәм иң мөһим эпик әҫәре - "Урал батыр" эпосы балалар өсөн рус теленә тәржемә ителәсәк. Тәржемәнең төп маҡсаты - рус телле уҡыусыға эпосты юғары шиғриәт булараҡ тәҡдим итеү. Баҫма Башҡортостан Милли китапханаһының республиканың 100 йыллығына әҙерләгән яңы проект альбомдарының береһе буласаҡ. Башҡортостанда сәнғәт тураһында бөтәһе дүрт сағыу альбом нәшер ителәсәк. Проект 9 миллион һум күләмендә Башҡортостан Башлығы грантына лайыҡ булды.

**"Башинформ"дан.**

*✓ 2013 йылдан Өфөлә "Смарт Грид" ("Аҡыллы селтәрҙәр") технологияһын ҡулланып, ҡала электр селтәрҙәрен модернизациялау бара һәм баш ҡала - илдә ошо система ҡулланылған берҙән-бер ҡала.*



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?



# БАЛАҢА ТҮЛӘҮ ЮЛЛА

**Республиканың Халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү үҙәгенең төбәк филиалдары 2018 йылда тыуған йәки уллыҡҡа (ҡыҙ итеп) алынған беренсе, шулай уҡ өсөнсө һәм унан һуңғы балаға айлыҡ түләү алыуға ғаризалар ҡабул итә башланы.**

Билдәле булыуынса, беренсе бала өсөн аҡса федераль ҡаҙнанан бүленәсәк. Башҡортостан быйыл әлеге социаль ярҙам төрөн ғәмәлгә ашырыу өсөн 533 миллион һум аласаҡ. "Балалары булған ғаиләләргә айлыҡ түләүҙәр тураһында"ғы федераль законға ярашлы, пособие 2018 йылдың 1 ғинуарынан һуң тыуған (уллыҡҡа йәки ҡыҙ итеп алынған), Рәсәй Федерацияһы гражданы иҫәпләнгән, ғаиләләге килем йән башына төбәктәге эшкә һәләтле халыҡтың йәшәү минимумы кимәленән 1,5 тапҡырҙан кәм булмаған ғаиләләрҙәге балаға түләнә. Ғаризаға ҡушып баланың тыуыуы тураһындағы документ (таныҡлыҡ) йәки баланы ҡарауға алыу тураһында опека һәм попечителлек органы тарафынан бирелгән ҡарарҙың күсермәһе, баланың Рәсәй гражданы булыуын раҫлаусы документ һәм ғаиләнең килеме хаҡындағы мәғлүмәттәр тапшырырға кәрәк.

Ғариза тапшырылғандан һуң, халыҡҡа социаль ярҙам күрһәтеү органы бер ай эсендә беренсе балаға пособие түләү тураһында ҡарар сығара. Башҡортостанда айлыҡ пособие күләме 8 892 һум тәшкил итәсәк һәм ул балаға йәш ярым тулғанса түләнәсәк. "Ғаиләнең был түләүгә хоҡуғы барлығын асыҡлау өсөн ғаилә ағзаларының (атай, әсәй, бала йәки әсәй һәм бала) һуңғы 12 календарь айындағы килемен 12-гә, һуңынан уны бөтә ғаилә ағзалары иҫәбенә (шул иҫәптән яңы тыуған балаға) бүлергә кәрәк. Килеп сыҡҡан сумма 14 247 һумдан артмаһа, тимәк, ғаилә был түләүҙе алырға хоҡуҡлы", - тип аңлатма бирҙе Башҡортостандың Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығының матбуғат секретары Роза Кузьменко.

Ә 2018 йылда тыуған өсөнсө һәм унан һуңғы балаға айлыҡ түләү Башҡортостанда 8 993 һум тәшкил итәсәк. Был түләүгә йән башына уртаса килеме республикала балалар өсөн билдәләнгән йәшәү минимумы кимәленән артмаған күп балалы ғаиләләр хоҡуҡлы. Бөгөнгө көндә төбәктә балалар өсөн йәшәү минимумы күләме 8 483 һум тәшкил итә. Ғаиләнең был түләүгә хоҡуғы барлығын асыҡлау өсөн ғаилә ағзаларының (атай-әсә, балалар) һуңғы өс календарь айҙа килгән дөйөм килемен өскә, һуңынан бөтә ғаилә ағзалары (шул иҫәптән яңы тыуған балаға) иҫәбенә бүлергә кәрәк. Килеп сыҡҡан һан 8 483 һумдан артмаһа, ғаиләнең был социаль ярҙам сараһына хоҡуғы барлыҡҡа килә. Министрлыҡта билдәләүҙәренсә, һәр ғаилә ағзаһының килеме ҡулға алынған аҡсанан түгел, ә һалымға тотоп ҡалынғанға тиклемге билдәләнгән сумманан сығып иҫәпләнә. Бынан тыш, ике төр пособие ла, ғариза ҡасан бирелеүенә ҡарамайынса, бала тыуған датанан сығып түләнәсәк, тик документтарҙы бала тыуғандан һуң алты ай эсендә тапшырыу шарт.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ХАЛЫҠ ХӘЛ ИТӘ



**Башҡортостан Хөкүмәте Йортонда Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Николай Хорошилов етәкселегендә республикала заманса ҡала мөхитен булдырыу мәсьәләһе буйынса ведомство-ара комиссияның сираттағы ултырышы үтте.**

Проектты Башҡортостан биләмәһендә ғәмәлгә ашырыу тураһында доклад менән республиканың торлаҡ-коммуналь хужалығы министры урынбаҫары Альфред Зиннәтуллин сығыш яһаны. Ул әлеге мәлдә муниципалитеттарҙың 2018-2019 йылдарҙа тәү сиратта төҙөкләндерелергә тейешле йәмәғәт урындарын һайлау буйынса рейтинг тауыш биреүе үткәрелергә әҙерләнеүен белдерҙе. Әле республика ҡалаларында һайланған биләмәләр исемлеге буйынса халыҡтан тәҡдимдәр ҡабул ителә. Был хаҡта мәғлүмәт муниципаль берәмектәрҙең сайттарында махсус бүлектә урынлаштырылған. Мартта билдәләнгән проекттар өсөн тауыш биреү үткәрелә, уның йомғаҡтары буйынса яҡындағы йылдарға төҙөкләндереү буйынса муниципаль программаларға индереү өсөн йәмәғәт киңлектәре һайлана. Ултырышта билдәләнеүенсә, 2017 йылда "Заманса ҡала мөхитен булдырыу" өҫтөнлөклө проектын ғәмәлгә ашырыуҙа Башҡортостанда 23 муниципаль берәмек ҡатнашҡан, 416 ихата һәм 37 йәмәғәт биләмәһе төҙөкләндерелгән. Урамдарҙы яҡтыртыу, автомобиль туҡталҡалары, ял итеү майҙансыҡтары, контейнер майҙансыҡтары һәм скверҙар төҙөү эштәре башҡарылған. Тәртипкә килтерелгән биләмәләрҙә балалар өсөн заманса уйын комплекстары һәм спорт майҙансыҡтары барлыҡҡа килгән. 2018 йылдан өҫтөнлөклө проектты тормошҡа ашырыуҙа республикалағы бөтә 63 муниципаль берәмек ҡатнаша.

Әйткәндәй, Өфөлә лә 2018 - 2022 йылдарҙа беренсе сиратта төҙөкләндерелергә тейешле йәмәғәт территориялары тауыш биреү һөҙөмтәһе буйынса асыҡланасаҡ. Ғаризалар уҙған йылдың 29 декабренән быйыл 27 ғинуарға тиклем район хакимиәттәрендә ҡабул ителде. Барлығы 3061 ғариза килде. 18 мартта тауыш биреү һөҙөмтәһендә Өфө халҡына "Уңайлы ҡала мөхитен формалаштырыу" федераль программаһы средстволарын тәү сиратта ҡайҙа йүнәлтеү мәсьәләһе хәл ителәсәк. Төҙөкләндереү сираты тауыш иҫәбенән сығып билдәләнәсәк.

# ҠАЛА "АҠЫЛЛАНА"...



**Өфө ҡала хакимиәте менән РФ Элемтә һәм киң күләм мәғлүмәт саралары министрлығы араһында килешеү төҙөлдө.**

Шул көндө үк муниципалитетта Проект офисының беренсе ултырышы үтте. Уның эшендә РФ элемтә һәм киң күләм мәғлүмәт саралары министры урынбаҫары Сергей Калугин, Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәм башҡалар ҡатнашты. Ултырыш сиктәрендә Ирек Ялалов ҡатнашыусыларҙы иҡтисадты цифрлаштырыу өлкәһендә Өфө өсөн әһәмиәтле һәм мөһим йүнәлештәр менән таныштырҙы. Аныҡлап әйткәндә, ул ҡала хакимиәтенең рәсми сайтының үҙгәртелгән дизайны тураһында һөйләне һәм уның теләһә ниндәй гаджетҡа яраҡлаштырылыуын билдәләне. 2013 йылдан Өфөлә "Смарт Грид" ("Аҡыллы селтәрҙәр") технологияһын ҡулланып, ҡала электр селтәрҙәрен модернизациялау бара һәм баш ҡала - илдә ошо система ҡулланылған берҙән-бер ҡала. "Аҡыллы селтәрҙәр"ҙең үҙенсәлеге шунда - электр энергияһы юғалтыуҙарын кәметеү менән бер рәттән, электр тәьминәтенең сифатын һәм ышаныслылығын арттырыу. Сара сиктәрендә Өфө ҡала хакимиәте (Ирек Ялалов) менән РФ Элемтә һәм киң күләм мәғлүмәт саралары министрлығы араһында (Сергей Калугин) килешеү төҙөлдө. Был документ транспорт системаһын һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡты цифрлаштырыуҙы, ресурстар менән һөҙөмтәле идара итеүҙе, ҡала мөхите һәм экология именлеге өлкәһендә хеҙмәттәшлекте күҙаллай.

# ҠАҘАНЛЫҠ ТОРБАҺЫНДА...



**"Өфө инженер селтәрҙәре" предприятиеһы Менделеев урамы, 134 адресы буйынса урынлашҡан 27-се ҡаҙанлыҡ торбаһын архитектура йәһәтенән яҡтыртыу буйынса эшен тамамланы.**

Беренсе тапҡыр баш ҡалала архитектура йәһәтенән яҡтыртыу зауыҡлы ғына түгел, файҙалы ла буласаҡ, сөнки уға 100 метрлыҡ термометр ҡуйылған һәм ул өс яҡтан һауа температураһын күрһәтеп торасаҡ. Бынан тыш, периметр буйынса мәғлүмәт өсөн мониторҙар һәм прожекторҙар урынлаштырылған, улар торбанан сыҡҡан төтөндө яҡтыртасаҡ.

27-се ҡаҙанлыҡ - Өфөнөң иң ҙур ҡаҙанлыҡтарының береһе. Баш ҡаланың халыҡ күп йәшәгән урындағы энергия именлеге ошо йылылыҡ сығанағына һәм уның туҡтауһыҙ эшләүенә бәйле. Һуңғы йылдарҙа бында ҡорамалдарҙы ремонтлау, реконструкциялау һәм яңыртыу буйынса ҙур эштәр башҡарыла. Шулай уҡ, сәнәғәт нормативтарына ярашлы, торбаның иҫкергән яҡтыртыу системаһына ла модернизация талап ителә. Шунда уға ғәҙәти булмаған арт-объект ҡуйырға ҡарар ҡылынған. Проект предприятиеның өҫтәмә эшмәкәрлек төрҙәренән килгән килем иҫәбенә башҡарыла.

# БЕЛЕМ - ЙӘШТӘРГӘ




**Ошо көндәрҙә баш ҡалала "Берлек-Единство" геополитик тикшеренеүҙәр үҙәге һәм Өфө дәүләт нефть техник университеты ойоштороған "Берлек" йәштәр мәктәбе үҙ эшен башланы. Был проект Рәсәй Федерацияһы Президенты гранты ярҙамында тормошҡа ашырыла.**

"Берлек" йәштәр мәктәбе халыҡ-ара мөнәсәбәттәр һәм регионды өйрәнеү йүнәлештәрендә уҡыған студенттарҙың практик белемен арттырыу маҡсатында асылған проект. Унда ӨДНТУ Иҡтисад һәм сервис институтының сит ил регионын өйрәнеү һәм тарих кафедраһы, Башҡорт дәүләт университетының хоҡуҡ институты менән философия һәм социология кафедраһы студенттары ҡатнашасаҡ. Ойоштороусылар әйтеүенсә, һөнәри оҫталығын арттырырға, тәжрибә тупларға теләгән башҡа студенттар ҙа "Берлек" мәктәбенә килә ала. Сөнки ике йөҙгә яҡын кешене йәлеп итеү мөмкинлеге бар, быны өсөн бөтә шарттар ҙа тыуҙырыласаҡ. Ҡатнашыусылар ғинуарҙан алып алты ай дауамында аҙнаһына ике тапҡыр дәрескә йөрөргә тейеш. Уларға Рәсәй һәм Урта Азия илдәре араһындағы мөнәсәбәттәр сиктәрендә сәйәси, социаль, иҡтисади, мәҙәни процестар тураһында Башҡортостан һәм Рәсәй белгестәре генә түгел, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан һәм Үзбәкстандан килгән юғары квалификациялы һөнәрмәндәр ҙә белем бирәсәк. Хатта ғәрәп һәм ҡытай теле буйынса ла дәрестәр ҡаралған.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓17-18 февралдә Башҡортостандың баш ҡалаһында Волга буйы федераль округы беренселеге барышында ҡышҡы йөҙөү буйынса Өфө ҡалаһы кубогы уҙғарыла. Ҡыш көнө йөҙөргә яратҡандар И. Якутов исемендәге парктағы Һалдат күлендә ярыша. Был ярыштар ҡышҡы йөҙөү буйынса донъя чемпионатына әҙерлек этабы булып тора. Чемпионат 6-10 мартта Эстонияла уҙа.

✓Республика һалым хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 2017 йылда төбәктә граждандарҙан 2016 йыл өсөн 230 меңдән ашыу декларация теркәлгән. 210 334 декларацияла (91 процент) 1 миллион һумғаса килем белдерелгән. 19 590 кеше 1 миллион һумдан ашыу төшөм тураһында мәғлүмәт биргән. Республикала йәшәүсе ете кеше 1 миллиард һумдан күберәк килеме хаҡында белдергән.

✓Башҡортостандың халыҡ шағиры, РСФСР-ҙың М. Горький исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Назар Нәжмиҙең тыуыуына 100 йыл тулды. "Родина" кинотеатрында уның тормошо һәм ижады хаҡында "Ялҡындан һәм хистән ҡойолған..." документаль фильмының премьераһы үтте. Фильмдан һуң Башҡортостандың баш ҡалаһында Назар Нәжми исемендәге аллея булдырыу, халыҡ шағирына һәйкәлде уның үҙәге итеү фекере яңғыраны.

✓Башҡортостан буйынса "Роспотребнадзор" идаралығы 2017 йылда косметология ойошмаларына 80-дән ашыу ялыу ҡабул иткән. Ҡулланыусылар "Элефант", "Алтын ҡояш", "Ҡояш йорто", "Дауалау-һауыҡтырыу комплексы", "Идеал", "Идилия", "Корпорейшн Бьюти Хэлфи лимитед Илия Идишн", "Сәләмәтлек үҙәге" кеүек ойошмаларға, косметологтарҙың компетентһыҙлығына, ойошманың медицина эшмәкәрлегенә лицензияһы булмауға зарланған.

✓"Ғәҙел Рәсәй"ҙән депутаттар Дәүләт Думаһына бала ҡарау буйынса ялды йәш ярымдан өс йәшкәсә арттырыу хаҡында закон проектын индерҙе. Шул уҡ ваҡытта был осор пенсия иҫәпләү өсөн хеҙмәт стажына инергә тейеш. Ғәмәлдәге норма буйынса, әсәнең хеҙмәт стажына 1,5 йыл бала ҡараған ваҡыты һанала. Бынан тыш, депутаттар балаларҙы ҡараған осор өсөн иҫәпләнгән иң күп страховка стажын алты йәшкә тиклем сикләгән положениены ғәмәлдән сығарырға тәҡдим иткән. Уларҙың фекеренсә, "был сара күп бала табыуға дәртләндермәй".

✔ *Өфө мэры Ирек Ялалов та спортсыларға уңышлы сығыш яһауҙарын теләп: "Беҙҙең спортсыларға был көндәрҙә айырыуса яҡлау кәрәк. Өфөләр, бөтә ил менән бергә, үҙебеҙҙең уйынсылар өсөн яныр", тигән ышаныс белдерҙе.*



КӨНАУАЗ

**Ҡала халҡы Ағиҙел аша һалынған иҫке күперҙе ябыу темаһы буйынса әүҙем фекер алыша. Автомобиль хужалары бигерәк асыулы, улар юлдағы тығындарҙа оҙағыраҡ тоткарлана башлаған. Социаль селтәрҙәрҙә, йәнәһе лә, властар хәлваҡиғаларҙың былдай бороһошона әҙер булмаған, тигән һүҙҙәр ҙә йөрөй.**

# КҮПЕРҘЕ ЯБЫУ...

## бик ваҡытлы хәл ителде



Ҡалаға туранан-тура ҡатнашлығы булған кеше булараҡ, мәғлүмәткә башҡаларҙан алдараҡ эйәмен һәм уның менән бүлешә алам. Шуны әйтер инем: социаль селтәрҙәрҙә һәм киң мәғлүмәт сараларындағы күпселек хәбәр тамырынан дөрөҫ түгел. Ҡаланы яҡлауым да түгел, ә төрлө сығанаҡтарҙан тупланған мәғлүмәт йомғаҡтары буйынса шәхси фекерем генә. Ә һығымталарым түбәндәгесә.

Ҡала былдай хәл-торошҡа, ғәмәлдә, әҙер ине, күпер тураһында күптән белдек, уның тыҙыу мәсьәләһе тураһындағы һөйләшеүҙәрҙе ҡаланың бик күп хеҙмәттәре менән бер нисә йыл алып барҙыҡ. Төрлө факторҙарҙы иҫәпкә алып әҙерләндек. Ләкин асыҡтан-асыҡ әйтмәнек (минеңсә, ҡала халҡын бер өс йыл алдан әҙерләргә кәрәк булған), әммә был ҡала хеҙмәттәренең мәңгелек проблемаһы. Күп эшләйҙәр, ә беҙ, ҡала халҡы, был турала белмәйбеҙ ҙә. Шуға ла уларҙы йыш тәнҡитләйбеҙ. Был ҡулсаны бары тик ҡала халҡын проблемаларға мөмкин тиклем күберәк йөләп итеп кенә өҙөп булалыр, минеңсә.

Беренсенән, хәл-торош күп йылдар, тиҫтә йылдан ашыу, тикшерелде. Мониторинг үткәрелеп кенә ҡалманы, күпер ябылғансы, стратегик һәм тактик ҡарарҙар ҡабул ителде. Мәҫәлән, алдан уҡ Ағиҙел күперен реконструкциялау буйынса техник проект эшләнде. Ҡала бюджетының дефициты-на ҡарамаҫтан, алдан уҡ проект-тикшереү эштәренә 110 миллион һум аҡса бүленде һәм проект эшләнеп, заказсыға тапшырылды. Реконструкцияны финанслау өсөн барыһы ла әҙерләнде. Был һуңғы бер нисә йыл дауамында барҙы һәм бер кем дә күперҙең ҡасан ябылырын күҙаллай ҙа алмаған ваҡытта, мониторинг процесы барышында тормошҡа ашырылды. Бында, үкенескә күрә, был эштәрҙе финанслауға федераль үҙәктән аҡса алыу төбәк өсөн дә, ҡала хакимиәте өсөн дә бик ауыр булды. Бында тағы шуны ла онотоорға ярамай: ошо осорҙа Пугачев урамындағы һәм һуңғы өс йылда яңы Затон күпере төҙөләштәре финансланды. Барыһы ла өс йыл эсендә бер юлы ике күпер өсөн бюджет алыуы реаль түгел икәнлеген аңлайһыр. Беҙ Рәсәй Федерацияһында бер генә ҡала түгел.

Икенсенән, күп йылдар элек киләсәктә иҫке Ағиҙел күпере менән ауырлыҡтар тыуыу ихтималлыһы асыҡланғас, көньяҡтан инеү юлы ябылған осраҡта көсөргәнештең бер өлөшө ошо Затон һәм Пугачев күперҙәренә күсеп, тотороҡло транспорт ағымын тәьмин итеү өсөн ҡала бөтөн көсто яңы күперҙәр төҙөүгә йүнәлтте. Әйткәндәй, М5 трассаһы аша Пугачев күперенән ҡалаға инеү, минеңсә, араны ни бары 5-7 километрға ғына оҙайта. Мәҫәлән, Чесноковка халҡы өсөн. Әлбиттә, был тормошто бер аҙ ауырлаштыра, әммә глобаль кимәлдә түгел. Шаҡша аша йөрөргә түгел бит. Тимәк, паника өсөн сәбәп юҡ. Ҡаланың хатта пик сәғәттәрендә лә транспорт ағымын ҡабул итер мөмкинлеге бар.

Өсөнсөнән, ҡала һәм автоинспекция хеҙмәттәре көн һайын яңы Ағиҙел күперендәге хәрәкәтте тикшерә һәм яҡшырта. Ҡала хакимиәте башлығы ла, уның ошо йүнәлеш өсөн яуаплы урынбаҫарҙары ла хәрәкәттең реверс системаһын көн дә контролләй. Һәр идея һәм яҡшыртыу буйынса фекер алышына.

Дүртенсенән, күперҙең яртыһын ябыу ул тиклем оҙаҡҡа ла түгел. Ҡала профиль институты менән күперҙең ябылған өлөшөн реновациялау буйынса саралар әҙерләгән. Уны быйыл йәйгә уҡ асыу сараһы ла бар. Эшкә йыйлы мизгел башланыу менән тотонасаҡтар. Был сараларҙан һуң күпер реконструкцияға тиклем тағы ла өс йыл торасаҡ әле.

Бишенсенән, иң төп һығымта - нимәлә-нимәлә, ә күпер мәсьәләһендә ҡала властары һаҡ эшләне. Хәҙер төп бурыс - финанс алыу. Ҡала бюджеты менән күпер проблемаһын хәл итеп булмай. Бөгөн беҙҙең ҡала башлығына төп наказыбыҙ ошо. Барыбыҙҙың дә уңайлылығы хаҡына уға был мәсьәләне хәл итеүҙә Хоҙай ярҙам итһен.

Был минең шәхси һығымтам. Үкенескә күрә, гәзәттәгесә, инфраструктураны финанслау бәкәлгә һуҡты. Бында республика ла, ҡала ла гәйепле түгел. Икенсе һығымта - глобаль хәүефле бер нәмә лә булманы. Бер нисә айҙан ремонтлаҙар һәм ҡабат асырҙар. Тағы бер һығымта - бәлки, күперҙе бөгөн хәстәрләү яҡшыраҡтыр ҙа? Бер нисә йылдан ошо урында яңы үткәреү ҡеүәтенә эйә өс күпер буласаҡ. Ә былай тағы биш йылдан бөтөнләй тығындарҙа ултырыр инек.

**Кирилл БАДИКОВ,**
**Өфө ҡала округы**
**Советы депутаты.**

ДОНЪЯ ШАҢДАУЫ




# ЕҢЕҮҘӘР КӨТӘБЕҘ!

**Был аҙнала Корея Республикаһының Пхенчхан ҡалаһында XXIII Ҡышҡы Олимпия уйындары башланды. Ике аҙна дауамында барған уйындарҙа 92 илдең спортсылары ҡатнашасаҡ. 15 төр ҡышҡы спорт дисциплинаһы буйынса ярыштарҙа 102 миҙал уйнатыласаҡ.**

Халыҡ-ара Олимпия комитеты Рәсәй спортсыларын Сочиҙа уҙған Олимпия уйындарында допинг ҡулланыуҙа, ә илдең Спорт министрлығы хеҙмәткәрҙәрен допинг тикшереүҙәрҙең ыңғай һөҙөмтәләрен йәшереүҙә ғәйепләп, 2018 йылғы уйындарҙа ҡатнаштырыуҙан баш тартҡайны. Шулай ҙа, допингка ҡаршы оҙайлы тикшереүҙәрҙән һуң, 169 Рәсәй спортсыһына нейтраль флаг аҫтында сығыш яһау мөмкинлеге бирелде. Исемлектә күпселек билдәле спортсылар булмаһа ла, һәләтле йәштәр бихисап һәм уларҙың еңеү пъедесталының иң юғары баҫҡысына күтәрелеүенә өмөт ҙур.

Беҙҙең республиканан 5 кеше Пхенчхан ҡалаһына юл тотто. Улар араһында 2014 йылғы эстафетала олимпия чемпионы исемен яулаусы, 1500 метрлыҡ дистанцияның донъя чемпионы исемен йөрөтөүсе, Донъя кубогы һәм башҡа ошондай мәртәбәле трофей хужаһы Семен Елистратов - шорт-трека беҙҙең илдең иң оло ышанысы. "Олимпия уйындарында беҙҙең команда ҡатнашмай, тип шатланыусыларҙың булыуы еңеүгә тағы ла көслөрәк дәртләндерә", - тине ул үҙенең уйындарға барырға ҡарар итеүен белдереп. Биатлонда ла беҙҙең ил командаһын үҙ артынан Башҡортостан спортсыһы, эстафетала ғәмәлдәге донъя чемпионы, донъя Кубогы этабы еңеүсеһе Антон Бабиков әйҙәйәсәк. "Мин үҙемде спорттан башҡа күҙ алдына ла килтерә алмайым, унан башҡа тормошом юҡ та кеүек, шуға күрә биатлон хәҙер - минең бөтә ғүмерем, тормошомдың 95 проценты", - ти спортсы. Рәсәйҙе саңғы буйынса ике төр ярышта был ҡышҡы уйындарҙа тик бер генә спортсы күрһәтәсәк. Ул - 2013 йылда Рәсәй чемпионы исемен яулаусы, спорт мастеры Эрнест Яхин. Спорт донъяһы күгендә яңыраҡ ҡына балҡыш алған йәш спортсы Кристина Спиридонова фристайлда үҙ көсөн һынаясаҡ. Тау саңғыһы мәктәбендә 2011 йылда шөғөлләнә башлап, уҙған йылда Донъя кубогында - бронза, ә ағымдағы йылдың ғинуарында көмөш миҙал яулаған Кристина ла Пхенчхан ҡалаһынан еңеү менән ҡайтыр, тип өмөт итәйек. Өфөнән алыҫ Корея Республикаһына юл тотоусылар араһында тағы ла бер Өфө спортсыһы, "Ағиҙел" хоккей командаһы уйынсыһы, 3 олимпия уйындарында ҡатнашыусы, бихисап наградаларға эйә Ольга Соснина ла бар. "Олимпия уйындарында Рәсәй өсөн сығыш яһау минең өсөн оло мәртәбә. Тик ыңғай хис-тойғолар менән уйындарға юл тотам", - тине спортсы.

Өфө мэры Ирек Ялалов та спортсыларға уңышлы сығыш яһауҙарын теләп: "Беҙҙең спортсыларға был көндәрҙә айырыуса яҡлау кәрәк. Өфөләр, бөтә ил менән бергә, үҙебеҙҙең уйынсылар өсөн яныр", тигән ышаныс белдерҙе. Ысынлап та, Рәсәй әлегә тиклем булған бөтә Олимпия уйындарында ла юғары күрһәткестәргә өлгәшеп килде. Һәм уйлап сығарылған фараздарға нигеҙләнгән ғәйеп ташлап ҡына һәләтле спортсыларыбыҙҙы сафтан сығарыу мөмкин түгел. Әлеге уйындарҙа ла уларҙың ғорурланырлыҡ һөҙөмтәләргә өлгәшәсәгенә шик юҡ. Спортсыларыбыҙҙың үҙҙәре өсөн генә түгел, ә уйындан ситләштерелгән коллегалары өсөн дә сығыш яһауы уларға икеләтә көс бирер, еңеү яуларға булышлыҡ итер.

**Гөлназ МАНАПОВА.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Ризыҡ та дауа

❖ Ҡайһы бер ауырыуҙарҙы еңеү өсөн дөрөҫ туҡланыу ҙа кәрәк. Мәҫәлән, гипотиреоз - ҡалҡан биҙенең эшсәнлеге түбән булған ваҡытта тигеҙ күләмдә бал, ҡарабойҙай оно, ваҡланған әстерхан сәтләүегең ҡушып, көн һайын ярты стакан ошо ҡатнашманы ашарға. Ике көндән артыҡ һаҡларға ярамай, бөткәс тә яңыһын әҙерләп торорға кәрәк. Ошолай 4-5 ай дауаланырға. Бынан тыш, көн һайын 1 фейхоа емешен ашағыҙ.

❖ Миома, эндометриоздан сейә ҡыуағы ботаҡтары дауалай. Сейәнең нәҙек кенә ботаҡтарын ваҡлап, сәй кеүек эсергә. 3-4 ай дауамында көнөнә 1,5-2 л эсергә кәрәк.

❖ Инсульт кисергәндән һуң, ярты стакан бойҙайҙы йыуып, 2-3 сәғәт йылы һыуҙа еберергә. Билдәләнгән ваҡыт үтеү менән һыуҙы түгергә лә, бойҙайҙы еүеш туҡыма менән ябып, йылы урынға ҡуйырға. Бер тәүлектән һуң, бойҙай шытып сыҡҡас, үҫентеләре менән бергә ашарға. Тәм өсөн бал, йөҙөм-күрәгә өҫтәй алаһығыҙ. Сәләмәтлек нығынғанға тиклем, көн һайын шытҡан бойҙай ашарға. Бынан тыш, көн һайын 280 мл һөткә 150 мл йогурт, 1 иҙелгән банан, 2 ҡалаҡ кунжут майы өҫтәп, әҙерәк кедр сәтләүеге һибеп ашарға. 200 мл ҡайнатып, йылымыс хәлгә еткереп һыуытылған һөткә 2 балғалаҡ ваҡланған валериана тамырын ҡушып, 6-8 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм ашарҙан ярты сәғәт алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә. Ашарҙан алда яртышар балғалаҡ борсаҡ оно ҡабып ҡуйыу ҙа файҙалы. Ҡарабойҙай, етен, борсаҡ һ.б ондары хәҙер супермаркеттарҙың бөтәһендә лә тиерлек һатыла.

❖ Копьютер алдында оҙаҡ ултырыу ҙа зыянлы, бөгөн күптәр эштә 8 сәғәт буйына замана техникаһына текәлеп ултырырға мәжбүр. Арыуҙы, депрессия торошто еңеү өсөн ҡыҙыл сөгөлдөрҙө, борсаҡты, сәтләүектәрҙе, йөҙөмдө күберәк ашарға кәрәк. Уларҙың барыһында ла В витамины бар. Кәбәкле икмәккә өҫтөнлөк бирегеҙ.

❖ Етен майын ҡулланыу ҡандағы холестерин кимәлен түбәнәйтә, ҡан тамырҙарына һығылмалылығын ҡайтара, эҫәк эшмәкәрлеген көйләй, ауырлы ваҡытта һәм климаксты еңелерәк кисерергә булышлыҡ итә.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

✓ Әлегә иһә, боронғо Иран донъяһына барып етеү, уның башҡортто формалаштырыуҙағы урынын тикшереү түгел, хатта үҙебеҙҙең дәүерҙәргә күпкә яҡыныраҡ булған төрки дәүерҙәрҙе лә ныҡлап тикшереүгә тотонғаныбыҙ юҡ.



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Ҡөрәйштәрҙең оло яуы

Мөхәммәт бәйғәмбәр үҙе лә соҡор ҡаҙыша, балсыҡ ташый, башҡа төрлө эштәрҙе лә ихлас башҡара. Үҙенең ҡатнашыуы менән башҡаларға ла оло дәрт өҫтәй. Барыһы ла аңлай - ҡөрәйш һыбайлыларын үткәрмәгән осраҡта, мәжүсиҙәрҙең йәйәүле ғәскәренә ҡарағанда Мәҙинә халҡы күпкә көслө. Бәҙер һәм Өхөд һуғыштары быны иҫбат итте инде.

Ҡөрәйш ғәскәре килеүгә дүрт километр оҙонлоғондағы был ныҡытманы әҙерләп өлгөрәләр. Ҡөрәйш ғәскәре аптыраашта ҡала. Ысынлап та, һыбайлылар Мәҙинә уҡсылары тарафынан һаҡланған ҡалҡыулыҡтарҙы ла, тәрән соҡорҙо ла һөжүм менән алырға баҙнат итмәй. Ҡөрәйш ғәскәренә ҡаршы Мәҙинә халҡының ҡорал тота алған өлөшө - өс меңгә яҡын кеше - дәррәү күтәрелә. Ҡурайза ырыуы ғына ҡатнашмай.

Ҡөрәйш яугирҙарының хәрби рухы бик түбән кимәлдә була. Уларға ҡушылып килеүсе башҡа ырыу яугирҙары ҡөрәйштәр өсөн баштарын һалырға йыйынмай - улар вәғәҙә ителгән еңел табыш алырға килә. Шуға ла яу уҡсылар араһындағы атыш һәм көс һынашырға теләүсе батырҙар араһындағы һуғыштар менән сикләнә.

Йәһүҙиҙәр ҡурайза ырыуын күтәреп маташа. Уларға илселәр ебәрелә. Ҡурайза ырыуы аҡһаҡалдары икеләнә. Был турала шунда уҡ Мөхәммәт бәйғәмбәр белеп ҡала ла, уларҙың аҡһаҡалдарына Нуайм ибн Мәсүд исемле мосолман кешеһен ебәрә. Хәйлә шунда була - Нуаймдың мосолман икәнен береһе лә белмәй, барыһы ла уны Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең дошманы тип уйлай. Ҡурайза аҡһаҡалдары Нуаймға ышана, унан кәңәш һорай. Нуайм уларға:

- Ҡөрәйштәр оҙаҡламай бынан китәсәк. Мөхәммәт бәйғәмбәр һеҙҙән ҡаты үс алыр. Шуға ла шундай кәңәш бирәм - ҡөрәйштәрҙән аманат алмайынса, улар менән бергә һуғышта ҡатнашмағыҙ. Аманаттарҙы бер ҡайҙа ла ебәрмәгеҙ, сөнки улар ҡулығыҙҙа булған саҡта, ҡөрәйштәр һеҙҙе һатып, ҡайтып китә алмаясаҡ, - тип кәңәш бирә.

Бик аҡыллы һәм дөрөҫ кәңәш була был. Ҡурайза аҡһаҡалдары быны хуплай, Нуаймға рәхмәт әйтеп, аманат ебәреү шарттарын ҡөрәйштәргә еткерә. Тик Нуайм ҡурайза аҡһаҡалдары менән һөйләшкәндән һуң, туп-тура ҡөрәйштәргә юллана.

- Ҡурайза аҡһаҡалдары һеҙгә ышанмай һәм Мөхәммәт бәйғәмбәр менән килешеүҙәрен өҙгәнгә бик үкенә, шуға ла уның алдындағы ғәйепте юйырға, дуҫлыҡты яңынан тергеҙергә уйлайҙар. Мөхәммәт бәйғәмбәргә илселәрен ебәреп, "Баштарын сабып өҙөү өсөн етмеш ҡөрәйш түрәһен тотоп бирһәк, етерме?" тип һорағандарын беләм, - ти ул.

Ҡурайза илселәре аманаттар һорап килеп етеү менән ҡөрәйштәр Нуаймдың һүҙҙәренең хаҡлығына инана һәм, әлбиттә, аманаттарын ебәреүҙән ҡырҡа баш тарта. Ҡурайза аҡһаҡалдары бынан һуң ҡөрәйштәргә ышанысын юғалта.

Шул ваҡытта Мөхәммәт бәйғәмбәр Ғатафан ырыуы менән һөйләшеү башлай. Ғатафан етәкселәре ҡөрәйштәргә тоғро ҡала, тик мосолман шымсылары улар менән һөйләшеү алып барылыуы тураһында ҡөрәйш етәкселәренә еткерә. Шулай итеп, төрлө ырыуҙарҙың бер-береһенә булған ышаныстары ҡаҡшатыла.

Бынан тыш, иген йыйылып бөткәнлектән, ун меңлек ғәскәр асыға башлай. Ҡапыл көн боҙола, һалҡын көслө ел ҡөрәйш ғәскәренең сатырҙарын туҙҙыра, ямғырҙар башлана. Ҡөрәйштәр менән бергә килгән ырыуҙар үҙҙәренең ҡайтып китәсәге тураһында белдерә. Ҡөрәйштәрҙе ризалашырға ғына ҡала. Мәҙинә халҡы уларҙы әҙәрлекләмәй. Был һуғышта бары тик өс ҡөрәйш һәм алты мосолман һәләк була.

(Дауамы бар).

ӨС БЫУЫН ФЕКЕРЕ

# ХӘҘЕР АҢҺАТ УЛ...

## элек ҡыйын ине

**Кеше һәр ваҡыт, яҡшы йәшәү өсөн нимәләр етмәй, тигән тойғо менән көн итә. "Яҡшы тормош" тигән төшөнсәгә нимәләрҙе индерәһегеҙ?**



***Фәтих САБИТОВ, 62 йәш:*** "Был донъяға күпте бирер өсөн, был донъяла миңә күп кәрәк", - тигән бит әле шағирыбыҙ Рәшит Назаров та. Кеше шундай йән эйәһе, аңына, белеменә, кимәленә ҡарап, нимәгәләр мохтаж булып йәшәй. Шулай ҙа һәр нәмәнең үҙ мәле була. Минең хәҙер йорттар-машиналар кеүек матди байлыҡ көсәр йәшем үткән. Балаларға ла, шөкөр, теүәлләп бөттөк, һәр береһенең йәшәр ере бар. Мин ошо йәшемә етеп, телебеҙҙең шундай кимәлгә күтәрелеүенә ҡыуанам. Башҡортса спектакль ҡарағың киләме, рәхим ит, республиканың бер нисә төбәгендә, баш ҡалала дөйөм алғанда 5-6 театр эшләй. Йыр тыңлап, хушланып алғың киләме, концертҡа бар. Телевизорыбыҙ ҙа башҡортса һөйләй, радиобыҙ башҡортса көйләй. Мәжит Ғафуриға ҡушылып, "Хәҙер аңһат ул, элек ҡыйын ине", тибеҙ ҙә ҡуябыҙ инде.

Улай тиһәң, йәштәргә бик еңел түгел хәҙер. Беҙгә уҡырға бик мөмкинлек эләкмәһә лә, йәштәргә бөтөн шарттар бар ине. Бик үк урманлы төбәк булмаһаҡ та, һәр беребеҙ ҡарағастан шаңғырлап торған ҙур-ҙур йорттар һалып индек. Бөгөн агасын алыуы ла мәшәҡәт, нигеҙ ҡорор ере лә ҡиммәтләнеп китте. Уртансы улыбыҙ Өфөнөң ситенән 800 мең һумға 10 сутый ер һатып алды, хаҡына аптырап китерһең! Яҡшы тормошто яһап алғансы, байтаҡ сығымдар түгергә лә тура килә шулай. Тик кеше туҡтай торған йән эйәһе түгел. Рәсәйҙә етештерелгән машина алһа, иномарка тураһында хыяллана, тағы әллә нәмәләр кәрәк, тип уйлай. Был иһә күңел тынысլығын юғалтыуға килтерә. Ҡәнәғәт булыу, сама белеүҙе лә онотмайыҡ, шул саҡта тормош юлын яҡшы үттек, яҡшы тормошта йәшәнек, тип әйтә алырбыҙ.

***Гөлсәсәк БУРАНҒОЛОВА, 40 йәш:*** Яҡшы тормош булһа ла, Рәсәйҙә түгел, тигән стереотип бөгөн шул тиклем ныҡынған. Тағы ла бер күренешкә иғтибар итмәйенсә булмай - тормоштан тик ҡәнәғәтлек алып ҡына йәшәргә ынтыла барыһы ла. Реклама көнө-төнө, ҡиммәтле машина ал, заманса техника менән өйөңдө йыһазландыр, шәшке тун кей, матурлыҡ салондарына йөрө, тип тылҡый һ.б. Ошолар булмаһа, һин бәхетһеҙ инде, яҡшы тормошта йәшәмәйһең. Балаларыңдың тәрбиәле булыуы, һәйбәт уҡыуы, ғаилә ағзаларының сәләмәт булыуы ғына һинең тормошоңдо тулы яһамай, тигән фекерҙәләр әле бөгөнгә ҡулланыусылар быуыны. Ҙур-ҙур сит ил корпорациялары үҙҙәренә ҡол яһап алды бит инде беҙҙең халыҡты, кеҫә телефондары, планшеттар, мультимейестәргә генә эшләйбеҙ, уларының күбеһе кредитҡа алына әле. Ошонан ҡәнәғәтлек тойғоһо кисереп йөрөйбөҙ шунан. Быларҙың барыһына ла аҡсабыҙ етмәһә, илебеҙҙе яманларға тотонабыҙ. Етеш, яҡшы тормош та юҡ, тибеҙ. Рухи азыҡ тураһында онотабыҙ, музыка тыңламайбыҙ, тәбиғәт ҡосағына һирәк сығабыҙ, китап уҡыуҙы оноттӧҡ, балаларға иғтибар бүлмәйбеҙ. Һәр миҙгелегеҙҙең ҡәҙерен белегеҙ, дүшәмбе эшкә сығып, ялдарҙы матур итеп үткәрҙек, тип маҡтанып алыу ҙа, үҙ ереңдә үҙ телеңдә һөйләшеп йөрөү ҙә бәхет бит ул!

***Рафиҡ ӘЛМӨХӘМӘТОВ, 23 йәштә:*** Яҡшы тормош тигәндең синонимы - етеш тормош, тимәк, аҡса инде ул. Тормошоң яҡшы булһын өсөн күп аҡса кәрәк, тип уйлайым мин. Бер көләмәс оҡшай миңә, йәнәһе, беҙҙең илдә кеше эшенә килә лә, ҡайҙа, нисек аҡса эшләргә икән, тип уйлана башлай. Ысынбарлыҡ был. Һәр хәлдә, минең йәштәге кешенең йәшәйешен күрһәткән миҫал. Лайыҡлы эш хаҡы алмағас, ул эш урыны нимәгә икән беҙгә? Һинә шатлыҡ килтергән нәмәләргә етергә тейеш аҡса, әйтәйек, сәйәхәткә. Юғиһә, беҙҙә сит илгә лә кредитҡа алынған аҡсаға сығалар ҙа, йыл буйына шуны түләйҙәр. Шатлыҡ түгел инде был. Дәүләт эшенән китәм, тиһәң, әсәй ҡаршы төшә. Бюджет эшенән дә һәйбәте юҡ, ти, пенсия алырһың аҙаҡ, ти. Мин пенсия йәшенә еткәнсе, әллә ниндәй үҙгәрештәр булып бөтөүе лә бар, ана бит, пенсия йәшен оҙайта алмай йонсой депутаттар.

Ләйсән ДАЯНОВА яҙып алды.

ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА

# "ХӨРӘСӘН" НИМӘНЕ АҢЛАТА?



**Иран дәүләтенең төньяҡ-көнсығышындағы Төркмәнстан, Афғанстан менән сиктәш мөйөшөндәге ерҙәрҙе "Хөрәсән" тип атайҙар. Был "Хөрәсән" тигән административ берәмек булған өлкәнең атамаһы менән беҙҙең башҡорттоң сибек, көсһөҙ кешегә ҡарата ҡолөп, кәмһетеп әйтелгән "хөрәсән" тигән һүҙе араһында берәй уртаҡлыҡ, бәйләнеш бармы икән?**

Ҡыҙыҡһынып эҙләнә, тикшерәнә торғас, бында тик ябай оҡшашлыҡ ҡына барлығы асыҡланды. "Хөрәсән" ерҙең, өлкәнең атамаһы булараҡ бик боронғо замандарҙан билдәле һәм боронғо иран телдәрендә, шулай уҡ хәҙерге фарсы телендә лә "Көнсығыш" һәм "кояш ҡалҡҡан яҡ (ер)" тигән мәғәнәлә ҡушылған был ерҙәргә. Ысынлап та, был өлкә Иран дәүләтенең көнсығышында, ҡояш ҡалҡҡан яҡта ята. Фарсылар иһә был яҡтарҙан күпкә көнбайыштараҡ йәшәй. Был яҡтарҙа күберәген фарсы теленән ныҡ айырылып торған иран телдәренең көнсығыш төркөмөндә һөйләшкән, күсмә малсылыҡ менән шөғөлләнгән ҡәбиләләр йәшәгән, ә аҙағыраҡ был ерҙәргә шулай уҡ төрки телле ҡәбиләләр ҙә килеп урынлашып, йәшәп китәләр. Шул айҡанлы был яҡ фарсы телендә һөйләшкәндәр йәшәгән яҡтарҙан тел һәм этнографик яҡтан айырылыңҡырап тора. Ә нисек итеп башҡортта был "хөрәсән" атамаһы "көсһөҙ, сибек" мәғәнәһен алып, таралып киткән һуң, тигән һорау тыуа.

Бәҡтиһән, иран телдәрендә ошо "хөрәсән" һүҙенә яңғырауы буйынса оҡшашыраҡ, әммә бөтөнләйе икенсе мәғәнәләге, башҡорт телендә ҡулланылған бағы "хөрәсән" һүҙенә яҡын һүҙ ҙә бар икән. "Тиҙ генә һынып, бирешеп, бөгөлөп барыусан" нәмәгә ҡарата иран телдәрендә - "ҡорәсән, ҡраусан, ҡраусанд", тиҙәр. Һәм ошо һүҙ шул уҡ мәғәнәлә, тик әҙ генә үҙгәреш кисереп, "хөрәсән" формаһын алып, башҡорт телендә әле булһа йәшәп ята, имеш. Тик беҙҙә "К" өнө "Х" өнөнә алмашынған. Бәлки, бик боронғо дәүерҙәрҙә Көньяҡ Уралда, беҙҙең башҡорт ерҙәрендә йәшәгән көнсығыш Иран телдәренең берендә һөйләшкән, аҙағыраҡ башҡорттоң формалашыуында төп компоненттарҙың береһе булараҡ инеп киткән саҡ, сармат, алан ҡәбиләләренең телендә "К" өнө урынына тәүҙән үк "Х" өнө булғандыр, тип тә фаразларға була.

Тик быныһын тикшереү инде башҡорт телселәренең бурысы. Әлегә иһә, боронғо Иран донъяһына барып етеү, уның башҡортто формалаштырыуҙағы урынын тикшереү түгел, хатта үҙебеҙҙең дәүерҙәргә күпкә яҡыныраҡ булған төрки дәүерҙәрҙе лә ныҡлап тикшереүгә тотонғаныбыҙ юҡ. Шуныһы үкенесле.

Зәкирйән ӘМИНЕВ, этнограф.

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

# Шифа

10

10 - 16 февраль (шаҡай) 2018 йыл №6 (788)

ҺАЙ, БАШҠОРТ АШТАРЫ!

# ҠАҘЫМЫ, ӘЛЛӘ ҠАҘЫЛЫҠМЫ?



**Былтыр телевидениенан ҡаҙы тураһында бер тапшырыу күрһәттеләр. Башҡорт ҡаҙыһы тураһында берәү һөйләй, өс егет уға ара-тирә ҡушыла, йөпләй. Алып барыусы үҙе "ҡаҙы" һүҙе урынына гел "ҡаҙылыҡ" ти. "Йылҡы ите" урынына "ат ите" тип һөйләй. Бынан алты-һигеҙ йыл элек ҡаҙы тураһында "Башҡортостан" гәзитендә яҙғайным инде. Доға ҡабатлағандан исҡермәй, тигән шикелле, уға тағы тукталмаҡсымын.**

**Ҡаҙы өс төрлө була:**

1. Эс майынан (ҡорһаҡ майы) эсәккә тоҙлап тултырылғаны. Тоҙҙан башҡа бер нәмә лә һалынмай, төрлө тәмләткестәр ҙә ҡушылмай.

2. Ҡабырғалы ҡаҙы - ҡабырғалағы ит өҫтөнә үҫкән майҙан яһала. Быныһына әҙерәк ит ҡушып, эсәккә тултыралар. Майы күберәк булған һайын яҡшыраҡ.

3. Ял ҡаҙыһы. Йылҡыһының ялынан ҡырҡып алалар. Дөрөҫөрәге, елкәндәге ит ҡырҡыла, тарамышынан айырып, эсәккә тултырмайынса ғына бешерәләр. Ҡаҙаҡтар ҙа ҡабырғалы ҡаҙыны эсәккә тултырмай, ҡабырға ите менән бергә бешерә. "Ҡаҙылыҡ" - диалект һүҙе. Ҡайһы яҡта уны хатта "тултырма" ла тиҙәр. Әммә күпселек башҡорттар "ҡаҙы" ти.

Тапшырыуҙа ыҫлау тураһында ла һүҙ барҙы. Ҡаҙыны ыҫлағандарын күргәнем юҡ, әммә ҡояш төшмәгән урында ҡаҡлағандарын күреп йөрөнөм. Әлбиттә, ыҫланған ҡаҙы ла була. Уны ағас сөрөгәнең төтөнө менән эшкәртәләр. Теләһә ниндәй ағас менән түгел. Мәҫәлән, ерек яҡшы һанала. Кемгә нисек оҡшай инде.

Ҡаҙы йылҡының йәшенә, нисек ашатыуға, ашамлыҡтың сифатына, хужаһының эшлеклегенә лә бәйле. Йылҡыны һуймаҫтан алда уҡ ниндәйлеген әйтеүселәр була. Бәхәс тә тыуа. Һуғым һуйыу үҙе бер байрамға әйләнә. Һимеҙлеген ҡабырғаға үҫкән майҙың ҡалынлығы менән үлсәйҙәр (ҡорһаҡ тәнгәлендәге май). Бармаҡ менән! Бер иле ("илле" лә тиҙәр), ике иле, өс-дүрт һәм биш бармаҡ ҡалынлығына етһә, "биш иле" тип әйтмәйҙәр, ә "бер ая" тиҙәр. Бер илегә етмәһә, "сығанаҡ" ҡаҙыһы була. Йылҡы бик нығ һимерһә, һуйған ваҡытта арҡаһына һалғанда ҡабырғаһы майҙы күтәрә алмай һыныуы ла ихтимал (күргәнем бар). Ике йәшлек йылҡы 1-2 иле май бирә, 4-5 йәшлектәре - күберәк.

Һуғым малын 40 көндән дә әҙ ашатмайҙар. Алдында яҡшы бесән, һоло, арпа, бойҙай, һәр саҡ һыу булырға тейеш. Кисәкле тоҙ ҙа яһын. Иркендә йөрөү ҙә файҙалы. Бәйләп ҡуйып та ашатырға мөмкин. 40 көндә үҙе ауырлыҡ иген ашаһа, йылҡы һимерә. Әгәр ҡаҙы булһын тиһәң, йыбанмай, төндә лә тороп аҙыҡ бирергә кәрәк. Айғырға ҡарағанда бейә малының ите тәмлерәк, ун йәште үткән йылҡы ите бик яҡшы булмай.

Сиҙәм үҙләштергән йылдарҙа урыҫ халҡы ла беҙҙең яҡта йылҡы итенең тәмен белеп ҡалды. Марущак исемле бер украин гел генә йылҡы һуя торғайны. Һуйырға башҡорттарҙы саҡыра. Бер башҡорт ял ҡаҙыһын тарамышы менән ҡырҡып алып: "Этим я сапоги шью", - тип ташлап ебәрә. Марущак күреп ҡала ла: "Я тоже сапоги шью", - тип барып ала. Был турала мәҙәк итеп һөйләйҙәр.

Кискеһен һуғым итенә йыйылалар. Әлбиттә, эс ҡаҙыһы бешерелә. Эсәктең йыуанлығы малдың йәшенә ҡарап төрлө була, ҡаҙы ла шуға бәйле бит инде. Кемдер бер ҡырҡым ашай ала, кемдер 2-3-тө. Минең ағай 12 ҡырҡым ашай ала ине! Ҡырҡымдың уртаса диаметры 4-5 сантиметр була, оҙонлоғо - 1,5 бармаҡ яҫылығында. Бына шулай ашанылар элек.

Атай Монголияла хеҙмәт иткән осорҙа күргән аттар тураһында һөйләй торғайны. Ундағы халыҡ өйөрөндәге йылҡы малының һанын да белмәгән. Тик 1941 йылда һуғыш башланғас ҡына иҫәпләй башлағандар. Атайҙың әйтеүенсә, далала йөрөгән йылҡы бик кәр (һимеҙ) булған. Һыу юҡлыҡтан үлеп ятҡан аттарҙың эсен ярып ҡараһаң, 3-4 иле майы була торғайны, тип һөйләй ине мәрхүмең.

**Х. ДӘҮЛӘТБАЕВ.**
**Хәйбулла районы Аҡъяр ауылы.**

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# ТУҒАНЫҢА ӨЙЛӘНМӘ!

**Башҡорттарға ете быуынын белеү һәм шәжәрә төҙөү ни өсөн мөһим?**

- Уның бер сәбәбенә генә туҡталайыҡ. Башҡорттарҙа ете быуын алышҡансы ҡан туғандар менән ғаилә ҡороу ярамай торған ғәмәл һынала. Фән күҙлегенән ҡарағанда, кешенең ген системаһы нәҫелдән күскән программалар йыйынтығы кеүек, бөтә тормошона йоғонто яһай. Тышҡы ҡиәфәтебеҙ, күҙҙәр һәм сәс төҫө, танау формаһы, атайға йә әсәйгә оҡшаш булыуыбыҙ, ҡайһы бер ғәҙәттәр - бөтәһе лә беҙ донъяға килмәҫ борон ген кимәлендә һалынған. Ҡайһы бер ауырыуҙар ҙа шул уҡ гендар менән нәҫелдән-нәҫелгә күсеүе бөтәһенә лә мәғлүм. Гендарға бәйле тикшеренеүҙәр үткәрелә башлауға тиклем үк беҙҙең ата-бабалар икеһе ике нәҫелдән, ике ырыуҙан булған башҡорттарҙан тыуған тоҡомдоң һау-сәләмәт булыуын аңлаған. Һунынан ғилми тикшеренеүҙәр үткәреп, бының дөрөҫ булыуы иҫбатланған. Нәҡ шуның өсөн ир һәм ҡатындың бер ҡандан булмауы мөһим.

Ә бына яҡын туғандар өйләнешһә, уларҙың гендары бер ишерәк була. Шуға күрә, тыуасаҡ бала нәҫелдән килгән ауырыуҙарға дусар булыуы ихтимал. Нәҫелдән тапшырылған Даун синдромы, гемофилия һәм яман шеш булыу ихтималлығы ла гендарға бәйле. Яҡын туғандарға өйләнеү ғәҙәте булған ғаиләләрҙә сабый үлеме йыш теркәлә һәм тыуасаҡ балалары зәғиф булыуы мөмкин.

Билдәле ғалим Чарльз Дарвин ике туған апайына өйләнгән була. Уларҙың ғаиләһендә ун бала донъяға килә, дүртәүһе һау-сәләмәт була, ә өсәүһе сабый саҡта скарлатина һәм үпкә сире менән ауырып үлеп китә, ҡалған өсәүһе түлһеҙ була. Яҡын туғандарҙың өйләнеүе ауыр эҙемтәләргә килтереүенә тағы бер миҫал - Романовтар династияһы. Ул заманда батшалар тик батша ҡыҙына ғына өйләнгән. Һөҙөмтәлә, Романовтар династияһы бөтә сит ил батшалары менән туғанлашып бөтә, нәҫелдән килгән ауырыуҙар уларға ла бирелә. Ошо сәбәптән тәхет варисы Алексей Николаевич гемофилия менән ауырый һәм батша Николай II менән батшабикә Александра Федоровна бөтә көсөн, иғтибарын улдарына йүнәлтеп, Рәсәй империяһы тураһында хәстәрлектәрен онота. Батша ябай крәстиән ҡыҙына өйләнһә, XX быуат башында илдең өҫтөн-аҫҡа әйләндергән ваҡиғалар булмаҫ та ине, бәлки.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

# МИН ШУЛАЙ СИХӘТЛӘНӘМ...

**Апайым үҙен халыҡ медицинаһы белгесе тип атаған Малаховтың телевизорҙан барған тапшырыуҙарын ҡалдырмай ҡарап, унда ишеткәндәрен яҙып бара. Беҙ һәр ваҡыт ауырыуҙарыбыҙға дауаны ана шулай имеш-мимештәрҙән, ситтән эҙләйбеҙ шул. Ә үҙебеҙҙең өләсәйҙәрҙән, инәйҙәрҙән ишеткәндәрҙе һанлап бармайбыҙ.**

Әйҙәгеҙ, хәтер һандығын аҡтарайыҡ әле, тип мөрәжәғәт итмәксемен "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға. Үҙебеҙҙең башҡорт халыҡ медицинаһы дауаһы өлгөләренә мөрәжәғәт итәйек.

Бала саҡта һалҡын тейҙереп ауырыуҙарымды, мәҫәлән, мәтрүш, һары мәтрүшкә, еләк, ҡарағат япраҡтары сәйе эсереп, картуф быуы һулатып, аяҡтарҙы йылы һыуға тығып дауалай инеләр. Әлеге кеүек, сир аҙналарға һуҙылмай ине. Мин әле булһа шул өләсәйем, әсәйем дауаларын ҡулланам. Май айында уҡ йыя башлайым төрлө сәй үләндәрен һәм япраҡтарын. Әсәйем уларҙы йыйғас та киптермәй, ә һыу бөркөп, мейестә ултыртып, енелсә быҡтырып ала ине. Шунан ғына киптерә. Үләндәрҙең шифаһы һәм хуш еҫе нығыраҡ һәм оҙағыраҡ һаҡлана, стерилләнә лә, ти торғайны әсәйем.

Ә һеҙҙең хәтерегеҙҙә ниндәй дауалау алымдары һаҡланған? Әйҙәгеҙ, һәр кемегеҙ үҙ белгәндәре менән уртаҡлашһын, сығыш яһаһын.

**Мәсҡүҙә АРАЛБАЕВА.**

# ТИРЕГӘ ЯТЫУ

**Элек башҡорттар аяҡ-ҡулы, быуыны һыҙлаһа, бил һәм умыртҡа һөйәге яфалай башлаһа, яңы ғына һуйылған малдың тиреһенә ятып дауаланған. Минең инәйемдәр ҙә, әсәйем дә был ысулды ҡуллана ине.**

Был эштә ярҙамсы ла кәрәк була, ул малды тунағансы көтөп тороп, тирене йылы көйө йүгертеп индереп бирә. Ә тирегә ята торған кеше урын йәйеп, түшәк өҫтөнә клеенка һала ла, тирене эске яғын өҫкә ҡаратып түшәп, уға ята. Уны тирегә урарға ла, өҫтөнән юрған ябып, ситтәрен ҡымтып ҡуйырға.

Бер сәғәт яткас, дауаланыусыға йылы һыу менән сайынырға ярҙам итергә. Унан һуң ул кире йылы урынға ятып, ял итергә тейеш. Тәнен тире һурған кеше изрәп йоҡлап китә, уға, әгәр ҙә сарсап китһә, бер шешке йылы сәй бирергә мөмкин. Ошо процедуранан һуң тирене сығарып тоҙлап ҡуйһаң да була, шул уҡ тирегә икенсе тапҡыр ятырға кәнәш ителмәй. Был көндә эсә мунса төшөргә, сабынырға ярамай, ә йылы итеп кейенеп, һаҡланып ҡына йөрөргә кәрәк.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*✓ Мин үҙем әле лә был ғәҙәтте ташламайым, тау артылып, арып ҡайтам. Тын асыла, еңел һулайһың. Мунсала үлән һыуы менән йыуынып, сабынып та ебәрһәң - шул инде дауаһы. "Янғантау"ҙарың ары торһон.*



ХАЛЫҠ ӘЙТКӘНЕ



## ТАУ ҺАУАҺЫ, БЕЙЕКЛЕК...

**Һимеҙлектәнме, аҙ хәрәкәтләнеүҙәнме, көйәҙ генә кейенеп йөрөп, һыуыҡ тейҙереүҙәнме - күп кешенең тын алышы ауыр, насар (икенсе тын сыҡмай, тибеҙ быны). Был осраҡта ҡарт өләсәйем Ғәлиә Ғайсина беҙҙе бейек түбәләскә, Иҙел ярына туп-тура баҫып менергә өйрәтә ине. 1-2 көн шулай эшләгәс, тауға менергә, тау һауаһын тәрән һуларға ҡуша. Шул саҡта төрлө үләндәрҙең еҫе тәьҫиренән баштар әйләнеп китә ине.**

Мин үҙем әле лә был ғәҙәтте ташламайым, тау артылып, арып ҡайтам. Тын асыла, еңел һулайһың. Мунсала үлән һыуы менән йыуынып, сабынып та ебәрһәң - шул инде дауаһы. "Янғантау"ҙарың ары торһон. Тик быны урыҡ-һурыҡ түгел, даими эшләргә кәрәк.

Яланбаш, ҡолаҡты күрһәтеп йөрөүҙе лә тыйҙы өләсәй. Сөнки ҡолаҡ япрағында һәр ағзаның нөктәһе була, эҫе лә, һыуыҡ та шунан эскә инә, ти ине, гел ҡолаҡты ыуалатты (хәҙергесә массаж була инде).

## ҮЛӘН, ОЙОТҠАН, "ҠАРА АҘЫҠ", ХӘРӘКӘТ

**Үләндең файҙаһы көслө, аңлашыла. Ләкин Баймаҡ районы Билал ауылында ғүмер итеп үлгән мулла Юламанов Абдулла әйтеүенсә, үҙ төбәгендә үҫкәне - иң файҙалыһы. Ул Ирәндек ҡыҙырып, дарыу үләне йыйҙы, шуның менән халыҡты дауаланы.**

Ойотҡан - сөсө (диабет) ауырыуынан бик шифалы дарыу, даими эсегеҙ. Бигерәк тә кис ятыр алдынан. "Ятыр ҡорһаҡ яншамай, ашҡаҙанды төнгөләккә тултырмағыҙ, йөрәк тә, бөтә тән дә ағыулана", - тиер ине әсәйем. Ғөмүмән, беҙ кискелеккә ашарға бешермәнек, гел ойотҡан эсеп яттыҡ. Хәҙер 3-4 һыйырлы кешеләр ҙә ойотҡан эшләмәй, балаларына эсереп ғәҙәтләндермәй. Магазиндан гел шәрбәтле аҙыҡ һатып алған булабыҙ. Өйҙәгене тәрбиәләп өйрәнергә кәрәк.

"Ҡара аҙыҡ" нимә һуң ул? Ул - икмәкте самалап ашау, ҡорот, аҡ һәм ҡыҙыл эремсек, ҡатыҡлап йәки ҡоротлап итһеҙ һалма, һәр төрлө ярманан өйрә, бутҡа, айран, арыш талҡаны, айыртылған һөттө бешереп эсеү, эркет ҡайнатҡанда күбеген ялау, күбек майы эшләп ашау. Уларҙан һуң муйыл, балан, миләш ҡағы ҡушып, үлән сәйе лә эсһәң - бына һиңә шифахана!

Дин дә, медицина ла бер төрлөрәк ризыҡ ашарға өйрәтә. Сөнки бик күп төрлө ризыҡ ашҡаҙанды ҡуҙғыта, кәрәкмәгән матдәләр бүлеп сығарырға мәжбүр итә. Һөҙөмтәлә - тотош организм ағыулана, ауырый башлайһың. Байлыҡ, муллыҡ, тип, өҫтәл һығылдырып әҙерләү кәрәкмәй. Тәнгә сихәтле ризыҡтарҙы самаһын белеп кенә яраштырырға тырышайыҡ.

Йәйәү йөрөүҙе бөтөнләй онотттоҡ. Гел машинала һелкенеп йөрөү йөрәкте һелкетә, ағзалар эшмәкәрлеген боҙа, кеше һимерә һәм шәкәр ауырыуына һабыша. Һаулыҡ үҙ ҡулыбыҙҙа, ялҡауланырға ғына ярамай.

Үлән, ойотҡан, "ҡара аҙыҡ", хәрәкәт - бына инде беҙҙең дуҫтар, онотмағыҙ шуны. Боронғоларҙан ҡалған аманат бит улар. Тағы ла шуларға өҫтәп, һалҡынсараҡ өйҙә ҡатыраҡ түшәктә лә ятһаҡ, тәнебеҙ сынығыр, нығыныр ине. Бигерәк тә ир-аттарға файҙалы был кәңәштәр.

**Әнүәрә МОНАСИПОВА.**

# ТӘНЕБЕҘҘӘГЕ

## Ҡолаҡтарығыҙҙы соҡомағыҙ!

**Кинәт кенә бер йә ике ҡолағы ла тоноп, ЛОР-табипҡа күптәрҙең мөрәжәғәт иткәне барҙыр. Күпселек осраҡта был тауыш ишетеүҙең тышҡы юлында (наружный слуховой проход) сайыр төйөрө (серная пробка) барлыҡҡа килеп, ҡолаҡтың барабан пәрҙәһен ҡаплауҙан була. Ҡайҙан килеп сыға бындай "пробка"лар? Ундай нәмәне булдырмау өсөн ни эшләргә һәм нимә эшләмәҫкә кәрәклеген асыҡлау өсөн, медицинанан алыҫ булған күпселеккә тышҡы ҡолаҡтың (наружное ухо) анатомияһы һәм физиологияһы хаҡында ябай ғына тел менән бер аҙ һөйләп үтеүҙе кәрәк тип һанайым.**



Ҡолаҡтың тауыш ишетеү юлының стенкаларындағы тиреһе аҫтында сайыр биҙҙәре бар. Кешенең ғүмере буйына шул биҙҙәр бүлеп сығарып торған ярым шыйыҡ сайыр ҡолаҡ эсен һәр төрлө тышҡы зарарлы факторҙарҙан - ваҡ бөжәктәрҙән, микроорганизмдарҙан, бактерияларҙан һәм бәшмәктәрҙән һаҡлаусы барьер булып тора. Сайырҙың дезинфекциялау үҙенсәлеге бында иң мөһим роль уйнай. Бынан тыш, шул ишетеү юлының тиреһе ваҡ ҡына йөндәр менән ҡапланған. Ул йөндәр барыһы ла тыш яҡҡа ҡарай ятып үҫә. Кеше сәйнәгән һәм һөйләшкән ваҡытта, ишетеү юлының һөйәкһеҙ булған аҫҡы стенкаһы хәрәкәткә килеп, ваҡ йөндәрҙе лә хәрәкәтләндерә. Һөҙөмтәлә, ҡолаҡ эсендә йыйыла башлаған сайыр әлеге йөн бөртөктәре ярҙамында этәрелеп сыға башлай. Саң бөртөктәрен һәм башҡа төрлө зарарлы матдәләрҙе йәбештереп алған сайыр үҙенән-үҙе тәгәрәп, тышҡа төшөп тора. Нормала беҙ уны һиҙмәйбеҙ ҙә тиерлек, сөнки ул бөртөктәр бик ваҡ ҡына була. Ҡайһы бер осраҡтарҙа, ҡәҙимгә ҙурайып (шырпы башындай булып) килеп төшкөләгәнен, моғайын, һәр кем тойғаны барҙыр. Был - норма. Шулай, бөтә тәнебеҙҙәге ағзаларыбыҙ һымаҡ, ҡолаҡтарыбыҙҙы ла ғәжәп камил итеп яралтҡан Аллаһы Тәғәлә. Ишетеү рецепторҙары урынлашҡан эске ҡолаҡты (внутреннее ухо) ифрат та ҡаты һәм ныҡ булған баш һөйәге (череп) эсенә урынлаштырһа, уға тыштан инеү юлына ла әллә күпме "һаҡсы" ҡуйған. Ул ғына ла түгел, ишетеү юлының үҙенән-үҙе таҙартылып тороу механизмын да яралтҡан бит.

Әгәр бына ошо нормаль физиологияға ниндәйҙер тышҡы тәьҫир булған хәлдә, сайырҙың үҙаллы сығарып ташланыу процесы ла боҙолоуы мөмкин. Күпселек осраҡта саманан тыш таҙарынырға яратыусы "ҡолаҡ хужаһы" үҙе үк быға сәбәпсе булып тора: шырпы осона мамыҡ урап (йә мамыҡһыҙ көйөнсә) йәиһә аптекаларҙа һатылып торған махсус "таяҡса"лар ярҙамында, үҙенән-үҙе сығып килә ятҡан сайырҙы ишетеү каналының стенкаһына "һылап" та ҡуя. Башҡа ағзалар һымаҡ үк, ҡолаҡ эсе лә даими таҙартылып торорға тейеш, тип һанай был "тырыш кеше". Сайырҙың киләһе "порция"һы ла тәүгенең өҫтөнә һыланып, әкренләп ҡалыная бара. Ул ғына ла түгел, ана шундай "таҙартыу" процесында сайырҙың күпмелер өлөшө төпкә, йәғни, барабан пәрҙәһенә ҡарай этелеп, шунда ла йыйыла. Ҡолаҡты ни тиклем йышыраҡ соҡоһаң, механик тәьҫирҙән ярһыған сайыр биҙҙәре үҙ продукцияһын шул тиклем күберәк эшләп сығара башлай. Баштараҡ әйткән микроскопик йөндәр ҡолаҡ стенаһына сайыр менән ҡуша һыланған килеш ҡатып, үҙенең этәреп сығара торған функцияһын атҡара алмай. Күпмелер ваҡыттан (айырыуса, йыуынған мәлдә, ҡолаҡ эсенә һыу эләгеп, сайырҙың бүртеп ҙурайыуы арҡаһында), ишетеү юлы әлеге "пробка" менән бөтөнләйгә ҡаплана. Кеше тағы, ғәҙәтенсә, шырпыға тотона. Таҙартырға маташып, бер талай соҡоп, ҡолағындағы төйөрҙө артабан да бер аҙ "нышып" алғандан һуң, ЛОР табипҡа мөрәжәғәт итергә мәжбүр була. Табип ҙур шприц ярҙамында төйөрҙө йыуҙырып сығарыу менән кеше ҡабаттан ишетә башлай. Бына шундай ваҡыттарҙа мин, врач булараҡ, һәр саҡ үҙемдең пациенттарыма ошо хаҡта аңлатыу эштәре алып бара торғаныйм.

Сайыр төйөрөнөң ҡолаҡты ҡаплау осраҡтары йыш ҡына балаларҙа ла күҙәтелә. Артыҡ "чистуля" булған бәғзе әсәләр балаһының ҡолағында соҡсонорға яратыусан. "Көн дә тиерлек таҙартып торам, әллә ҡайҙан килеп сыға был пробка..." тип доктор алдында хатта аҡланыусан була бындай пациенттар. Быға тап ана шул "яман ғәҙәтегеҙ" сәбәп булып тора ла инде, тип әйтә инем мин уларға һәр саҡ.

Ҡолаҡтарын таҙартыра яратыусылар тағы бер проблема менән осрашыусан. Бындай ғәҙәт йыш ҡына "наружный отит" тигән сиргә алып килә. Ҡолаҡтың тышҡы юлында ҡаты әйбер менән соҡоноу сәбәпле, уның стенкаһында микросыйылыуҙар барлыҡҡа килә һәм уларға инфекция эләгә. Ҡолаҡ стенкаһының шешенеп, эренләп, нык ҡына әрней башлауы кешенең табипҡа мөрәжәғәт итеүенә тағы ла сәбәп була.

Шулай уҡ, күп кенә осраҡтарҙа, унда стафилококк, стрептококк һымаҡ микроорганизмдарҙан тыш, бәшмәк (грибок) тә килеп эләгеүе мөмкин. Ҡул, аяҡ тиреһендәге күҙгә күренмәгән бәшмәктәр ифрат та йомшаҡ һәм наҙлы булған ҡолаҡ тиреһендә шәпләп үрсеүсән. Ауыртыу ҡатыш нык ҡысыта башлау менән иң тәүҙә ана шул бәшмәк хаҡында уйланыу һәм шул йүнәлештә дауалана башлау ҙарур. Һәр хәлдә, табипҡа барыу кәрәк.

Үкенескә, ошондай проблема менән килгән пациенттарға (балаһы менән мөрәжәғәт иткән йәш әсәләргә) бәғзе йәш педиатрҙарҙың "нишләп балағыҙҙың ҡолағын таҙартмайһығыҙ", тигән иҫкәрмәләрен ишетергә тура килә. Ә әлеге килгән әсәнең тап ана шул ҡолаҡ таҙартырға яратыусы икәне хаҡында белеү кәрәк. Ғөмүмән, балаларығыҙҙың да, үҙегеҙҙең дә ҡолағығыҙ эсендә соҡсонмауығыҙ хәйерлерәк, тип әйтер инем. Ҡолаҡтарҙы бармаҡ һыйғансы ғына ҡәҙәр генә йыуыу менән сикләнеү кәрәк.

Киләһе кәңәшем, ҡасандыр урта ҡолағы эренләп (воспаление среднего уха), барабан пәрҙәһе тишек көйөнсә ҡалған пациенттарға. Әгәр әлеге әйткән сайыр төйөрө һеҙҙә килеп сыға икән, ҡолағығыҙҙы сайҙыртырға йыйынған докторға был хаҡта әйтеү мотлаҡ. Бәғзе берәүҙәр, тартынып тормай: "Минең был ҡолағымдың перепонкаһы тишек ул", - тип әйтеүсән. Һәм был - ифрат та дөрөҫ. Сөнки, йыуҙырған мәлдә барабан пәрҙәһендәге тишек (перфорация) аша шыйыҡса эләкһә, урта ҡолағығыҙҙың ҡабаттан эренләп, ауырта башлауы мөмкин. Бындай осраҡтарҙа отоларинголог, ғәҙәттә, сайыр төйөрөн инструменттар ярҙамында тартып сығара.

Сайыр пробкаһының тағы бер ҡыҙыҡ әтнәкәһе булыуы мөмкин. Бәлки, күптәрегеҙ иғтибар ҙа иткәне барҙыр: ҡолаҡ эсендә соҡона башлау менән... йүтәлләргә тотонаһың. Тышҡы ишетеү юлының тиреһендәге һиҙеү рецепторҙары йүтәлләү үҙәге менән дә бәйле булыуынан был күренеш. Әлеге әйткән төйөр ҙурайып, ҡатып торһа, ана шул рецепторҙарҙы ярһытып ҡуҙғытыу сәбәпле, тын алыу юлдары һап-һау булыуына ла ҡарамаҫтан, кешелә йүтәл башлана. Төп сәбәпсе булған ана шул "пробка"ны алып ташламай тороп, йүтәлдең тынмауы ла мөмкин...

✓ *Танау аша тын ала алмау, ҡайһы берәүҙәрҙә төнгө йоҡолар боҙолоу, нервылар системаһы ауырыуҙарына ла этәргес булып тора. Бындай балаларҙың, ғәҙәттә, физик яҡтан үҫеше лә артта ҡалыусан.*



# ИКЕ АҒЗА ХАҠЫНДА ҺҮҘ

## "Танау ғына" тимәгеҙ...

**Моғайын, танауы тонған мәлдәрҙә һәр кемдең иғтибар иткәне барҙыр: ауыҙыңды нисек кенә киң итеп асып тын алһаң да, һулаған һауа барыбер етешмәгән һымаҡ. Ә танау тишектәре ауыҙға ҡарағанда мәртәбәләргә тарыраҡ булыуына ҡарамаҫтан, фәҡәт танау менән һулаған саҡта ғына кеше иркен тын алып, унан тулы ләззәт таба. Ҡайһы берәүҙәр, ауыҙ аша һулағанда һауа етешмәүен, быға ғәҙәтләнмәгән кешенең субъектив тойоуы ғына, тип һанай. Улай ғына түгел икән шул. Әгәр беҙ танауҙың анатомик төҙөлөшө һәм нормаль физиологияһын ябай ғына кимәлдә күҙ алдыбыҙға килтерһәк, ни өсөн һулаған һауа үпкәләргә башлыса танау аша үтеп инергә тейешлегенә шунда уҡ төшөнәбеҙ.**

Танау ҡыуышлығының өҫкө өлөштәрендә (верхний носовой ход), үпкә альвеолаларының (микроскопик ҡыуыҡсалар) тулыһынса яҙылыуына булышлыҡ итеүсе нерв рецепторҙары урынлашҡан. Ә үпкәгә һауа илтеүсе ҡурылдайҙарҙың иң һуңғы, функциональ өлөшө булып торған альвеолалар, һулаған һауаны үҙҙәре аша үткәреп, ундағы кислородты ҡан капиллярҙарына тапшырыу һәм ҡандағы углекислый газды үҙенә алыу (воздухообмен) функцияһын үтәй. Танау тонған мәлдә, ана шул альвеолалар тулыһынса яҙылып етмәү сәбәпле, ауыҙ аша тын алыу менән һис кенә лә мөрхәтһенмәйбеҙ. Шундай осраҡта беҙгә ысынлап та һауа етешмәй шул. Аллаһы Тәғәлә әҙәм балаһына бына ни өсөн танау биргән икән.

Бынан тыш, танауҙы "тын юлын һаҡлаусы барьер" тип тә атайҙар. Танау ҡыуышлығы бихисап ҡан капиллярҙары булған лайлалы тиресә (слизистая оболочка) менән ҡапланған. Ә эстән ике яҡлап буйҙан-буйға урынлашҡан икешәр пар танау ҡабырсағы (носовая раковина) шул ҡатламдың майҙанын тағы ла ҙурайта. Бына шундай анатомик төҙөлөш арҡаһында, танау ҡыуышлығы беҙ һулаған һауаны йылытып, тамаҡ юлын, ҡурылдай һәм үпкәләрҙе һалҡын тейеүҙән һаҡлап тора. Танау эсендә һәр саҡ бүленеп сығып торған лайла (слизь) ла үҙенсә ҙур роль уйнай. Беренсенән, ул һулаған һауаны дымландырһа, икенсе яҡтан, һәр төрлө бактерияларҙы, башҡа зарарлы матдәләрҙе лә үҙенә йәбештереп тотоп алып, күпмелер йыйылғас, тышҡа сығарып (һеңгереп) ташлана. Ә эрерәк ҡый-ҡыпыр, бөжәк маҙарҙы танауҙың башланғыс өлөшөндәге (преддверие носа, латинса - вестибюль) тышҡа ҡарай ятып үҫкән ваҡ йөн бөртөктәре тотоп алып ҡала. Сөскөрөү рефлексы ла тап ана шул һаҡлау функцияларының береһе. Танау эсенә килеп ингән һәр төрлө химик һәм механик агенттарҙы "ашығыс" ҡыуып сығарыу сараһы ул. Танауҙың өҫкө юлында урынлашҡан еҫ һиҙеү рецепторҙарының да роле ҙур. Сифаты боҙолоп, ашарға яраҡһыҙ хәлгә килгән ашамлыҡтарҙың еҫен ваҡытында һиҙеп, күп кенә осраҡтарҙа һәр төрлө ағыуланыуҙарҙан да ҡотолоп ҡалабыҙ. Ә инде күңелгә ятышлы булған төрлө хуш еҫтәр беҙҙең кәйефебеҙҙе ыңғайға көйләү сәбәптәренең береһе лә булып тора.

Әммә, йыш ҡына, һәр төрлө сәбәптәр арҡаһында бына шул тын юлыбыҙҙың "ҡапҡаһы" өлөшләтә, йә иһә бөтөнләйгә "ябылып" та ҡуя. Танау аша һулауҙың ауырлашыуы, иркенләп йәшәргә мөмкинлек бирмәй, йыш ҡына ҙур проблемалар тыуҙыра ла инде. Шул осраҡта ғына әҙәм балаһы саф һауаның ни тиклем ҡәҙерле икәне хаҡында иҫенә төшөрәләр. Ололар ҙа, балалар ҙа шул сәбәпле табип-отоларингологтың пациенты булып китә. Танау менән тын алыуҙы ауырлаштырыр сәбәптәр бихисап. Киҫкен, йә хроник тымау, балаларҙа йыш ҡына осрай торған аденоид (танау менән йотҡолоҡ тоташҡан урында үҫеп сыҡҡан "артыҡ туҡыма"), һәр төрлө нәмәгә аллергия булған кешеләрҙә рәткә күҙәтелгән полиптар, танау бүлкәһенең ҡыйшайыуы (искривление перегородки носа) һ.б. Тик ауыҙ аша ғына һулау сәбәпле, һыуыҡ һауа үтеп, кешенең тамағына, хатта үпкәһенә һалҡын тейеүе мөмкин. Әгәр кеше айҙар, йылдар буйы ауыҙы менән генә тын алып йөрөһә, йотҡолоҡ һәм ҡуғырлай (гортань) кибеп, кешеләрҙә йыш ҡына хроник фарингит, ларингит тип аталған сирҙәр ҙә барлыҡҡа килә. Танау тирәһендәге ҡыуышлыҡтың эренләүе, башлыса, тымау арҡаһында килеп сыҡҡан, гайморит тип аталған сир ҙә һирәк күренеш түгел. Балаларҙың аденоид сире төнгө энурезға (ночное недержание мочи) килтереүе лә мөмкин. Танау аша тын ала алмау, ҡайһы берәүҙәрҙә төнгө йоҡолар боҙолоу, нервылар системаһы ауырыуҙарына ла этәргес булып тора. Бындай балаларҙың, ғәҙәттә, физик яҡтан үҫеше лә артта ҡалыусан. Ҡайһы бер ата-әсә балаһының һәр саҡ ауыҙ менән тын алып йөрөүенә иғтибар итмәй, уны ваҡытында отоларингологҡа күрһәтмәһә, баланың бит конфигурацияһы үҙгәрә (өҫкө ирендәре саманан тыш ҡыҫҡараҡ булып, ауыҙы ярым асыҡ көйө формалашыуын "аденоидное лицо" тип атайҙар). Бындай балалар айырыуса, алдараҡ әйтелгән гайморит, тамаҡ сирҙәре менән яфаланыусан, шулай уҡ, иммун системаһы ла түбәнәйеүе бар. Танау ҡыуышлығы ҡолаҡтар (урта ҡолаҡ) менән бәйле булыу сәбәпле, киҫкен, йәиһә хроник отит менән ауырып киткән осраҡтар ҙа йыш ҡына күҙәтелә. Шуға күрә, әгәр балағыҙҙың, йә үҙегеҙҙең тамағығыҙ, йәиһә ҡолағығыҙ ауырта башлай икән, иң беренсе нәүбәттә танау хаҡында ҡайғырта башлау кәрәк. Танауҙың тын алышын көйләмәй, йәғни, төп сәбәпте бөтөрмәй тороп, уның юғарыла әйткән һөҙөмтәләрен генә айырым дауалау ыңғай нәтижә бирмәүе лә мөмкин. Шуға күрә, табип-отоларинголог һеҙгә комплекслы дауалау тәғәйенләһә, ғәжәпләнмәгеҙ. Ғәҙәттә, ҡолағы ауыртыу сәбәпле балаһын табипҡа алып килгән әсәләр танауына тамыҙырға ҡушылған дарыуҙы инҡар итеүсән. "Бында танауҙың ни ҡыҫылышы бар?" тип, балаһын үҙҙәренсә дауалауҙы хуп күреүселәр ҙә осрай. Бына ошо мәҡәләм менән файҙаланып, танауға дарыуҙы нисек дөрөҫ итеп тамыҙыу хаҡында ла бик файҙалы бер кәңәш бирмәк булам.

**Салҡан ятҡан килеш тамыҙған дарыу (күпселек шулайта ла инде) туранан-тура йотҡолоҡҡа ағып төшә һәм бынан дауалау һөҙөмтәһе ифрат та самалы була. Әгәр беҙ бер яғыбыҙға ҡырын ятып, аҫтағы танау тишегенә тамыҙһаҡ, юғарыла әйтелгән танау раковиналарына һәм танауҙың ана шул тышҡы "стенкаһы"на тәьҫир итеп, максималь һөҙөмтә алабыҙ, унан, әйләнеп ятып, шулай уҡ, икенсе яғына ла тамыҙабыҙ. Танау синустарының тишектәре (соустье), ҡолаҡҡа илтә торған "евстахий" торба асыҡлығы ла тап ана шул стенкала урынлашҡанлыҡтан, дарыуҙарҙы бына ошо юл менән тамыҙыу гайморит, отит һымаҡ ҡатмарланыуҙарға профилактика булып та тора.**

Анатомик йәһәттән танау синустары, ҡолаҡтар баш мейеһенән 1-2 сантиметр ғына алыҫлыҡта урынлашҡан. Шунлыҡтан, был ағзаларҙа йыш ҡына барлыҡҡа килгән эренле гайморит, фронтит, отит һымаҡ сирҙәрҙең бәғзе ваҡыт менингит, мейе абсцесы һымаҡ ифрат та ауыр ҡатмарланыуҙарға алып килеү ҡурҡынысы бар, хатта үлемесле осраҡтар ҙа булғылай. Бына ни өсөн танау аша һулауға иғтибарҙы һүрелтеү ярамай икән! Әгәр табип операция тәҡдим итһә, быға ризалашыуҙы оҙаҡҡа һуҙмау хәйерле. Эренле гайморит менән ауырып киткән пациенттарға йыш ҡына махсус энә менән тишеп, гаймор синусының эсендәге эренде һурҙырып, уны кәрәкле дарыу менән йыуҙыра торған (берҙән-бер тигәндәй) һөҙөмтәле дауалау ысулын да тәҡдим итергә тура килә. Әммә күп кенә пациенттар был процедуранан, нишләптер, ҡурҡа. Пациентын "тиштереүгә" күндерә алмаған доктор уның менән ризалашырға мәжбүр була. Әлеге ҡыуышлыҡ эсендә йыйылған эренде оҙаҡ ҡына дауалай торғас, был сир хроник формаға ла күсеүе мөмкин. Шунлыҡтан, табиптың, йәғни, үҙ һөнәре өлкәһенән ифрат та яҡшы белгән һөнәрмәндең тәҡдим иткән дауалау сараларынан баш тартмаҫҡа кәрәк.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ,**
**отставкалағы хәрби табип.**

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ



# МӨҒЖИЗӘЛЕ МАЙ

**Был май күп сирҙәргә: фибромиома, мастит, гангрена, асыҡ яра (шул иҫәптән трофик яралар), бешеү, быуындар ауыртыуы, гайморит, эренле отит, тамаҡтағы эренле шеш, экзема, түллек биҙендәге кистаға килешә.**

Уны әҙерләү өсөн эмаль һауытҡа 1 стакан таҙартылған үҫемлек майы һалып, уға шырпы ҡабындай балауыҙ өҫтәп, талғын утҡа ҡуйып, балауыҙ ирегәнсе йылытырға. Ныҡ итеп бешерелгән йомортҡа һарыһының яртыһын сәнске менән иҙергә лә, яйлап ҡына ҡатышмаға өҫтәргә. Болғап, бер төрлө массаға еткергәс, уттан алып, 10-15 минут һыуытырға һәм капрон туҡыма аша быяла һауытҡа һарҡытып, һыуытҡыста һаҡларға кәрәк. Майҙы тамыҙыу талап ителһә, уны һыу эсендә 40 градусҡа тиклем йылытып алырға. Май эшләү өсөн балауыҙ мотлаҡ тәбиғи булһын. Һөртөү өсөн теләһә ниндәй май яраһа, эскә ҡулланыу өсөн зәйтүн майы яҡшы.

1. Гайморитты дауалағанда ҡалаҡҡа һалып иретелгән әҙер майҙы шунда уҡ пипеткаға алып, танауға тамыҙырға кәрәк. Май ҡатмаһын өсөн, был процедураны тиҙ башҡарыу зарур. Ике тапҡыр тамыҙыу ҙа хатта бер ай интектергән гаймориттан ҡотолдора ала. Бының өсөн бер сәғәт интервал менән ике тапҡыр һалыу етә. Май гайморит ҡыуышлығынан эренде һурып ала.

2. Эренле отитты дауалау өсөн мамыҡты ҡаты итеп урарға ла, ҡолаҡҡа ҡуйырға, бер уҡ ваҡытта ҡолаҡ артына май һөртөргә. Шундай уҡ ысул менән башҡа отиттарҙы ла дауаларға мөмкин.

3. Тамаҡтағы эренле шеш, абцесс, эренле ангина булғанда майҙы тамаҡҡа һөртөргә, муйынға компресс һалырға кәрәк. Әгәр быны кисен, сәғәт һайын ҡабатлап торһағыҙ, таң атыуға эренле шеш һытылыр.

4. Ҡурылдайҙар (бронхылар), ашҡаҙан, эсәктәр ауыртҡанда, тәнгә сиҡан, күҙгә арпа сыҡҡанда аш алдынан ярты ҡалаҡ майҙы көнөнә өс тапҡыр ашарға кәрәк.

5. 10 аҙнаға тиклем фибромиома, түллек биҙендә киста булғанда, ул ялҡынһынғанда, мастопатия, мастит осрағында еңсәгә майлы тампон ҡуйырға һәм уны иртәле-кисле алыштырырға кәрәк. Бер аҙнанан һуң киста юҡҡа сығыр, әммә фибромиома менән оҙағыраҡ булышырға тура килер. Күкрәккә майлы салфетка һалып, уны целлофан менән ҡаплап ҡуйырға һәм мөмкинлек булғанда ике сәғәт һайын алыштырырға кәрәк.

6. Бешкәндә, эренле шеш булғанда, шешенгәндә, теш һыҙлағанда, тубыҡтар ауыртҡанда майҙы төнгөләккә ауыртҡан ергә һөртөп, йылы итеп урап ҡуйырға. Тешегеҙгә һәм теш ҡаҙнаһына майҙы һөртөгөҙ һәм һөҙөмтә көтөгөҙ.

7. Трофик асыҡ яра, гангрена урынына майлы салфетка һалып, уны ике сәғәт һайын алыштырып торогоҙ.

8. Ошо майҙы һөртөп, тырнаҡтарҙы ла нығытырға мөмкин.

ХАЛЫҠ АҠЫЛЫ



# Ә ШУЛАЙ ҘА ХОҘАЙҘАН...

## аяҡлы ғүмер һора

### Сыбыҡ

Элегерәк кешеләрҙең өйөндә йә ишек башында, йә өрләктә ҡыҫтырылған сыбыҡ булды. Был бала ҡурҡытыу өсөн түгел, ә шайтан ҡыуыу өсөн ҡулланылған. Әсе итеп сыйылдаған сыбыҡ тауышынан, йәки сыбыртҡы шартлауынан, йә тәҙрә төбөндә (һәр берећендә) яндырылған мылтыҡ дарыһы сытырлауынан шайтан да, зәхмәт тә ҡасҡан. Өйө тынысһыҙ, йә үҙе ҡурҡҡан, шикләнгән хужаларға шулай эшләргә ҡушып ителгән. Был дөрөҫ, сөнки беҙҙең менән бергә параллель донъя йәшәй, бергә йөрөй, күренеп тә ҡалалар.

### Кейем ҡотлатыу

Борон яңы кейем алһалар, йәки текһәләр, бала-сағаға өй һайын йөрөп ҡотлата ине. Ҡулдәк тегелһә, еңе ҡуйылмаҫ, итеген бөкләп текмәҫ борон йөрөттөләр. Был балаға оҙон ғүмер теләүҙе аңлатҡан. Өй һайын бала күпме йыллы һүҙ, матур теләк ишеткән һәм шулар аша шатлыҡ-кинәнес кисереп, һаулығын нығытҡан. Һәр йыллы һүҙ үҙе доға бит ул, өшкөрөүгә, дауалауға тиң. Һиңәләр, хәҙер был йола бөткән, кейемдең дә ҡәҙере юҡ. Ә беҙгә кейемде туҙғансы кейһәң, сауап була, тип өйрәтә инеләр. Ваҡыт бөтә нәмәне үҙгәртә шул, йәл.

### Өс йәшкә тиклем...

Тәҙрәнең өй эсендәге һәйбәт энергияны һурып тышҡа сығарғанын күптәр белмәйҙәр әле. Өләсәйем өс йәшкә тиклемге баланы ҡояш байыр алдынан тәҙрәгә яҡын ебәрмәне, ә беҙгә ҡараңғыла тәҙрәнән ҡарауҙы нык тыйҙы. Икенсе йән эйәләре күктән төшә, улар беҙгә оҡшамаған, ҡурҡырһығыҙ, ауырыуға эйәләнерһегеҙ, тип әйтә ине.

Тағы ла өс йәшкә тиклемге сабыйҙарға йәшел һәм башлы һуған ашатмаҫҡа, йылғала һыу индермәҫкә ҡушты. Серен һаман сисә алмайым: һуған баланың ашҡаҙанын яндырһа, иртә һыу инеү быуындарына зыян иткәндер, тип кенә фаразлайым.

### Рахит ауырыуы

Беҙ үҫкәндә оҙаҡ атлай алмай ултырған ҙур башлы, гөп ҡорһаҡлы, аяҡ-ҡулы нәҙек кенә балалар күп ине. Был рахит ауырыуы булған. Элек витаминдар юҡ, ашау наҡыҫ - шуның һөҙөмтәһе инде. Ана шундай балаларҙы, йылғаҡул ағышын, тулҡын ҡағыуын ишетмәгән ҡарағат ҡыуаҡтарын бешереп йыуындыралар, һаулыҡ биреүсе доғаларҙы уҡыйҙар һәм:

- Бүкән башы кесерәйһен,
Күпкән ҡорһағы шиңһен,
Ҡулдары матурайһын,
Аяҡтары турайһын,
Йә, Хоҙайым, был бала
Йүгерһен һәм атлаһын,
Шатландырһын әсәһен,
Шатландырһын атаһын,
Шатландырһын барыһын, - тип һамаҡлайҙар ине. Халыҡ ижадының төрлөләгәнә, дауалау ысулдарының күплегенә нисек һоҡланмайһың!

### Орғасы быҙау, орғасы бәрәс

Малды күпләп үрсетеү өсөн уның орғасы түле кәрәк. Ә ҡайһы бер кешенең мал-тыуары гел тәкә, үгеҙ үрсем бирә. Ошо осраҡта хужа ҡыҙ бала ғына тапкан ҡатынды саҡыра, ҡунаҡ итә һәм кәзә-һарыҡтарының йөнөн ҡырҡыуын үтенә.

Теге ҡатын малдың ҡойроғонан башлап ҡырҡа һәм үҙе:
- Гел тапмағыҙ тәкәләр,
Табығыҙсы орғасы,
Хужағыҙҙың кәртәләре тулһасы,
Мал-тыуары күплектән
Һәммәһенең күнелдәре булһасы, - тип һамаҡлай, аҙаҡтан доға ҡыла.

Ә һыйырҙы ҡойроғо осонан танауына тиклем уҡынауҡына һыйпай. Шул ырым тура килә торғайны. Хәҙер уны оноттолар инде.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

(Дауамы. Башы былтырғы 36-сы, 47-се һанда).

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҺАЛҠЫНҒА БИРЕШМӘЙЕК!



### Үҙем дауалайым...

Мин ейәнсәремде бәләкәйҙән һалҡын тейгәндән үҙем дауалайым. Уның температура, йүтәл, тымауы (бер юлы) булһа, 3 көндә "кеше" итәм.

Иң беренсе - сәғәт һайын ике бөртөк "С" витамины бирәм. 10 сәғәттә егерме бөртөк, йәғни 1 грамм була. Грипп, һалҡын тейгәндә был витаминды ололарға 2 гр, балаларға 1 гр ашарға мөмкин. Һуңынан ҡуйы итеп үлән сәйе әҙерләйем, йәғни кәзә һаҡалы, гөлйәмеш, мәтрүшкә, йүкә сәскәһе, бөтнөк (мята), эхинация сәскәләрен бергә ҡушып ҡушып төнәтәм. Ғөмүмән, тирләтә торған бар үләндәрҙе ҡулланам. Берәр ҡалаҡ төнәтмәне бал ҡушып ҡаптырам.

Ә температураһы юғары булғанда көнөнә бер-ике тапҡыр баланың тәнен (сикә, ҡолаҡ арты, күкрәк, арҡа, тубыктан аяҡҡа тиклем, табандарын) аҡ шыршы майы (пихтовое масло) менән ыуып, кейендереп, ярты сәғәт яткырып торам. Шулай уҡ йоҡлар алдынан арҡаһына һәм күкрәгенә компресс ҡуям. Компрестың составы: берәр ҡалаҡ сәй содаһы, аш һеркәһе, көнбағыш майы, бал, он. Бөтәһен дә болғап, ҡағыҙға буяйһың да, баланың тәненә ябаһың. 15 минут тоторға кәрәк. Температураһы төшкәс, йүтәлдән икенсе төрлө компресс ҡуям. Уның ҡатнашмаһын төрлөсә яһарға була. Мин ҡайһы ваҡыт алоэ һәм ваҡланған керән (керәнде әҙерәк һалырға, ул яндыра) йәки дегәнәк япрағы, каланхоэ, гәрсис (горчица) менән яһайым. 3-4 сәғәт тотам. Компресс өсөн үләндәрҙе алдан әҙерләйем. Алоэ, каланхоэ, һинд һуғаны, әрем, керән япраҡтарын ит үткәргес аша үткәреп, спирт һалып ҡуям. Үҙемә лә уларҙың бик кәрәк саҡтары була.

Көнө буйы йыш-йыш ҡына тамағын сөйәл үләненең (чистотел) һутына һыу ҡушып (1:1) сайҡаттырам. Уны танауына ла тамыҙам. Сөйәл үләненең һуты танау эсен киптереүе мөмкин, шуның өсөн араһында май ҙа тамыҙып алырға кәрәк. Уның өсөн календуланан май эшләп ҡуям.

Ауырыу башланғанын алдан һиҙеп ҡалһам, балаға һарымһаҡ һабағын яндырып, төтөнөн еҫкәтәм. Тымау артабан көсәймәй. Әрем һабағы тағы ла яҡшыраҡ, уны үҙемдә ҡулланып, һөҙөмтәһе һәйбәтерәк икәнен белдем. Бер үк ваҡытта сөйәл үләне һуты менән тамаҡты сайҡатырға ла кәрәк.

Шуны ла әйтеп китәйем. Йәш әсәйҙәр, ғәҙәттә, бала ауыҙына врач яҙған дарыуҙы ҡаптыра ла, шуның менән эш тә бөтә. Беренсе өс көндә бала эргәһенән китмәй, уны нығышмалы дауалау кәрәк, шулайтмағанда, әҙләгөп, баланың сире оҙаҡҡа һуҙылыуы ихтимал.

Зәйтүнә КӨҪӘПОВА.

### Ангинаға ҡаршы монгол дауаһы

Тамаҡ ауыртыуынан дүрт сәғәт эсендә дауаланыу өсөн ҡәһүә тартҡыс аша үткәрелгән ярты стакан аҡ әнис орлоғона 1 стакан һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға кәрәк.

Ҡәһүә ҡуйырығы кеүек, йәбешкәк масса килеп сыға. Уны ваҡ иләк аша үткәреп, стакандың дүрттән бер өлөшө тиклем һыу өҫтәп, тағы ла ҡайнатырға һәм 1 ҡалаҡ коньяк ҡушырға. Был ҡайнатманы ярты сәғәт һайын берәр ҡалаҡлап эсергә. Ике сәғәттән тамаҡ ауыртыуы бөтә, йотоуы еңелерәк булып ҡала. Һалҡын тейҙереп йыш ауырыған, тонзиллит, фарингит, трахеит менән яфаланыусылар өсөн дә ошо рәүешле дауаланыу иңғай һөҙөмтә бирәсәк.

### Һарымһаҡлы бал

Һарымһаҡлы балды сирләгән саҡта ғына түгел, ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында ла ҡулланалар. Был дауалау сараһы Боронғо Мысырҙа ла билдәле булған. Уны әҙерләү өсөн ни бары ике нәмә кәрәк - яңы һарымһаҡ һәм бал. Был дауаны хатта һарымһаҡ ашарға яратмаусылар ла оҡшатыр, сөнки бал уға бөтөнләй икенсе тәм бирә.

Шулай итеп, һарымһаҡлы балды әҙерләгәндә ике уртаса ҙурлыҡтағы һарымһаҡ һәм 450 грамм бал кәрәк. Балды нәҡ грамлап үлсәргә, миллилитрлап түгел. Иҙелгән һарымһаҡты килегә һалып, шыйыҡ бутҡа килеп сыҡҡансы ваҡларға. Шунан ике ҡалаҡ бал өҫтәп, тағы ла төйөргә. Бер төрлө масса килеп сыҡҡас, ҡалған балды йәйләп ҡушып бөтөргә. Әҙер һарымһаҡлы балды болғатып, банкаға һалырға һәм эшләнгән көнөн ҡағыҙға яҙып йәбештереп ҡуйырға кәрәк.

Был дауаны профилактика өсөн көн дә ярты балғалаҡ ашарға. Ауырыған саҡта шулай уҡ ярты балғалаҡ итеп көнөнә 3-6 тапҡыр ашарға мөмкин. Һарымһаҡлы балдың үҙен генә ашаһаң да ярай. Йәки лимон һуты, алма һеркәһе тамыҙылған һыуға, һөткә ҡушып эсергә була. Һарымһаҡ балы микробтарҙы үлтерә, шуға уның ярҙамында бал ҡортонан сағылған урындарҙы, йәрәхәттәрҙе, яраларҙы дауаларға мөмкин. Бит тиреһе боҙолғанда бер балғалаҡ һарымһаҡ балын 120 мл һыуға иҙеп һөртөргә була.

Һарымһаҡ балы һәр ваҡыт өлкәндәрҙә дауалау өсөн ҡулланылған. Балалар һыуыҡ тейҙереп сирләгән осраҡта ғына табандарын ыуғандар. Һарымһаҡ балын даими рәүештә ҡулланған кешеләр уның бик күп сирҙәрҙән һаҡлаусы дауа булыуын яҡшы белә, Англияла хатта ҡышҡыға алдан әҙерләп тә ҡуялар.

### Һәм тағы...

- 1 ҡалаҡ ромашкаға бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, биш сәғәт йылыла төнәтергә кәрәк. Шунан болғатырға, һөҙөргә һәм көнөнә өс тапҡыр танауға тамыҙырға.
- 3 ҡалаҡ ваҡлап туралған һуғанға 50 мл йылы һыу ҡойорға, ярты балғалаҡ бал өҫтәп, ярты сәғәт тоторға. Был һыуҙы көнөнә өс тапҡыр танауға тамыҙып торорға.
- Һуған һәм һарымһаҡты ваҡлап турап, көнөнә дүрт тапҡыр 10-15 минут тирәһе танау һәм ауыҙ аша һулап ултырырға.
- Тымаулай башлағас та, табанға горчичник ҡуйып, ҡалын йөн ойоҡ кейергә һәм ике сәғәт үткәс, алып, ун минут бүлмә буйлап шәп-шәп атлап йөрөп алырға кәрәк.
- Танау эсенә каланхоэ япрағының һутын күп итеп һөртөргә. Көнөнә биш тапҡыр танауҙың ике тишегенә лә 4 тамсы алоэ һутын тамыҙып торорға.
- Танауҙың ике тишегенә лә 5-6 тамсы сөгөлдөр һутын тамыҙып, мамыҡ тампондарҙы шул һутҡа манып, танауға тығып йөрөргә.
- Бер ус эвкалипт япрағына ҡайнар һыу ҡойорға һәм башты таҫтамал менән ҡаплап ултырып, күтәрелгән быу менән тын алырға. Тик тынды танау менән алып, уны ауыҙ аша сығарыу мөһим.
- Тымау нык йонсотҡан осраҡта ҡыҙған табаға ҡойолған һеркәнән күтәрелгән боҫ менән тын алып ҡарарға мөмкин.
- Нашатыр спиртына сылатылған мамыҡты танауҙың ике тишеге менән сиратлаштырып еҫкәргә.
- Керән, арыш оно һәм балды бер тигеҙ нисбәттә һалып бутарға. Килеп сыҡҡан ҡамырҙан йәймә яһап, танау биленә һалырға. Был рәүешле мотлаҡ өс төн дауаланырға.
- Танауға көнөнә өс тапҡыр кәбеҫтә һуты тамыҙып торорға. Табандарға йод һөртөргә һәм ҡоро гәрсис һибелгән йөн ойоҡ кейергә кәрәк.
- Танауҙың лайлалы тиресәһенә вазелин һөртөргә, шунан танауҙың ике тишегенә лә ыуалған һарымһаҡ һөртөлгән мамыҡ тығырға. Был процедураны көнөнә өс тапҡыр эшләргә.
- Һарымһаҡ майы ла тымау тейҙергәндә файҙалы дауа. Бер һарымһаҡ бүлкәһенә бер ҡалаҡ үҫемлек майы ҡойоп, төнгөләккә ҡалдырырға, иртәнсәк һөҙөп алып, тәүлек дауамында 3-4 тапҡыр танауға тамыҙып йөрөргә кәрәк.
- 1 ҡалаҡ ҡаты итеп ҡайнатылған ҡара сәйгә ярты балғалаҡ бал һәм 15 тамсы эвкалипт төнәтмәһе ҡушып бутағыҙ. Эвкалипт төнәтмәһен дарыуханала табырға була. Килеп сыҡҡан дарыуҙы көнөнә 3-4 тапҡыр бишәр тамсыға тиклем танауға тамыҙырға ярай. Уны хатта бәләкәй балаларҙы дауалағанда ла ҡулланырға була.

✓ **Иң беренсе теләк - Изге Китаптың мәғәнәһен күберәк халыҡҡа үҙебеҙҙең иҫ киткес шиғри телебеҙҙә еткереү булғандыр. Башҡорт боронборондан шиғри күңелле халыҡ булған бит.**



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

# ТЫУҒАН ЯҒЫМА ҠАЙТЫП УҢДЫМ...



**Мәүлет Ямалетдинов башҡорт яҙыусылары араһында дини темаларға ярайһы уҡ етди мөрәжәғәт итеүсе берҙән-бер әҙиптер. Ул яҙып ҡына ҡалмай, мөнәжәттәрҙе үҙаккә үткес итеп үҙе лә башҡара. Ижадынан да ниндәйҙер дини тәртип, баҫалҡылыҡ, тотанаҡлыҡ бөркөлөп торғандай. Сөнки ағай үҙе лә бик ипле һәм юғары мәҙәниәтле кеше. Фәлсәфәүи аң, сәләмәт рух, баҫалҡылыҡ - был сифаттар, моғайын, әҙәмгә Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелә торған матур бүләктәр.**

➔ **Нисек уйлайһығыҙ, ни өсөн беҙҙең яҙыусылар дини темаларға битараф?**

- Моғайын, уларҙың үҙҙәренән һорарға кәрәктер был турала. Ә минең шәхси фекеремсә, башҡорт әҙәбиәтенең бығаса йәшәп килгән традициялары ҡамасаулайҙыр, күрәһең. Сөнки совет дәүерендә диндән һәм муллаларҙан көлөү, уларҙы күберәк сатирик планда һүрәтләү коммунистар партияһы идеологияһының айырып алғыһыҙ бер өлөшө булды. Хатта үҙҙәре мулла балалары булған Сәғит Агиш менән Шәйехзада Бабич та, Мәжит Ғафури ҙа был йоғонтонан азат түгел ине. Был үҙе бер парадокс. Ә ғөмүмән алғанда, Ислам дине принциптарына таянып яҙылған әҫәрҙәрҙең ғүмерҙәре оҙайлыраҡ була. Миҫал итеп Мифтахетдин Аҡмулла шиғырҙарын килтереп үтеү ҙә етәлер. Уның тотош шиғырҙары йәиһә әҫәрҙәренең дүрт юлы, һис юғы мәҡәл рәүешендә бер-ике юлы һаман да халыҡ хәтерендә йәшәй. Ә бына диндә мыҫҡыл итеп яҙған Булат Ишемғоловтың берәй әҫәрен халыҡ хәтерләй микән? Был да яҙыусыларыбыҙҙы уйландырырға тейеш. Был бөтә яҙыусыларҙы ла дини темаға тотонорға саҡырыу түгел, ул һәр кемдең шәхсиәтенә, рухи инаныстарына, тормошҡа ҡараштарына бәйле мәсьәлә. Эш икенселә: яҙған хәлдә лә диндең үҙен һәм дин әһелдәрен элеккеләй мыҫҡыллап, карикатур шәкелдә яҙмаҫҡа ине. Хәҙер, шөкөр, дини темаларға тотоноусылар байтаҡ: Рауил Бикбаев, Әхмәр Үтәбай, Зөлфиә Ханнанова, Лира Яҡшыбаева, Гүзәл Ситдиҡова, Лариса Абдуллина, Салауат Әбүзәр (тағы кемделер онотһам, ғәфү үтенәм). Киләсәктә уларҙың һаны тағы күберәк булыр, тигән уйҙамын.

➔ **Ҡөрьән сүрәләрен тәфсирләүгә тотоноуға нимә сәбәпсе булды? Үҙегеҙ дингә килдерегеҙме, әллә башҡа сәбәпме?**

-Дингә үҙем килдем - әсәй ағынан олатайымдың йоғонтоһо булғандыр, ул бик дини кеше ине. Шуныһы ғәжәп: 1965 йылда ул донъянан киткәс, ауылда ниндәйҙер яҡты рух һүнгәндәй булды, мораль тарҡалыш, күңел бөлгөнлөгө башланды. Күрәһең, ул аҙан моңо һәм намаҙҙары менән халыҡ күңеленең рухи бөтөнлөгөн һаҡлап торғандыр. Ҡөрьән сүрәләрен шиғри ҡалыпҡа һалыуға килгәндә, иң беренсе теләк - Изге Китаптың мәғәнәһен күберәк халыҡҡа үҙебеҙҙең иҫ киткес шиғри телебеҙҙә еткереү булғандыр. Башҡорт борон-борондан шиғри күңелле халыҡ булған бит, ул үҙенең бөтмәҫ-төкәнмәҫ рухи хазиналарын шиғри формала ижад иткән. Иң мөһиме, шиғри телдә яңғыраған текст мәңге онотолмаҫ өсөн зиһенгә уйыла. Сәсмә әҫәргә ҡарағанда, тиҙерәк ятлап алыныу тигән үҙенсәлеге лә бар. Бына шуларҙы уйлаһаң, донъяла бер нәмә лә осраҡлы түгел, тигән уйға киләнә. Моғайын, Аллаһы Тәғәлә халҡыбыҙға оло бурыс йөкмәтә - бындай тәжрибә бөтән төрки халыҡтарҙа әлегә күренмәй бит.

➔ **Өфөнән тыуған яҡтарға ҡайтып ижад итеүсе һирәк яҙыусыларҙың береһе һеҙ. Бының менән бер нәмә лә юғалтманығыҙмы? Әллә - киреһенсәме? Баһалаймы яҡташтарығыҙ?**

-Тыуған яҡҡа ҡайтып, әлегә бер кемдең дә бер нәмә лә юғалтҡаны юҡтыр, моғайын. Киреһенсә, таба ғына. Мин бер робағиҙа яҙғайным:

*Әҙип өсөн торлаҡ*
*түгел пайтәхет -*
*Унда мыжғый мәкер*
*тигән бәдбәхет.*
*Улай тиһәң, Аҡмулланы,*
*Бабичты*
*Ситтә лә бит*
*ҡоткармаған таж-тәхет.*

Ижад яғынан оттом ғына тип әйтә алам - тыуған яҡтарға ҡайтҡас, 2 роман, 1 повесть, унлап хикәйә һәм новелла, йөнә бер китаплыҡ шиғыр, 1 документаль повесть, 2 документаль проза китабы яҙҙым, егерменән ашыу эрә-эрә Ҡөрьән сүрәһен тәржемә иттем. Яҙыусы өсөн ошонан да ҙур ҡыуаныс бармы икән!

Яҙғанды баһалауға килгәндә, яҡташтар осрашыуҙарға саҡырып тора. Бындай осрашыуҙар үҙебеҙҙең районда ғына уҙғарылмай. Мәҫәлән, "Ҡөрьән Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатмалар" китабы буйынса осрашыуҙар Сибай ҡалаһында, Баймаҡ, Әбйәлил, Бөрйән районында, Өфө ҡалаһында ла үткәрелде. Сибай ҡалаһы "Ағинәй" йәмғәт ойошмаһы тарафынан үткәрелгән мөнәжәтселәр конкурсында икенсе йыл рәттән номинацияларҙың береһе булып Ҡөрьән сүрәләренең шиғри аңлатмаһын көйләп һөйләү тора. Был да ҡыуаныс, тимәк, рухи хазиналарыбыҙға һыуһаған халыҡ ундай әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһына, үҙ асылына ҡайта бара.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!



# БАЛАЛАРҒА ҠЫҘЫҠ...

**Мин - декрет ялында ултырыусы йәш әсәй. Бөгөнгө көндә һәр кем күберәк аҡса эшләү юлдарын эҙләй, өҫтәмә килем алыу әмәлен йүнләй. Шул иҫәптән декрет ялындағы әсәйҙәр ҙә ҡул ҡаушырып тик ултырмай, ә ғаилә янсығын тулыландырыу өсөн төрлө ысулдар таба. Берәүҙәр интернетты файҙаланып аҡса эшләй, икенселәр ҡул эштәре менән була, өсөнсөләр тәм-том бешерә, һәм башҡалар. Минең был яҡтарҙан әллә ни оҫталыҡ булмағас, икенсе шөғөлдән килем алам.**

Йәш әсәй булараҡ, шөғөлдөң аҡса килтереүенән тыш, бәләкәс балалар өсөн ҡулайлашҡанын һайланым. Балаларҙың ни тиклем тикторма, эҙләнеүсән, яны әйбергә ҡарата ҡыҙыҡһыныусан булыуы һәр кемгә мәғлүм. Уйынсыҡтар бәпесте тиҙ ялҡыта, ләкин уларҙы әленән-әле алмаштырып тороу ҡеҫәгә ныҡ һуға, сөнки сифатлылары ныҡ ҡыйбат. Шуға күрә, баланы әүрәтер өсөн кухнялағы һауыт-һаба ла, ванналағы һабын, бушаған шампунь һауыттары ла, ғөмүмән, өйҙәге барлыҡ тиерлек әйберҙәр ҙә ҡулланылыш таба. Сабый бөтә нәмәне тотоп, тешләп, тәмләп ҡарарға әүәҫ, тимәк, уның ҡулы аҫтындағы әйберҙәр һаулығына зыян килтермәслек һәм уның өсөн ҡыҙыҡлы булырға тейеш. Мин бала өсөн ҡыҙыҡлы ғына түгел, ә уйын ысулы менән уның зирәклеген, отҡорлоғон үҫтерергә лә ярҙам итеүсе уйынсыҡ - бизиборд - эшләйем. Уны һәр кем үҙе эшләй ала, ләкин уның ваҡ эш булыуы һәм ваҡытты күп алыуы күптәр өсөн ҡулай түгел. Магазиндарҙа әле булһа был уйынсыҡ күпләп һатылмай, тик интернет селтәре аша заказ менән алдырырға мөмкин. Ә беҙҙең халыҡҡа алаһы әйберен тотоп, бороп ҡарарға кәрәк, шуға күрә минә эш етерлек.

Балалар уйынсығы, тағы сифатлы булырға һәм сағылыуы менән иғтибарҙы үҙенә тартып торорға тейеш. Бизиборд - гөрһөлдәгән, шытырлаған, ғөмүмән, төрлө тауыштар сығарған һәм бороп ҡарарға, ябырға - асырға, бәйләргә мөмкин булған әйберҙәр урынлаштырылған таҡта. Сабыйға, мәҫәлән, ишектең келәһе нисек асып-ябыла икәнлеген аңлатыуҙан файҙа юҡ - ул уны төшөнмәйәсәк. Ә ошоно уҡ уның уйын рәүешендә күреүе һәм аңлауы күпкә әһәмиәтлерәк. Үҙенең эшмәкәрлеге һөҙөмтәһендә аңлағанын ул онотмаясаҡ. Бизибордҡа тағы ла өй телефонының бормалы дискын, стена сәғәте циферблатын, һыу кранының бороламалы тотҡаһын, калькулятор, розетка һәм иҫке үтек бауын, электр уты һүндергесен һәм башҡа күп төрлө әйберҙәр ҡуйырға мөмкин. Был үҫтереүсе таҡтаға нығытылыусы әйберҙәрҙең стандарт йыйылмаһы юҡ. Һәр кем үҙе теләгән һәм ҡулы аҫтында булған әйберҙәрҙе өҫтәнлөк бирә. Минә заказ биреүселәр ҙә бизибордта ниндәй әйберҙәрҙе күрергә теләүен еткерә һәм мин уларҙы бала өсөн уңайлы һәм ҡыҙыҡлы булырлыҡ итеп урынлаштырам. Шулай уҡ таҡтаға йәнлелек өҫтәү өсөн төрлө йәнһүрәт геройҙарын да эшләп ҡуям.

Интернетта бындай үҫтереүсе таҡталарға хаҡ, ҡатмарлығына һәм ҙурлығына ҡарап, 3000 - 5000 һумдан алып башлана. Мин хаҡты бизиборд өсөн ниндәй әйберҙәр ҡулланылғанын, ҡатмарлығын күҙ уңында тотоп ҡуям. Кәрәкле әйберҙәрҙе башлыса ҡүмәртәләп алып ҡуям да йәйлап тотонам. Шулай уҡ заказ биреүселәр үҙҙәрендә булған әйберҙәрҙе лә алып киләә. Бизиборд өсөн таҡтаны ирем аулыла ҡайтҡанда ағас эше менән шөғөлләнеүсе оҫтанан һатып ала. Минең шөғөлөм, шулай итеп, ауыл оҫтаһына ла килем килтерә. Күпселек осраҡта, бер бизиборд эшләү өсөн 500 - 1000 һум аҡса тотонам. Ә әлегә тиклем һатҡан бизибордтарҙың иң осһоҙон 2000 һумға, ә иң ҡыйбатын 5000 һумға һаттым. Шулай итеп, үҙемә яҡынса 1000 - 4000 һум күләмендә таҙа килем эшләйем. Әлбиттә, әллә ни ҙур сумма түгел, ләкин аҙыҡ-түлек алғанда, фатирға түләгәндә өҫтәмә булырлыҡ. Әгәр ҙә айына бер нисә бизиборд эшләһәң, килем дә күберәк буласаҡ. Артабан да ошо йүнәлештә эшләргә, оҫталығымды арттырырға, етештереүҙе ағымға ҡуйырға иҫәп тотам. Төп эшемә сыҡҡан осраҡта ла ялдарымды әлеге шөғөлөмә бағышларға уйлайым. Бизибордтар етештереү - әүҙем үҫеүсе, күп һорау менән файҙаланыусы өлкә. Әлегә был өлкәлә конкурентлыҡ аҙ, шуға күрә минең кеүек өйҙә ултырыусы әсәйҙәр ҙә, башҡалар ҙа ошо эшмәкәрлеккә тотоноп, аҡса эшләргә мөмкиндәр. Бары тик теләк кенә кәрәк.

**Әлфиә БИЛАЛОВА.**

ШАҢДАУ

# ШАРТТАР ТЫУҘЫРЫЛҺА...



**"Киске Өфө" гәзитенең былтырғы бер һанында баҫылған "Зыялылар майҙаны" рубрикаһында Ҡадир Ишбулдиндың йәштәрҙең хеҙмәт тәрбиәһе тураһындағы фекерҙәрен уҡыным. Ул хеҙмәт баҙарында ябай эшсе һөнәрен үҙләштереүселәргә ҡытлыҡ булыуы, ауылда эшләп йәшәргә теләгән йәштәр юҡлығы тураһында әйтә.**

Йәштәр еңел эш эҙләй, тип ғәйепләргә ярамай. Ауыл хужалығында эшләүе еңел түгел, хәҙерге фермаларҙа эшселәр өсөн тейешле шарттар юҡ, эш хаҡы ла түбән. Йәш кеше 5-6 мең эш хаҡы алып, көнө-төнө ауыр эштә бил бөгөп йөрөргә теләмәй икән, ул ғәйепләме ни? Йәшәү кимәле яҡшыра, йәштәргә компьютеры ла, тәҫлә телевизоры ла, автомобиле лә, төрлө йорт йыһаздары ла кәрәк. Улар тормошон яҡшыртыу өсөн күп аҡса эшләргә теләй. Шуға күрә, йәштәр ауыр эшкә күнекмәгән, ауыл ерендә ҡалырға теләмәй, тигәнсе, ауыл хужалығының хәлен яҡшыртыуҙы хәстәрләргә кәрәк.

Ғүмер буйы мал табибы булып, төрлө ерҙә эшләнем, Татарстанда ла эшләп ҡайттым. Бөтә ерҙә лә ауыл хужалығының хәле шәптән түгел, фермаларҙа эш шарттары юҡ. Унда пенсия йәше етеп килгән кешеләр, бүтән эш урыны таба алмағандар эшләргә мәжбүр. Һауынсы сменаһыҙ эшләй, ял көнө лә юҡ, иртән-кисен ҡараңғы аҙбарҙа һыйыр һауа. Ҡайһы бер фермаларҙа аҙбарҙарҙы таҙартҡыс ҡоралмалар иҫкергән, эшләмәй, бысраҡ. Һауынсыға үҙенең кейемен һәм биҙрә, һауын аппараттарын йыуырға тәғәйен урындар билдәләнмәгән. Етмәһә, ауыл хужалығы продукцияһының хаҡы арзан.

Нисек кенә тимә, йәштәр ауыл хужалығында эшләһен тиһәк, фермаларға яңы ҡоралмалар, шәп техника алыу, һыу үткәреү һәм башҡа төрлө заманса йыһазландырыу кәрәк. Уларҙы шул рәүешле ҡыҙыҡһындырып, йәшәү сифатын күтәреп кенә ауылда ҡалдыра алабыҙ. Хөкүмәттең ҡарашы үҙгәрмәһә, был мәсьәләләр хәл ителмәйәсәк, әлбиттә.

**Фидаил ЙӨҘЛӨКБАЕВ.**
**Стәрлетамаҡ районы Байраҡ ауылы.**

***✓ Кеше туған телендә алдаша алмай, ти белгестәр. Туған тел хистәр менән бәйле, ул ғәҙел булыуҙы талап итә. Ә сит тел рациональ фекерләү менән бәйле, шуға ла алдашҡан саҡта кешеләр сит телде ҡуллана икән.***

*ИНТЕРНЕТТАН*



# ТУҒАН ТЕЛДӘ...

## алдашып булмай

■ Ҡыш тире ныҡ кибә, шуға ла өҫтәмә иғтибар талап итә. Дөрөҫ туҡланыу был миҙгелдә айырыуса кәрәк. Кишер С, А витаминдарына бай. А витамины һырҙар барлыҡҡа килеүҙе кисектереп тора. Әфлисун да составында С витамины күп булыу менән дан тота, ул тирене һаҡлай. Авокадо - иң файҙалы ризыҡ иҫәпләнә. Унда Е витамины бар, ә был витамин тире матурлығы өсөн бик кәрәк. Майлы балыҡ омега-3 майлы кислоталары менән файҙалы. Был файҙалы майҙар тирене кибеүҙән һаҡлай. Йәшел сәй яратыусыларҙың тиреһе йәш килеш ҡала, сөнки ул йәшәртеү һәләтенә эйә.

■ Көньяҡ Калифорния университеты белгестәре һимереү кешенән кешегә күсә ала, тип иҫбатлай. Кем һимеҙ кешеләр менән йышыраҡ аралаша, уның үҙенә лә һимереү хәүефе янай, имеш. Был теорияны улар түбәндәге эксперимент аша раҫлай. Үҫмерҙәрҙең сәләмәтлегенә уларҙы уратып алған мөхиттең йоғонтоһо һәм туҡланыу ғәҙәттәренең үҙенсәлеген тикшереүгә арнала ул. Һынауҙарҙа ата-әсәһе (бөтәһе 1300 кеше) Американың хәрби базаларында хеҙмәт итеүсе 1111 бала ҡатнаша. Һимеҙ балаларҙың һаны уларҙың ниндәй округта йәшәүенә лә бәйле булыуы асыҡлана. Мәҫәлән, бер штатта һимеҙлек менән яфаланыусы үҫмерҙәр 21 процент булһа, икенсе штатта 38 процентҡа етә. Етмәһә, базала хеҙмәт итеүселәр араһында һимеҙҙәр күп булһа, балалар араһында ла улар күберәк булып сыҡҡан. Ғалимдар быны сәбәбен шунда күрә: кешенең туҡланыу ғәҙәтен уны уратып алғандар булдыра.

■ Артыҡ ауырлығын ташларға теләүселәрҙең барыһы ла быны ҡыҫҡа ваҡыт эсендә эшләргә теләйҙер, моғайын. Ундайҙарға ябай ғына кәңәш - иртән сәй йәки ҡәһүәгә ҡушып йомортҡа ашағыҙ. Сей йомортҡа тағы ла файҙалыраҡ, ти белгестәр. Венгрияла, скандинавия илдәрендә сей йомортҡа ҡушылған ҡара ҡәһүә күптән модаға ингән. Уны күнегеүҙәр яһарҙан алда эсәләр икән. Сей йомортҡала бактериялар булыуы ихтимал, шуға ла уны ҡайнар эсемлек менән ҡатнаштыралар. Әйткәндәй, иҫегеҙҙә булһа, 2013 йылда Японияның Kao Japan компанияһы Healthya маркаһы аҫтында ҡәһүә сығара башлағайны. Был ҡәһүә майҙарҙы яндыра, тигән вәғәҙә лә бирелгәйне. Уның тәьҫире шунда - ҡәһүә орлоҡтарын 2,5 тапҡырға оҙағыраҡ ҡыҙҙыралар, һөҙөмтәлә хлороген кислотаһы күберәк бүленеп сыға. Оҙаҡ ҡыҙҙырыу арҡаһында барлыҡҡа килгән оксидтарҙы кәметеү өсөн махсус матдә ҡулланалар. Етештереүселәр әйтеүенсә, 12 аҙна эсендә был ҡәһүәне ҡулланыусылар уртаса 1,5 килограмм ташлаған.

■ Кеше туған телендә алдаша алмай, ти Бангор һәм Манчестер университеттары белгестәре. Туған тел хистәр менән бәйле, ул ғәҙел булыуҙы талап итә. Ә сит тел рациональ фекерләү менән бәйле, шуға ла алдашҡан саҡта кешеләр сит телде ҡуллана икән. Һынауҙарҙа ике телде - үҙ туған телен һәм инглиз телен яҡшы белгән милләт ҡатнашҡан. Уларға ошо ике телдең береһендә яҙылған төрлө һөйләмдәр күрһәткәндәр. Ҡатнашыусылар иһә был һөйләмдә яҙылған хәбәрҙең ысынмы, әллә ялғанмы икәнен асыҡлаған. Туған телдәрендә яҙылған хәбәр уларға ысынбарлыҡҡа тап килә, тип тойолған.

*ХӘТЕРКИТАП*

# ЮРАМАЛ ҠАҒЫҘ

## (Булған хәл)



1946 йылдың йәйе. Июль ҡояшы аяуһыҙ ҡыҙҙыра. Ике үҫмер ҡыҙ, Йәмилә менән Рәүиә, тырышып картуф күмә. Бер ыҙандың осона барып сығырға күп тә ҡалмаған. Ошо ыҙанды күмеп сыҡһалар, улар Рәүиәләрҙең картуфына тотонасаҡ. Шулай ҡул алмаш эшләһәң, эш тә ырай, бергә-бергә күңеллерәк тә.

Нимес (немец) каскаһындағы ҡулдарҙы йыуыр өсөн алып йөрөгән, көндөң эҫелегенән инде йылып бөткән һыуға ынтылғайны ғына Йәмилә, "Ҡыҙҙар!" тигән тауышҡа терт итеп ҡалып, башын күтәрҙе. Рәүиә лә турайып баҫты. Ҡараһалар, ҡултыҡ аҫтына папка ҡыҫтырған бер кеше бәләкәй генә ҡапҡанан быларға ҡарап тора. Ҡыҙҙарҙың эштән туҡтап, үҙенә иғтибар итеүҙәрен күргәс, теге кеше:

- Ҡыҙҙар, аҡсағыҙ бармы? - тип ҡысҡырҙы.

- Бар, - тине лә Йәмилә өй яғына ыңғайланы. Өй беренсә йөрөп һалым йыя торған кешене ул танып алғайны инде. Хатта исем-фамилияһын да белә. Рәүиә лә уға эйәрҙе. Һалым түләй торған аҡса сәй ҡурғашына ҡат-ҡат төрөлөп, мейестең йүшкәһе буйына ҡыҫтырып ҡуйылған. Айҙар буйы тинләп кенә йыйып тултырылған аҡсаны шулай төпкәрәк йәшермәһәң, уның күҙ менән ҡаш араһында юҡ булырын көт тә тор. Өй хужаларының эшкә киткәнен аңдып ҡына йөрөгән уғрылар аҙаҡ был урынды ла белеп алды.

Йәмилә, һәндерә башына менеп, йүшке буйына ҡыҫтырылған төргәкте алып төштө, тышындағы ҡоромон өрҙө. Шунан һаҡ ҡына тағатты ла эсендәге аҡсаларҙы урындыҡтағы балаҫ өҫтөнә ҡойҙо.

- Бына, шунса һум, шунса тин, - тине ул вәкилдең күҙенә туп-тура ҡарап.

Аҡсаны һанағас, һалым йыйыусы түш кеҫәһенән ашыҡмай ғына блокнот сығарып, шуның бер таҙа битенә шап иттереп мисәт һуҡты. Был битте йыртып алып, ҡыҙҙарға күтәрелеп тә ҡарамай ғына, урындыҡҡа һалды. Тыумыштан үткер, зирәк Йәмилә бында ниндәйҙер шикле эш барлығын һиҙеп ҡалды.

- Һин ниңә беҙҙең аҡсаны юрамал ҡағыҙға яҙҙың? - тип һораны ул.

- Бынау мисәт торғас, юрамал булмай инде, - тине һалым йыйыусы һәм ҡәләм осо менән генә мисәткә төрттө. Үҙе ашығып ишеккә йүнәлде. Йәмилә менән Рәүиә, ҡоро мисәттән башҡа бер генә яҙыуы ла булмаған аҡ ҡағыҙ битенә ҡарап, аптырап тороп ҡалдылар. Шунан, ниҙер иҫтәренә төшөп, икеһе бер юлы урамға атылды. Был мәлдә теге кеше, папкаһын һелтәй-һелтәй Рәүиәләргә инеп бара ине. Колхоз малына бесән әҙерләүҙең ҡыҙған осоро. Рәүиәнең әсәһе Һәҙиә инәй ҙә бесәндә. Ихата эсендәге тубыҡҡа етә яҙып торған үләнде ҡулы менән йолҡоп, шунан бәләкәй-бәләкәй генә кәбәндәр ҡойоп, уйнап йөрөгән ҡустыһынан башҡа йортта кеше әҫәре юҡ. Рәүиәләрҙә лә шул уҡ хәл ҡабатланды. Тейешле аҡсаны алғас, һалым йыйыусы мисәт баҫылған аҡ ҡағыҙҙы өҫтәлгә һалды ла шәпләп сығып та китте.

- Был ни була инде ул? - тип аптыраşты ике күрше Нәғимә менән Һәҙиә арып-талып бесәндән ҡайтҡас.

Шулай ҙа аҙна-ун көн самаһы уҙғас, әлеге уполномоченный Йәми-

*БЕР ФОТОҒА ҠАРАП*

# АҠ ЯУЛЫҠЛЫ ИНӘЙҘӘРЕМ...

**"Киске Өфө" гәзитенең былтырғы 50-се һанындағы мәҡәләгә ҡарата минең дә фекерҙәрем бар.Һуңғы йылдарҙа мосолман кейемендәге ҡыҙ-ҡатындарҙы күреп, ысынлап та, күҙҙәр ҡыуана - нисек килешә уларға шулай йөрөүе! Берәү ҙә аптырамай быға, бөтәһе лә һоҡланып ҡарай. Доға белмәһә, намаҙға баҫмаһа ла, һәр кемдең һын-һыпатын ҡаплап, матур итеп кейенеп йөрөргә хоҡуғы бар тип иҫәпләйем.**



Һүҙемде үҙем килен булып төшкән ауылдағы хәҙер инде баҡыйлыҡҡа күскән Хөснә, Асия, Әсҡәпъямал Исхаҡовалар тураһындағы хәтирәләргә алып барып ялғамаҡсымын. Ҡайныма еңгәй булған икәүһен "Ҡәйнәм", кесеһен "Әсҡәп еңгәй" тип ололап торҙом. Һуғыш ваҡытында бөтә ауырлыҡтарҙы үткәргән, батыр ҙа, матур ҙа булған ил инәләре: Хөснә ҡәйнәм - 102 йәшендә, Асия ҡәйнәм - 94 йәштә, Әсҡәпъямал еңгәй түҙәлмәҫ ауырыуҙан 70 йәшендә вафат булдылар. Уларҙың ошо фотоһына ҡарап, күңел тула, тыныс көндәрҙә икенсе заманда йәшәһәләр, уларҙан мотлаҡ мөғәллимәләр сығыр ине! Ҡара костюм кейеп, аҡ яулыҡтар ябынып урамдан үткәндәре әле лә күҙ алдымда. Бик һуңлап ҡына сыҡҡан "Тол ҡатындарға фатир биреү" тураһындағы указ уларҙың төшөнә лә инмәгәндер. Әммә улар бик матур ғүмер юлы үтте. Улдары ҙур, яҡты өйҙәр һалып, түрендә генә йәшәтте. Үҙҙәре лә бахыр булып йөрөмәне, баштарын ғорур тотоп, балҡып килерҙәр ине. Мин, йәш булһам да, уларҙы аяттан ҡалдырманым, һуңынан хәлдәрен белеп торҙом. Был фотоны ла "Тол ҡатындар иламай" тип исемләп кисә үткәргәндә алғайным уларҙан. Ун, ун бишләп инәйҙең иң һуңғыһы - Хөсәйенова Мәғрифә апай ҙа 90 йәште үткәнсе йәшәне. Ғөмүмән, беҙҙең ауыл да матур, кешеләр ҙә етеш йәшәй. Ололар ҙа, йәштәр ҙә урамда галош кейеп, халат менән, сәс-баштары туҙып йөрөмәй! 80-де үткәндәр ҙә, 50-60 йәштәгеләр ҙә күбеһе аят уҡый, намаҙға баҫҡан. Вафат булғандарҙы ла бөтә ауыл хөрмәтләп оҙата, мохтаждарға ярҙам күрһәтеп, мосолман йолаһын ихлас башҡаралар. Йәштәр бит ололарҙан үрнәк ала.

**Заһира ОМОРҘАҠОВА,**
**хаҡлы ялдағы китапханасы.**
**Баймаҡ районы Таулыҡай ауылы.**

✓ *Ошондай һынмаҫ ихтыярлы батыр кеше Даян Баян улы Мурзин һуғыштан һуң Әбйәлил районында прокурор ярҙамсыһы булып эшләп китә. Эше буйынса йөрөгән сағында ул Ҡужанға тағы бер нисә тапҡыр килә.*



ләгә квитанция индереп бирә, ә теге мисәтле буш ҡағыҙҙы яндырырға ҡуша. Рәүиәләргә инмәй.

Бер ни тиклем ваҡыттан һуң, "Һалымыңды түләмәгәнһең", тип Һәҙиә инәйҙе идараға саҡырталар.

- Түләнем, түләнем, - тип инәй күпме генә иҫбатларға тырышһа ла, уға ышанманылар.

- Аҡсам бына ошонда төрөлгән ине, - тип иҫке генә ҡулъяулыҡтың күрһәтеү ҙә ярҙам итмәне. Ә теге мисәтле ҡағыҙ зым-зыя юҡ булғайны. Ҡыҙҙар өйҙә булмай ҡалдылар. Аҡсаны үҙ ҡулдары менән түләгән Йәмилә менән Рәүиә был мәлдә Йортбикә итәгендә тирләп-бешеп еләк йыя ине.

Ҡот осҡос ауыр һуғыштың күп михнәттәрен үҙ иңдәрендә күтәргән, бөтә өй эштәре менән аслыҡтан яфа сиккәндә лә "Бөтә нәмә фронт өсөн!", "Бөтә нәмә еңеү өсөн!" тип, һөт, йомортҡа, ит, утын йөкләмәләрен намыҫ менән үтәп килгән Нәгимә менән Һәҙиә быңдай ғәҙелһеҙлеккә бирешергә теләмәне. Һәҙиә, күршеһенең ҡыҙы зирәк Йәмиләне геуаһ итеп ҡуйып, һалым йыйыусыны судҡа бирҙе. Ә Нәгимә, үҙ сиратында, ысын квитанция менән мисәтле аҡ ҡағыҙҙы, көнө килеп еткәнсе тип, юғалмаҫлыҡ ергә һалып ҡуйҙы.

Таштимер ауылында үткән судҡа бик күп кеше йыйылды. Йәмилә менән Рәүиәне иң алға ултыртып ҡуйҙылар. Быларҙың танышы, һалым йыйыусы, халыҡҡа ҡарап һул яҡ мөйөшкә баҫҡан. Уның эргәһендә кобуралы милиционер. Ып-ысын суд. Һүҙ бирелгәс, Йәмилә ҡулына үҙҙәренә бирелгән юрамал ҡағыҙҙы ла, аҙаҡ бирелгән квитанцияны ла тотоп, алға сығып баҫты. Ул һалым йыйыу ваҡиғаһын, хәл нисек булған, шулай итеп, һөйләп бирҙе. Рәүиә лә уны дөрөҫләне.

- Балаларымдың ауыҙынан өҙөп, тинләп кенә йыйған аҡсамды кире ҡайтарһын, - тине Һәҙиә инәй. - Мин бүтән бер нәмә лә һорамайым.

Оҙаҡ ҡына барған суд бик тә дөрөҫ, ғәҙел хөкөм ҡарары сығара: һалым йыйыусы өс көн эсендә Һәҙиә инәйгә йә аҡсаһын, йә ысын квитанцияны килтереп бирергә тейеш. Ә инде ҡаты һуғыштан былай ҙы йонсоған, көнө төнө ауыр эштән арыған хеҙмәтсәндәрҙе алдап, квитанция урынына "юрамал" ҡағыҙ таратып йөрөгән өсөн ул бер нисә йылға холоҡ төҙәтеү эштәренә хөкөм ителә. Район үҙәгенән килгән прокурорҙың: "Ябай халыҡты күрәләтә талау бит был. Нисек һинең был эшкә ҡулың барҙы?" - тигән һүҙҙәре бөтә хөкөм ҡарарынан да ҡатыраҡ яңғырай.

Судты йомғаҡлап, ошо һүҙҙәрҙе әйткән прокурорға һоҡланып, үҙ итеп ҡараны күптәр. Һоҡланырлыҡ ине лә шул: тәҙ, матур танау, килешле итеп алынған сәс, аҡыллы үткер ҡараш. Ә иң мөһиме: бар һынына олпатлыҡ биреп торған ҡап-ҡара мыйыҡ-һаҡал.

- Төҫкә шул тиклем таҙа ине, - ти әсәйем бынан 70 йыл элек булған ул хәлдәрҙе күҙ алдынан үткәреп.

Татарсараҡ һөйләшеүе был прокурорҙың беҙҙең район кешеһе түгеллеген дә аңғартып торған кеүек. Был һоҡланғыс кеше, ғәҙел прокурор 1943-1944 йылдарҙа тәүҙә Молдавия, Белоруссия, аҙаҡ, 1944 йылдың майынан, Чехословакия урмандарында төрлө милләт халҡынан торған партизандар бригадаһы ойоштороп, шуға үҙе етәкселек иткән ҡаһарман йөрәкле партизан Даян Баян улы Мурзин үҙе була. Эйе-эйе, Генрих Гофмандың "Кара генерал" китабы тап уның тураһында, беҙҙең яҡташыбыҙ, Башҡортостандың Благовар районында тыуып-үҫкән Даян Баян улы Мурзин тураһында.

Үҙенең Ян Жижка исемендәге партизан бригадаһы көстәре менән берлектә, Европа илдәренең күп ауылҡалаларын гитлерсы фашистарҙан азат итә. Тау, урман араларында, дошман тылында хәрәкәт итеү стратегияһын яҡшы белгән батыр, таһыллы етәксе күпте күргән партизандар өсөн ҡаһарманлыҡтың шәхсән өлгөһө булып тора.

Үҙебеҙҙән ил, Чехословакия хөкүмәте һәм тағы күп илдәр тарафынан бирелгән наградалары, орден-миҙалдары тағылған костюмының ауырлығы хатта 60 килограмға еткән Даян Баян улының.

Ошондай һынмаҫ ихтыярлы батыр кеше Даян Баян улы Мурзин һуғыштан һуң Әбйәлил районында прокурор ярҙамсыһы булып эшләп китә. Эше буйынса йөрөгән сағында ул Ҡужанға тағы бер нисә тапҡыр килә. Бер килгәнендә уны колхозда бухгалтер-иҫәпсе булып эшләп йөрөгән Һиммәт Хамматов төшкө сәйгә алып ҡайта. Һәм... бына хикмәт, тап шул көндә Бөйөк Еңеү таңынан һуң тағы биш йыл ярым хеҙмәт итеп Әхмәт Хамматов тыуған яҡтарына ҡайтып төшә. Үҙҙәрендә сәйгә лә туктамай, туғандары менән күрешергә сығып киткән була Әхмәт.

Һиммәт ағаларына килеп инһә, күрә: ағаһы ҡап-ҡара һаҡал мыйыҡлы, ябай кеше түгеллеге тышҡы йөҙөнән үк күренеп торған бер уҙаман менән сәй эсеп ултыра. Һигеҙ йыл күрмәгән ҡустыһын нығ итеп ҡосаҡлап ала Һиммәт һәм уны ҡунаҡ менән таныштыра.

- Был Даян Мурзин! - ти ул айырым бер тантаналы тауыш менән. Тағы ҡосаҡлаша ут-һыуҙарҙы кискән өс яугир: Бөйөк Еңеүҙе Берлиндың үҙендә ҡаршылаған 33 йәшлек Һиммәт, хатта Гитлерҙың үҙенең ҡотон алған 30 йәштәрҙәге Даян Мурзин, Ватан алдындағы бурысын намыҫ менән үтәгән 24 йәшлек Әхмәт.

Һәм беҙ, әбйәлилдәр, даны бөтә Европа илдәренә билдәле "кара генерал"дың, Чехословакияның почетлы гражданы Даян Баян улы Мурзиндың беҙҙең районда эшләп киткәнен белергә һәм быының менән сикһеҙ ғорурланырға хаҡлыбыҙ. Ә инде һалым аҡсаһын йыйып, тейешле документ урынына ялған ҡағыҙ таратып йөрөгән агент, яза срогын ултырып ҡайтҡас, Ҡужанға килә, ғәфү итеүҙәрен һорай.

- Нәгимә апай, Һәҙиә апай, һеҙ мине ғәфү итегеҙ. Йәмилә ҡарындаш күп нәмәгә минең күҙҙәремде асты. Уға рәхмәт. Үҙемдең ниндәй ҙур хата эшләгәнемде аңланым. Бынан һуң һеҙгә бер насарлыҡ ла теймәҫ, - ти һәм хушлашып сығып китә.

**Фәрзәнә ХАММАТОВА,**
**мәғариф ветераны, "Ҡуңыр буға", "Йәйғор" ижади берекмәләре ағзаһы.**

## *УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

### Рәхмәтле булыу һәм күңел тыныслығы

"Ғүмереңдә ни бары бер: "Рәхмәт!" - тигән доғаны ғына ятлаһаң да етә",- ти Майстер Экхард. Бер генә секундҡа тормошоғоҙ һәм ундағы кешеләр тураһында уйлауҙы туктатып ҡарағыҙ. Иртән уянып, Аллаһы Тәғәләгә, йәғни кемде юғары көс тип иҫәпләйһегеҙ - шуға: "Йәшәгәнем, ғаиләм, йортом, дуҫтарым булғаны өсөн рәхмәт. Яңы көн өсөн рәхмәт", - тип әйтеүегеҙҙе күҙ алдына килтерегеҙ. Шунан һуң ниндәйҙер енеллек тояһығыҙмы? "Минең ғаиләмде күрһәң", - тип ҡырт киҫерҙән алда, рәхмәтле булыуҙан һуң килгән тойғоно иртәгә генә түгел, иртәгәнән һуң да, артабанғы барлыҡ көндәрҙә лә кисерәүегеҙҙе күҙаллағыҙ. Был һеҙҙең тормошоғоҙҙо сафыраҡ һәм тынысыраҡ итмәйме ни?

Күпселегебеҙгә бала саҡтан беҙҙең менән нимәләр ғәҙәттәгесә түгел, тип һеңдерәләр. Артабан инде үҙебеҙ үк ғаиләлә нимәләр улай түгел, машинабыҙ ундай түгел, эш тә тура килмәй, тип шикләнә, тормоштоң етешһеҙ яҡтарына иғтибар туплай башлайбыҙ. "Эх, эшемдә ихтирам итһәләр, - тибеҙ. - Әгәр "Мерседес" машинам булһа..." Шунан һуң күңел тыныслығы юҡлығына нимәгә аптырарға?Һәр саҡ кемгәләр йәки нимәгәләр үйҙән быға рәхмәт әйткәндә лә тормош тынысыраҡ һәм ҡыуаныслыраҡ була бара. Һәр иртән әйтелгән "рәхмәт": "Мин тормошомдан ҡәнәғәтмен. Минең кәрәк булған бөтөн нәмәм бар. Мин үҙем телләгән кеше. Мин үҙемә кәрәк булған нәмәгә өйрәнәм", - тигән аффирмацияға тиң.

Үҙ-үҙең менән тыныслыҡта булмаған нәмәләргә түгел, булғандарына иғтибар йүнәлтеп кенә йәшәп була. Тормошоңдо нисек бар, шулай ҡабул ит һәм ундағы бар нәмә һинең өсөн эшләгәненә шаһит булырһың. Ҡыҫҡаһы, әгәр ысынлап та күңел тыныслығына ынтылһаң, рәхмәтлек тойғоһонан башҡа бер нәмә лә эшләй алмайһаң. Бында сер нимәлә - ҡасан үҙең теләйһең, бары шул саҡта ғына рәхмәт тойғоһо менән уянасаҡһың. Әгәр "тормошом яйланғас ҡына донъяға рәхмәтле буласаҡмын" тиһең икән, бер нәмәгә лә өмөтләнмә!

**Ә һуңынан нимә?** Тормош мәғәнәһен нисек табырға тип баш ватабыҙ икән, унда үлем барлығын да онотмайыҡ. Әгәр үлем булмаһа, тормош ғәҙелерәк булыр ине һымаҡ. Һәр хәлдә, был осраҡта беҙҙең хаталарыбыҙҙан һабаҡ алырға мөмкинлегебеҙ булыр ине. Ғүмер оҙайлығы 75 йәш менән тамамланмай икәнен белһәң, йәшәү тынысыраҡ һәм матурыраҡ. Эйнштейндың ғилми мираҫына мөрәжәғәт итеп тә күңелде күтәрергә була. Эйнштейн энергияның - мәңгелек, уны булдырыу ҙа, юҡ итеү ҙә мөмкин түгел икәнен раҫлаған. Тимәк, үлгәндән һуң да йән менән нимәләр була. Әлбиттә, тәнебеҙ ергә ашлама буласаҡ, әммә беҙ бит һөйәктән һәм һеңерҙән генә тормайбыҙ. Йән ҡайҙалыр урын табырға тейеш бит!

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

## *МӨҒЖИЗӘЛЕ ДОНЪЯ*

# ТЕРЕКЛЕК ЭЙӘЛӘРЕ ҺӘМ...

## алтын тураһында



Борон-борондан алтын иң оло, тылсымлы көскә эйә, тип һаналған хазина. Дини, фәнни мәғлүмәттәрҙә лә шулай бирелә. Әкиәттәрҙә әллә ниндәй сихри көстәр һүрәтләнә. Тормошта ла алтын кеше организмына ыңғай һәм кире йоғонто яһай. Берәүҙәр алтын биҙәүестәр кейеп, сирҙән йүнәлһә, бәғзеләр ауырыуға һабыша. Минең үҙемә алтын әйбер ярамай: ул минең тәнемдә ҡап-ҡара булып күгәрә, йөрәгемдең хәле бөтә. Хәҙер әҙәмдәр алтынға төрөндө, бәлки, шунан да күптәре сирләйҙер. Ә өләсәйем алтынға ҡағылыуҙан нык тыйҙы, уның эйәһенең рәнйеүе төшөр, тип ҡурҡыта ине.

Әйткәндәй, һәр әйберҙең, һәр тереклектең эйәһе бар. Мин быға ышанам. Сөнки шундай хәлдәргә осрағаным бар. Йылғанан һыу эскәндә, йәҙгәндә, аша кисеп сыҡҡанда доға уҡып, унан рөхсәт һорарға кәрәк. Бер саҡ минең менән бер хәл булды: рөхсәтһеҙ, доғаһыҙ ғына йылғаны шаптыр-шоптор кисеп бара инем, ҡаршы ярҙа ап-аҡ яулыҡ ябынған бер әбей мине бармаҡ янап ҡаршыланы ла, юҡ булды.

Тағы бер хәл еләккә барғанда булды. Тау түбәненән аҙыраҡ еләк йыйғас, өсҡөрәк менә башлағайным, кемдер "әләү-әләү" тип, иламһыраған тауыш сығарҙы. Тимәк, мин рөхсәт һорамағанмын, тау эйәһенең ояһына баҫҡанмын. Тиҙ генә ғәфү үтенеп, китеп барҙым.

Урман эйәһе менән дә шул уҡ хәл. Һаулыҡ, рөхсәт һорап инмәһәң, ағастың илағаны ишетелә. Бер тапҡыр, август баштарында, ереклек араһында үҫкән бөтнөктө йыйырға булдым. Шундай күп, бейек булып үҫкән - йүгереп йөрөп йыям. Кинәт кенә бер йыуан ерек "ух-х" тигән өн сығарҙы. Ҡот осто, сөнки ереклек ер ярығында була, төрлө газ, икенсе йән эйәләренең урыны ла шунда. Унан нисек ҡасып киткәнемде һиҙмәй ҙә ҡалдым.

Өй эйәһе менән дә төрлө хәлдәр була. Мәҫәлән, әгәр ярамаған һүҙ һөйләһәм, хилафыраҡ эш ҡылһам, өйөмдең эйәһе стенаға йәки мин йоҡлаған диванды аҫтына һуға. Ғәфү үтенһәм, шыма. Әгәр ул яратмаған кеше килһә, төнө буйы дөп-дөп баҫып йөрөй, сит кеше яткан урынға менеп, һикереп төшә. Йома көн әруахтарға доғалар уҡымаһам, уларҙың тауышын сығарып, тамаҡ ҡыра.

Шуға күрә, тәбиғәтме, үҙеңдән башҡа булған тереклекте күҙәтергә, өйрәнергә, тәжрибә тупларға һәм беҙҙең менән йәнәш параллель донъя барлығына ышанырға кәрәк. Параллель донъяны рәнйетеүҙән күпме һыу баҫыуҙар, ер тетрәүҙәр, юл фажиғәләре булып тора - шуны онотмаҫҡа кәрәктәр.

**Әлимә ХӘЙРУЛЛИНА.**

✓ *Хәйбуллала ауыл хужалығы үҫеше буйынса яҡшы күрһәткестәргә өлгәшелә. Иген дә сәсә фермерҙар, меңәрләп баш мал тотҡандары ла бар араларында. Ҡаҙы, тултырма, ҡорот кеүек милли ризыҡтар етештереүселәр ҙә күбәйә.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ХӘЙБУЛЛАЛАР...

## сараларға башланғыс бирҙе

**Үткән аҙнала Өфөлә "Халыҡтар дуҫлығы һәм берҙәмлеге менән йәшәй йөҙйәшәр Башҡортостан!" тип аталған үҙенсәлекле фестиваль-марафон рәсми рәүештә старт алды. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, Башҡортостан Мәҙәниәт министрлығы, республика ҡала һәм муниципаль райондары хакимиәттәре ойоштորған был сараны Хәйбулла районынан һуң Әлшәй районы дауам итәсәк.**





"Башҡортостандың 100 йыллығына тарихи, ғилми саралар планлаштырылған, 100 йыллыҡҡа 100 объект төҙөү эше әүҙем бара. Шулай уҡ республикабыҙҙың һәр төбәге - үҙе аҫылташ. Ошоно күҙ уңында тотоп, был оло байрамға тиклем уларҙың барыһын да барлап алырға булдыҡ", - тине мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова сығышында. Ысынлап та, был сараға яҡташтар осрашыуы ғына итеп ҡарарға ярамай. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты билдәләүенсә, ул республиканың 100 йыллығына арналған, халыҡтарҙы туплаған, берләштергән байрам кимәленә күтәрелергә тейеш. Тарихты тағы ла бер тапҡыр байҡап сығып, ошо дәүер эсендә теге йәки был ҡала йә район Оло Башҡортостан өсөн нимәләр эшләгән, ниндәй күтәрелештәре, уңыштары булған - ошоларҙы күрһәтеү маҡсаты ҡуйылған. Ике йыл дауамында һәр төбәк ошо байрамға ҡушыласаҡ.

Хәйбулла районынан был сараға 150 кешенән - район етәкселәренән, артистарҙан, эшҡыуарҙарҙан торған ҙур делегация килде. Әлектән ҡаты сортлы бойҙай үҫтереү менән дан тотҡан район бөгөн дә был йүнәлештә эшмәкәрлеген дауам итә. "Бынан тыш, район иҡтисады үҫешенә ҡаҙылма байлыҡтар менән эш иткән өс сәнәғәт предприятиеһы яңы һулыш бирә. Халыҡ ситкә йөрөмәй, үҙебеҙҙә эшләй, социаль эшмәкәрлеккә лә ярҙам күрһәтеп тора был предприятиелар", - ти район башлығының социаль мәсьәләләр буйынса урынбаҫары Миңзәлә Ғөбәйҙулла ҡыҙы Баймырҙина. Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ менән дә әүҙем шөғөлләнә район халҡы. Ауыл хужалығы буйынса урынбаҫар Галина Шалашова билдәләүенсә, колхоз-совхоздар тарҡалғас, халыҡ башта аптырап ҡалһа ла, бөгөн йылҡысылыҡ, һарыҡсылыҡ, малсылыҡ, һөтсөлөк менән шөғөлләнеүселәр күп. Шуға ла һуңғы йылдарҙа Хәйбуллала ауыл хужалығы үҫеше буйынса яҡшы күрһәткестәргә өлгәшелә. Иген дә сәсә фермерҙар, меңәрләп баш мал тотҡандары ла бар араларында. Ҡаҙы, тултырма, ҡорот кеүек милли ризыҡтар етештереүселәр ҙә күбәйгәндән-күбәйә. Район хакимиәте бындай эшҡыуарҙарға төрлө ярҙам күрһәтә, хатта махсус гранттар ҙа булдырылған. Ауыл хужалығына - тап ауылдарға эшкә ҡайтыусы йәш белгестәргә матди ярҙам күрһәтеү программаһын камиллаштырҙылар, был өлкәне белгестәр менән тәьмин итеүҙе яҡшыртыр тигән өмөттә бөгөн хәйбуллалар. Боронғо шөғөлдәрҙең береһе - шәл һуғыуҙа ла Хәйбулла оҫталарының даны тотош Рәсәйгә таралған инде.

"100 йыл эсендә ең һыҙғанып, ихлас күңелдән илгә хеҙмәт итеп йәшәнек", тиҙәр хәйбуллалар. Данлыҡлы яҡташтарының исемендәге гранттар тапшырыу ҙа сараны күркәмләндерҙе. Алдынғы ҡарашлы ир-уҙаманы Ғилман Яҡупов, Хәйбулла тау-таш эше академиктары Миңнеәхмәт Моталов менән Илшат Әбделмәнов, алдынғы һауынсы Килдебай Сөләймәнов, табип Шәриф Ишимов, Ғатаулла ишан, мәғариф алдынғыһы Салауат Әбделмәнов, ҡурайсы Йомабай Иҫәнбаев, бейеүсе Мөхәмәт Иҙрисов, йыраусы Мөхәмәтйән Ҡаҙаҡбаев, бил бирмәҫ батыр Ғәззәли Үтәшев, сәсәниә Әсмә Усманова, крайҙы өйрәнеүсе Михаил Некрасов, яҙыусы Ғәзим Шафиҡов, шулай уҡ "Хәйббуланың алтын башағы", "Хәйбулла ҡурайы" гранттары эйәләре лә ошондай фиҙаҡәр хеҙмәте менән данлы. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының иң юғары наградаһы - "Ал да нур сәс халҡыңа" миҙалы райондың Ағинәйҙәр ойошмаһы етәксеһе Миңзифа Ибраһим ҡыҙы Ишемғолова менән "Түңгәүер" халыҡ ҡурайсылар ансамбле етәксеһе Илдар Юнысовҡа тапшырылды.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Был марафон республиканың дөйөм социаль-мәҙәни торошон күрһәтеүгә йүнәлтеләсәк һәм хәйбуллаларҙың Өфөләгә сығышын матур өлгө итеп ҡабул итергә мөмкиндер. Үткәндәрҙе киләсәк юҡ, ти халыҡ. Ата-бабалар хәтере, йолалар менән бер рәттән, үҙең тыуған һәм йәшәгән ерҙең тарихы ла бөгөнгө көнгә һәм киләсәккә юл һала. Ә былар иһә тотош Оло Башҡортостандың тарихын һәм мәҙәниәтен тәшкил итә. Шуға ла республика өсөн һәр төбәктең таушы мөһим һәм кәрәкле.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Февраль (Йомадиәл әүүәл - Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 12 (26) дүшәмбе | 7:17 | 8:47 | 13:30 | 16:44 | 18:14 | 19:44 |
| 13 (27) шишәмбе | 7:15 | 8:45 | 13:30 | 16:46 | 18:16 | 19:46 |
| 14 (28) шаршамбы | 7:12 | 8:42 | 13:30 | 16:48 | 18:18 | 19:48 |
| 15 (29) кесе йома | 7:10 | 8:40 | 13:30 | 16:50 | 18:20 | 19:50 |
| 16 (30) йома | 7:08 | 8:38 | 13:30 | 16:53 | 18:23 | 19:53 |
| 17 (1) шәмбе | 7:06 | 8:36 | 13:30 | 16:55 | 18:25 | 19:55 |
| 18 (2) йәкшәмбе | 7:04 | 8:34 | 13:30 | 16:57 | 18:27 | 19:57 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҒЛАН*

Ғафури районы Ҡаранйылға ауылындағы музейы эргәһендә танылған ғалим, төркиәтсе Жәлил Кейекбаевтың һәйкәлен яңыртыу һәм урынлаштырыу өсөн финанс ярҙамы күрһәтергә теләүселәр аҡсаларын **40817810906004960293** (Һаҡлыҡ банкы) иҫәбенә күсерерә ала.

**Отставкалағы медицина хеҙмәте полковнигы, ғалимдың олаталаш туғаны Әхмәт Әсхәт улы Хәбибуллин.**

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**10 февраль "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме?"** (Ф. Бүләков), трагикомедия 12+
**11 февраль "Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович) 16+
**12 февраль "Их, өс егет, өс егет..."** концерт 12+
**13 февраль "Джут"** (О. Жанайдаров), драма 16+
**14 февраль "Нәркәс"** (И. Йомағолов), мелоромантик трагедия 12+
**15 февраль "Мулла"** (Т. Миңнуллин), драматик хикәйә 12+
**16 февраль Сара Буранбаеваның** юбилей кисәһе 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**10 февраль "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+
**13 февраль "Йәнкиҫәккәйем"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**10, 11 февраль "Принцесса Крапинка"** (А. Шмидт). Башлана 16.00 0+
**10 февраль "Сказка синего моря"** (Б. Ходырев) 0+
**11 февраль "Малыш и Карлсон"** (А. Линдгрен) 0+
Спектаклдәр башлана 12.00, 14.00

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**10 февраль "Бернарда Альба йорто"** (Ф. Гарсия Лорка), драма16+
**16 февраль** Башҡортостандың халыҡ артисы **Миңниса Бакированың** юбилей кисәһе 6+

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

## "РӘСӘЙ РУХЫ"

**Халыҡ ижады өлкәһендәге "Рәсәй рухы" Рәсәй Хөкүмәте премияһына ғаризалар 2018 йылдың 1 майына тиклем ҡабул ителә.**

Премия 2006 йылда барлыҡҡа килде һәм 5 номинацияла тапшырыла: "Халыҡ музыкаһы", "Халыҡ йыры", "Халыҡ бейеүе", "Традицион мәҙәниәт", "Халыҡ оҫтаһы". Йыл һайын 100 мең һумлыҡ 15 премия билдәләнә. Өҫтәмә мәғлүмәттәр +7(495) 628 65 92 телефоны буйынса.

Былтыр был премия Сибай сәнғәт колледжы эргәһендәге "Урал батыр" сәсәндәр мәктәбе етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, сәсәниә Асия Ғәйнуллинаға тапшырылғайны.

## ЯҢЫ ПРЕМЬЕРА

**Ҡаҙағстандың йәш режиссеры Айдын Салбанов Салауат башҡорт драма театрында яңы спектакль ҡуя. Илгиз Зәйниев пьесаһы буйынса сәхнәләштерелгән "Люстра" спектакленең премьераһы 27 февралгә тәғәйенләнгән.**

Салбанов Айдын - режиссер, Көнсығыш Ҡаҙағстан Йәштәр театрының художество етәксеһе. Уның исеме башҡорт театр йәмғәтселегенә күптән таныш. Ул былтыр Өфөлә үткән режиссерҙар лабораторияһында еңеү яулағайны: уның А. Вампилов әҫәрҙәре буйынса "Прошлым летом в Чулимске" тигән эскизы иң яҡшыһы тип табылды.

✓ *Бөгөн донъя нәфрәт менән сирләй. Әгәр ҙә беҙ ошоға ҡаршы дарыу тапмаһаҡ һәм нәфрәтләнеүселәрҙе күрә алмауҙы дауам итһәк, үҙебеҙ нәфрәт һаҙлығына батасаҡбыҙ. (И. Ильин).*



СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# СӘХНӘ ЙОНДОҘО УЛ!

**Стәрлетамаҡ башҡорт драма театрында 16 февралдә Башҡортостандың халыҡ артисы Минниса Бакированың "Күңелдәген әйтмәй ярамаҫ" тип аталған юбилей кисәһе үтәсәк.**

Стәрлетамаҡ театрын Ниса Бакированан башҡа күҙ алдына ла килтереп булмай. Йылдан-йыл үҙенең тырышлығы, таланты менән режиссерҙар өсөн оло табышҡа әйләнһә, тамашасыларҙың яратҡан актрисаһына әүерелә. Актриса һәр ваҡыт һөйләү теленең байлығы, мәғлүмәтлелеге, тәрән фекерле булыуы менән айырылып тора. Ниса Бакирова - универсаль ижадсы: ҡайғы даръяһымы, эс ҡатырғыс көлкөмө, мөхәббәт тойғоларымы, төрлө йәштәге геройҙарҙың күңел донъяһымы - барыһы ла актрисаға "баш эйгән". Тормошсан һәм характерлы ролдәр тыуҙырған ҡабатланмаҫ шәхес ул. Башҡарған ролдәренең иҫәбе-һаны юҡ. Төрлө йылдарҙа уҙған "Театр яҙы" республика фестивалендә: 1994 йылда Ф. Бүләковтың "Онотолған доға" легенда-ялбарыуында - Тауҡай, 2005 йылда Р. Кинйәбаевтың "Ә Торатау һаман тора..." спектаклендә Миңһылыу ролдәре менән - лауреат, 2009 йылда Ф. Бүләковтың "Һөйәһеңме, һөймәйһеңме..." драмаһында Сәлимә роле менән "Иң яҡшы төп ҡатын-ҡыҙ роле" номинацияһында еңеүсе була. 2010 йылда республика башҡорт драматургияһы фестивалендә Ф. Бүләковтың "Мәскәү-Васютки" спектакленең Гран-приға лайыҡ булыуы Ниса һәм Филарит Бакировтар өсөн оло ижади бейеклеккә әүерелә.

Бөгөн Ниса Бакирова Стәрлетамаҡ театрында бай тәжрибәле актриса ғына түгел, ә республика, хатта Рәсәй театр сәнғәте күгендәге яҡты йондоҙ, башҡорт сәхнәһенең primaһы ул. Юғалтыуҙар актрисаны көслөрәк итте, хеҙмәттә үткән ярты быуат уны арытманы, тамашасы һөйөүе иһә күңел сәскәһенә шиңергә форсат бирмәне, әле лә ул сәхнәлә төп ролдәрҙә, ә коллегалары араһында - ихтирамлы шәхес!



Эйе, йондоҙло сәғәттәре күп булды сәхнә оҫтаһының... Оҙайлы алҡыштар, ҡосаҡ-ҡосаҡ сәскәләр, һоҡланыу һәм һөйөү тулы ҡараштар. Тормошон сәхнә менән бәйләгән һәр кемдең хыялы, ынтылғаны шул түгелме ни? Яратҡан эшендә бәхетен тапҡан Башҡортостандың халыҡ артисы Ниса Бакированың хыялы тормошҡа ашты, тип ышаныслы әйтә алабыҙ һәм Хоҙайҙан бирелгән таланты алдында йәнә бер тапҡыр баш эйәбеҙ.

**Гөлдәр СОБХАНҒОЛОВА.**

ИҒТИБАР: АКЦИЯ!

# ҺӘР КЕМ УҠЫРҒА ТЕЙЕШЛЕ...

## йөҙ башҡорт китабы

**"Башҡорт китабы топ-100+" акцияһына килгән хаттарҙы барлауҙы дауам итәбеҙ. Һеҙ ҙә башҡорт әҙәбиәтендә һәр быуын кешеһенең иғтибарына лайыҡ әҫәрҙәрҙе/китаптарҙы тәҡдим итеүҙән туҡтамағыҙ, хөрмәтле гәзит уҡыусылар!**

***87. Миләүшә Ҡаһарманова "Бетерә шаршыһы" китабы.*** Был талантлы яҙыусының ижадына битараф ҡалыу мөмкин түгел, уның һәр әҫәре халыҡсан, тормошсан булыуы менән күңелгә ята. "Бетерә шаршыһы" китабында ошо уҡ исемдә йөрөткән повесы һәм хикәйәләре тупланған. Бетерә йылғаһының шәп ағымы кеүек шау-гөр килеп үткән ғүмерҙә һәр кемдең үҙ яҙмышы. Маңлайына яҙғанды күргән әҙәм балаһының тормошо әллә күпме үҙгәрештәр кисерә, ә был донъя ошо йылға кеүек үҙгәрешһеҙ ҡала килә. Автор ҙур илдең бер бәләкәй генә кешеһе яҙмышы аша бер быуат эсенә һыйған зар, шатлыҡ, үкенес, бәхет, ауырлыҡ, еңеллектәрҙе сағылдыра. Геройҙар менән бергә уҡыусы ла ошо хистәрҙе кисерһен һәм, бәлки, үҙ яҙмышына шөкөр итһен, тигән фекерҙе еткерергә теләгән кеүек ул. Был китапҡа тупланған һәр әҫәрҙең йөкмәткеһенән, мәғәнәһенән һәр кем үҙенсә ҡабул итер, әлбиттә. Әммә ҡулға алып уҡырлыҡ китап, тигән раҫлау менән бөтәһе лә килешер.

***88. Риф Мифтахов "Йән атыу" китабы.*** Йыйынтыҡтың тәүге битендә авторҙың уҡыусыларына мөрәжәғәте бирелгән. "Ике йорт төҙөнөм. Баҡсамдағыһы бөтөү өҫтөндә... Икенсеһе - шиғриәт: йөрәк, аҡыл, унан ғына ҡул менән төҙөлөр "йорт", - тип башлай һүҙен шағир. Был китапта уның икенсе "йортон" тәшкил иткән байтаҡ шиғырҙары һәм "Аҡйылға" тип аталған поэмаһы бирелгән. Поэма 1989 йылда баҫылған йыйынтыҡҡа индерелһә лә, унда күтәрелгән проблема - ауылдарҙың юҡҡа сығыуы, һаманғаса актуаль. Автор әллә нисә быуатлыҡ тарихы булған тыуған ауыл усағын һүндермәй һаҡлау ғына түгел, быуындар мөнәсәбәте, аманат итеп ҡалдырылған мәңгелек ҡиммәттәргә хыянат итмәү, туған телде белеү темаларын да күҙ уңынан ысҡындырмай. Йыйынтыҡтағы тыуған ил, кеше тойғолары һәм холоғо, тормош фәлсәфәһенә бағышланған башҡа шиғырҙарға сәпкә тейерлек тура һүҙ ҙә, аҡыллы һәм ғәмлеләр күңеленә етерлек йәшерен мәғәнә лә һалынған.

***89. Гөлсирә Ғиззәтуллина "Йәшәргә ваҡыт" китабы.*** Был китаптың аннотацияһында "Артабан йәшәргә бөтөнләй теләгең ҡалмағанда нисек үҙеңдә көс табырға? Ниңә бәхет йыш ҡына инде бер ниндәй ҙә өмөт юҡ һымаҡ тойолған саҡта килә? "Йәшәргә ваҡыт" китабының геройҙары был һорауҙарға үҙ яҙмыштары менән яуап эҙләй", тигән юлдар бар. Был китапҡа ингән хикәйә, повесть һәм эсселарҙың атамалары уҡ ошо һорауҙарға авторҙың яуабы ниндәй булырын сағылдыра. "Йыһан ергә түңкәрелгән мәлдә", "Йәшә, егет" тигән повестары психологизмы, донъяға ҡарашы менән айырылып тора. Автор кешене был донъяла өмөт йәшәтеүен күрһәтә. Был йыйынтыҡ һәр башҡорт кешеһе уҡый торған китаптар исемлегенә уҡыусы йөрәгендә ғәм уятырлыҡ булған өсөн индерелергә тейеш.

***90. Барый Ноғоманов "Дәүер шаңдауҙары" китабы.*** 2001 йылда донъя күргән был китапҡа авторҙың "Ыңғырашҡан ауыл", "Мин уйнармын, һин йырларһың...", "Ҡар кешеһе" тип аталған повестары ингән. Китаптың исеме есеменә тап килеп тора, сөнки Барый Ноғомановтың әҫәрҙәре һәр ваҡыт замандың актуаль проблемаларын, һыҙаттарын сағылдыра. Хатта уның фантастик әҫәрендә лә тормоштоң ауыр ысынбарлығы, кешелек донъяһы бер ниндәй арттырыуһыҙ һүрәтләнә.

**"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһына ҡушылығыҙ, үҙегеҙ уҡыған башҡорт китаптары/әҫәрҙәре араһынан иң-индәрен һайлап, шулар тураһында редакциябыҙға төбәп хаттар яҙығыҙ. Йәки "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге "Киске Өфө" гәзите" төркөмөндә махсус булдырылған **"Башҡорт китабы топ-100+"** акцияһы" тип аталған фекер алышыу битендә "#башкитап" хештегы ҡуйып, үҙ фекерегеҙҙе белдерегеҙ!

**Рубриканы Сәриә ҒАРИПОВА алып бара.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# КӨН КҮРМӘҪ...

## көндөҙ йоҡлар, кис торор

Һәр бүренең балаһы алты булыр, биш булыр; араһында ғәйрәтлеһе бер булыр; шул ғәйрәтленән айырылһа, һәр ҡайһыһы һәр көндә һәр бер эткә ем булыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Белемле кеше - ул оҡшашлыҡтар таба белгән кеше. Ахмаҡтар өсөн һәр нәмә - өр-яңы.

**(Зигмунд Графф).**

Бөгөн донъя нәфрәт менән сирләй. Әгәр ҙә беҙ ошоға ҡаршы дарыу тапмаһаҡ һәм нәфрәтләнеүселәрҙе күрә алмауҙы дауам итһәк, үҙебеҙ нәфрәт һаҙлығына батасаҡбыҙ.

**(И. Ильин).**

Кешеләрҙе юҡҡа ғына йүнлегә һәм йүнһеҙгә бүләбеҙ. Ә бит был тормошта йүнлеләр йүнһеҙҙәрһеҙ йәшәй алмай.

**(Н. Шамфор).**

Икейөҙлө - ул ата-әсәһен үлтереп, үҙен етем булараҡ йәлләүҙәрен һораған әҙәм.

**(А. Линкольн).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡомһоҙ бер сауҙәгәр баҙарҙа йөрөгәндә үҙенең көшөләгөн юғалта. Йүгергеләп эҙләп ҡарай, әммә аҡсаһын таба алмай. Шунан ул көшөләгөн тапҡан кешегә йөҙ һум бирергә вәғәҙә итеүе тураһында иғлан итә. Юғалған көшөлөктө Вәли исемле итексе табып ала. Ул бик ғәҙел һәм намыҫлы кеше була. Табып алған көшөлөктең хужаһы билдәле булыу менән сауҙәгәр эргәһенә йүнәлә һәм уға көшөләгөн ҡайтарып бирә. Сауҙәгәр бик һаран һәм оятһыҙ кеше була. Көшөлөктөң табылыуына ҡыуанһа ла, быны белдермәй, аҡсаһын иҫәпләп ҡарай ҙа, Вәлигә былай ти: "О, дуҫ кеше, һин үҙеңә тейешле йөҙлөктө алғанһың икән".**

**Уның алдашҡанына йәне көйгән Вәли сауҙәгәрҙе яғаһынан ала: "Мин ярлы кеше, әммә бур түгел. Аҡсаңды бирмәһәң бирмә, әммә миңә яла яғаһы булма", - ти ул сауҙәгәргә. Оятһыҙ сауҙәгәр яла яғыуҙы дауам итә. Шунан улар судьяға киләләр. Судья ике яҡты ла тыңлап тора ла, эсенән генә шундай һығымта яһай: сауҙәгәр алдаша. Әммә йәне көйгәнен белдермәй генә үҙенең ҡарарын еткерә: "Сауҙәгәр көшөлөгөндә йөҙ тәңкәһе етмәй, ти. Ә итексе көшөлөктәге аҡсаға теймәгәнен раҫлай. Уларҙың икеһе лә дөрөҫтө һөйләй. Тимәк, итексе тапҡан был көшөлөк икенсе бер кешенеке булып сыға һәм эйәһе табылғансы, ул миндә ҡаласаҡ". Ҡомһоҙ сауҙәгәр үҙенең ҡылығына үкенә, әлбиттә, әммә һуң була..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы: **Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы: **450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Выпуск издания осуществлен при финансовой поддержке Федерального агентства по печати и массовым коммуникациям.**

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 9 февраль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 237/02